ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 май (һабанай) 2018

№20 (802)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡоро ағас йыйырға ла...**



закон рөхсәт итеүе кәрәк 3

**Яугирҙарыбыҙ...**



сик буйын да һаҡлаған! 6-7

**Туған теленде белмәү оят -**

күп йәштәрҙең ошоно аңлауы ҡыуандыра



8-9

**Бер осрашыу - үҙе бер ғүмер**



11-12

**ТВ-программа** 14

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Июнь аҙағына тиклем һеҙ 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 560 һум 82 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары - 505 һум 08 тингә, 50673 индекслы (юридик ойошмалар һәм предприятиелар) "Киске Өфө"гә 590 һум 82 тингә яҙыла һәм теләгәндәр квитанцияларын редакцияға ебәреп, Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан"; Миләүшә Ҡаһармановaның "Күңелем йылы теләй"; Зөлфиә Ханнанованың "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ"; Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре" һәм башҡа матур китаптарға эйә була ала. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Сәләмәт булырға теләһәң - ураҙа тот", тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм. Был һүҙҙәрҙе һеҙ нисек аңлайһығыҙ?

*Нурмөхәмәт хәҙрәт НУРИЕВ, дин әһеле:* Аллаһы Тәғәлә Рамаҙан айын беҙгә бүләк итеп биргән. Мосолмандар ярты йыл дауамында уны көтөп ала, шунан тағы ярты йыл уның сауаптары, файҙаһы һаҡланһын тип тырыша: тәртибен паклай, холҡон камиллаштыра бара, әҙәп менән, һәр көн изгелектәр ҡылып ҡына йәшәргә ынтыла. Ураҙаның иң беренсе сауабы - ул Аллаһы Тәғәлә ризалығы. Шуның менән бергә уның кеше организмы өсөн дә файҙаһы сикһеҙ. Әммә бер нәмәгә иғтибар итеү кәрәк: ураҙаны кеше, ябығайым йәки һауығайым, тип, файҙа өсөн тотмай. Иң беренсе шарт - ул ихласлыҡ, дөрөҫ ниәт менән башлау. Уның ҡағиҙәләрен белеү талап ителә. Ас кешенең асыуы яман, тиҙәр бит, юғиһә. Ҡағиҙәне белеп еткермәһә, кеше асығыуҙан, һыуһауҙан, йонсоуҙан, хроник сире ҡуҙғыуҙан негатив тойғоға бирелеп алыуы ла бик ихтимал. Ә ураҙала булғандар һәм, ғөмүмән, мосолман өсөн фарыз ғәмәл - тыйылғандан тыйылыу, асыу, ризаһыҙлыҡ тойғоларынан өҫтөн ҡала белеү, күҙеңде, ҡолағыңды, ауыҙыңды, ҡулыңды, аяғыңды тиҫкәре йоғонтонан һаҡлау кәрәклеген аңлау дәрәжәһендә булырға тейеш. Фәҡәт шул саҡ ураҙалы кеше рухи таҙарыныуға өлгәшә. Сирлене дауалағанда табиптар дөйөм һауыҡтырыу саралары тәғәйенләй, ҡайһылары комплекслы дауалау ысулына өҫтөнлөк бирә. Ураҙа ла шулай. Ас, һыуһыҙ тороу ғына файҙа бирмәҫ, әгәр ул рухи таҙарыныу күнекмәләре менән бер ҡатарҙан алып барылмаһа. Рухи камиллашыу юлында иң мөһиме - мөмкин тиклем күберәк Ҡөрьән уҡыу, күберәк дини һабаҡтар өйрәнеү. Рухи үҫештең йәнә лә бер юлы - иғтиҡад. Был иһә Тибет тәғлимәтендәге һымаҡ, кешенең бөтөн донъяуи мәшәҡәттәрҙән, ғаилә мөнәсәбәттәренән арынып, Аллаһы Тәғәлә менән тыныслыҡта, "күҙмә-күҙ" ҡалып, тәүлектәр буйы (кәм тигәндә - 10 көн) ваҡытын доға ҡылып, Ҡөрьән уҡып мәсеттә үткәреүе. Был кешене рухи йәһәттән сыныҡтыра, таҙарындыра. Ураҙаның тағы бер мөһим әһәмиәте бар: ул Рамаҙан һуңында үҙенә ҡарағанда мохтажыраҡ кешеләр менән байрам шатлығын уртаҡлашыу, улар хаҡында хәстәрлек күреү, хәлдәренә инеү, хәйер таратыу.

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

# "БАШҠОРТОСТАН БАТЫРЫ" - УЛ...

## көс һәм рух тантанаһы

**Үткән шәмбе Өфөнөң "Ҡунаҡһарай" комплексы эргәһендәге майҙанда көс экстримы (стронгмэн) буйынса Бөтә Рәсәй турниры уҙҙы. Планетаның иң көслө кешеһе чемпионаты вице-чемпионы, дүрт тапҡыр Рәсәйҙең иң көслө кешеһе титулына эйә булыусы, пауэрлифтинг һәм армреслинг буйынса Рәсәйҙең спорт мастеры Эльбрус Ниғмәтуллин тарафынан Өфө ҡала округы хакимиәте ярҙамы менән ойошторолған турнирҙа Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән ун өс бәһлеүән ҡатнашты. Уларға биш төрлө һынау: 28 килограмлыҡ суҡмарҙы алыҫлыҡҡа ырғытыу, 1 минут эсендә 210 килограмлыҡ бүрәнәне күтәреү, һәр береһе 110-ар килограмм тартҡан ике "сумаҙанды" тотоп, 50 метрға йүгереү, 17 тонналыҡ тағылмалы МАЗ йөк автомашинаһын һөйрәү, "Лада-Ларгус" автомобилен күтәреү һымаҡ һынауҙар аша үтергә тура килде. Биш һынауҙың дүртеһе был спорт төрө өсөн ғәҙәти булһа, башҡорттоң боронғо яу ҡоралы булған суҡмар ырғытыу иһә, Эльбрус Ниғмәтуллиндың стронгмэн ярышына индергән үҙенсәлекле яңылығы тип билдәләнде һәм Рәсәйҙең иң көслө атлеттары тарафынан йылы ҡабул ителде.**

(Дауамы 5-се биттә).




12+

✓ *Махсус тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, ураҙа ваҡытында ҡан баҫымы һәм ундағы шәкәр кимәле түбәнәйә икән. Тәүге стадияла организм ҡалдыҡ матдәләр һәм тоҙҙарҙан таҙарына башлай.*



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАЛЫҠ...

## тәрәндә генә йөҙә

***Хәлис КИЛДЕҒОШОВ, "Аҡбуҙат" ипподромының мал табибы:*** Милләт үҙенең телен, илен үҙе һаҡларға тейеш. Шунһыҙ милләттең бәҫе, ғорурлығы юҡҡа сыға. Илһеҙ кеше һыуһыҙ үҫкән гөл кеүек, ил киләсәген хәстәрләп йәшәү һәр кемдең төп бурысы.

Әлбиттә, һәр милләт үҙ еренә ерегеп йәшәһен, милләтенә балалар үҫтерһен өсөн дәүләт тә хәстәрлек күрергә тейеш. Мәҫәлән, беҙҙең халыҡты күҙҙә тотҡанда шуны әйтер инем: Башҡортостан аграр төбәк, халыҡтың күпселеге ауылдарҙа йәшәй. Хөкүмәт ярҙамынан тыш, ауыл ерендә ниҙер етештереп, килем алыу эшен ойоштороуы ауыр. Бөтә нәмә илдең иҡтисад өлкәһендәге сәйәсәтенә бәйләнгән, кешегә ил-йортҡа кәрәкле әйберҙе етештереп, ҡулланыуға сығарыу эшен ойоштороу өсөн махсус программа төҙөргә кәрәк. Юғиһә йә эш башларға аҡса юҡ, йә етештергән продукцияны һатып алыусыһы табылмай.

Йыш ҡына шундай фекер ишетергә тура килә: ялҡау булмаған кеше бер йүнен күреп, эшен эш итергә юлын да, мөмкинлеген дә таба, тиҙәр. Бөтәһе лә улай йылғыр булмай, хөкүмәттән этәргес ниндәйҙер ярҙам күрмәйенсә, үҙ көсөнә генә таянып, масштаблы эште яйға һала алыусылар һирәк. Элек, совет заманында, һөйәккә тиклем йыйып, уны тапшырған балаларға һыҙғыртҡыс бирә, йә аҡсаға алмашалар ине. Бөгөн ауылдарҙа һөттө йыйыусы ла, уны ҡабул иткән һөт заводы ла, һатыуға сығарыусыһы ла юҡ кимәлендә. Һауып алынған яңы һөттөң хаҡы 14 һум тора, порошоктан эшләнгәнен магазиндарҙа 50 һумға һатып алабыҙ. Ит һатыу буйынса ла шул хәл: ауылда етештерелгән малсылыҡ продукцяһын ит комбинатына ҡабул итмәйҙәр, баҙарға алып барыу өсөн мәшәҡәте күп, ситтән килеп һатып алыусылар тейешле хаҡын тәҡдим итмәй. Мал көткәс, уның файҙаһын да күрергә теләй ауыл кешеһе, әммә уның хеҙмәте тейешле баһаланмай бөгөн, ярҙам да юҡ. Килем булмағас, хәҙер ауылда мал тотҡан кешеләр ҙә һирәгәйҙе, ситкә китеп аҡса эшләп, һатып алып ашауҙы өҫтөн күрә башланылар. Ә улар аҡсаны Себер тарафтарына китеп эшләй, бигерәк тә йәштәребеҙ күңеленә ятҡан эш урыны, эш хаҡы булмаһа, аптырап тормай, ситкә сыға ла китә. Был проблемаларҙың бөтәһен бер юлы хәл итеп булмай, һәр өлкә буйынса бер юлы эшләргә, үҫтерергә хөкүмәттең планы булырға тейеш. "Тейеш" тип әйтәбеҙ күп нәмәне, ысынбарлыҡта әлеге көндә алға китеш, үҙгәрештәр һиҙелмәй. Башҡортостан территорияһы буйынса Татарстанға ҡарағанда ике тапҡырға ҙур, тимәк, халыҡ һаны ла, эш урындары ла, производство ла, эш һөҙөмтәһе лә ике тапҡырға күп булырға тейеш. Уйланырға урын бар. Балыҡ ҡайҙа тәрән, шунда йөҙә. Кешеләргә эш урындары булдырыу, хеҙмәте өсөн тейешле түләү, йәшәү кимәлен күтәреү бик мөһим бөгөн. Бына шул минең әйтергә теләгән һүҙҙәр.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# "Сәләмәт булырға теләһәң - ураҙа тот", тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм. Был һүҙҙәрҙе һеҙ нисек аңлайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Сәлимә СУФИЯНОВА, һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәре:*** Ураҙа - ул көнө буйы асығып-һыуһап йөрөгәндән һуң, кис эс күпкәнсе ашап ятыу түгел. Ҡояш яҡтыһы мәлендә ашау-эсеүҙән тыйылып тороуҙың үҙ мәғәнәһе, ғилләһе бар. Сығышына, матди хәленә ҡарамайынса, Аллаһ алдында бөтә кешенең дә тигеҙ булып, берҙәмләшеп, бер үк төрлө һынау үтеүе барлыҡ менән юҡлыҡ айырмаһына төшөнөргә, фәҡирҙәрҙең хәлен аңларға, уларға ҡарата мәрхәмәтле булырға өйрәтә. Икенсенән, ураҙа ғәмәленең кеше ихтыярын тәрбиәләүсе, нәфсене тыйыусы һәм сабырлыҡҡа өйрәтеүсе булараҡ әһәмиәтен дә оноторға ярамай. Һөҙөмтәлә ураҙа тотоусының йәне тыныслыҡ таба, күңел күҙе асыла, зиһене уяна. Ураҙаның сәләмәтлеккә ыңғай йоғонтоһон хәҙер фән һәм медицина ла таный. Махсус тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, ураҙа ваҡытында ҡан баҫымы һәм ундағы шәкәр кимәле түбәнәйә икән. Тәүге стадияла организм ҡалдыҡ матдәләр һәм тоҙҙарҙан таҙарына башлай һәм был бер аҙҙан үҙен һиҙҙерергә мөмкин. Икенсе осорҙа организм яңы режимға күнегә төшә, аш һеңдереү ағзалары ял итә. Өсөнсө осор организмдың ҡеүәте арта, зыянланған ағзалар яҡшыраҡ эшләй башлай, хәтер һәм иғтибар көйләнә. Һуңғы фазала иғтибар, хәтер яҡшыра, организм зыянлы ҡалдыҡтарҙан таҙарына.

Әйткәндәй, ураҙала туҡланыу хаҡында бер нисә һүҙ. Был осор һәм, ғөмүмән, еңел үҙләштерелеүсе аҙыҡҡа өҫтөнлөк биреү кәрәк: йәшелсә-емеш, банан, ярма бутҡалары, сөтләүектәр, күрәгә, ҡара емеш, йөҙөм кеүек киптерелгән емеш. Сәхәргә ярма бутҡаһы, сыр, йомортҡа әҙерләһәгеҙ, ифтарҙа ла майлы ит, ҡыҙҙырылған картуф кеүек ауыр үҙләштерелеүсе ризыҡ менән мауыҡмау хәйерле. Финик емеше бик файҙалы, ғалимдар уның ғәжәп үҙенсәлектәргә эйә булыуы тураһында яҙа. Ҡөрьән аяттарында юҡҡа ғына телгә алынмағандыр был емеш. Уның составында еңел үҙләштерелеүсе шәкәр - фруктоза күп, ләкин ул ҡәҙимге шәкәр кеүек, ҡанда шәкәр кимәлен ҡырҡа күтәрмәй. Финикта баш мейеһе, зиһен сәләмәтлеге өсөн файҙалы булған тиҫтәнән ашыу элемент, айырыуса магний, аҡһым күп; B6 витаминына бай; был емеш организмдың сиргә ҡаршы тороу һәләтен арттыра. Ғалимдар фекеренсә, кеше фәҡәт финик һәм һыу менән туҡланып ҡына ла йылдар буйы йәшәй алыр ине. Һыу, тигәндән, уны көнөнә 2,5 литр самаһы эсергә ҡушыла: йәшел сәй, емеш компоттары, еңелсә тоҙло һыу, ә бына татлы, газландырылған эсемлектәрҙе ҡулланмау хәйерле.

***Илшат ХАФИЗОВ, Ишембай районының имам-мөхтәсибе:*** Ураҙаны күптәр тота, ләкин сауапты барыһы ла бер төрлө алмай. Бөтөн ураҙалы ла әжер-сауаптар ҡаҙанһа ла, төрлөһөнөң дәрәжәһе төрлөсә була. Ураҙаның төп мәғәнәһе шунда: кеше йөрәген гонаһтарҙан һаҡлау, уны тәрбиәләү. Имам Ғәзәли ураҙа тотоусыларҙы өс төргә бүлгән:

- Ябай ураҙа тотоусылар. Ашамай, эсмәй, яҡынлыҡ ҡылыуҙан үҙен тыйыусы мосолман.

- Тәҡүә мосолмандар. Улар ашамай, эсмәй, яҡынлыҡ ҡылыуҙан тыйылып ҡына ҡалмай, харам нәмәләргә ҡарамайҙар, ғәйбәт тыңламайҙар, буш һүҙ һөйләмәйҙәр, гонаһ ҡылмайҙар. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм: "Ғәйбәт һөйләү - үлгән ҡәрҙәшеңдең итен ашау", - тип әйткән.

- Ныҡ тәҡүәлеләр. Былар алдағы шарттарҙан тыш тағы ла үҙ-үҙҙәрен тәрбиәләүселәр, ураҙаны иманын күтәрер өсөн, Аллаһы Тәғәлә алдында дәрәжәһен арттырыр өсөн ҡулланыусылар. Иң әүәл улар үҙҙәренең күҙҙәрен һаҡлаған. Насар телетапшырыуҙар, тышта ғәүрәтен ҡапламай йөрөгәндәргә ҡарамаған. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм әйткән: "Биш нәмә ураҙаны боҙор: ялған һөйләү, һүгенеү, ғәйбәт һөйләү, ялған ант биреү, шәһүәт менән ҡарау". Телде һаҡлау ҙа бик мөһим. Рамаҙанда һүгенеүҙәрҙән, буш һүҙҙәрҙән, талашыуҙарҙан, һүҙ көрәштереүҙәрҙән тыйылырға ҡушылған. Үҙ-үҙеңде контролдә тоторға өйрәнергә лә, Рамаҙан айы бөткәс тә шулай булып ҡалырға ҡушылған. Был бәрәкәтле ваҡытты Ҡөрьән уҡыуға, зекер әйтеүгә, балаларыңа белем биреүгә сарыф итергә кәрәк. "Ураҙа ул - ҡалҡан, ураҙалы булғас, һүгенмәһен үә насар һүҙҙәр һөйләмәһен. Әгәр берәйһе уның менән һүҙгә килһә "Мин ураҙалы, мин ураҙалы", тиһен", - тигән Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм. Ҡолағыңды һаҡлау - ул ғәйбәт, ялған, йүнһеҙ һүҙҙәрҙе тыңламау. Ҡөрьән-Кәримдә "Мәидә" сүрәһенең 42-се аятында Аллаһы Тәғәлә ялғанды һөйләү түгел, хатта тыңлауҙы харам ризыҡ ашау менән тиңләгән. "Ялғанды тыңлаусылар - бысраҡ ашаусылар..." Насар һүҙҙәр һөйләүсе менән тыңлаусы - гонаһта тигеҙ. Шулай уҡ ашҡаҙаныңды харам ризыҡтан, аяҡтарыңды йүнһеҙ урынға барыуҙан, мәҫәлән, эске мәжлесенән, ҡулдарыңды кеше малына һуҙыуҙан һәм башҡаларҙан һаҡларға кәрәк. Ураҙа тотоусы ашағанда туймаҫтай булып ашарға тейеш түгел. Күп ашаһа ла, аҙ ашаһа ла - барыбер ураҙа тотоласаҡ, әлләни асыҡтырмаясаҡ. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм әйткән: "Кешенең тултырған һауыттарының иң насары - уның ашҡаҙаны. Баҫып торор өсөн әҙәм балаһына бер нисә киҫәк тә етә. Әгәр инде ризыҡ күп булып, ашарға кәрәк булһа, ашҡаҙанының өстән берен ризыҡҡа, өстән берен һыуға үә ҡалғанын тын алырға ҡалдырһын."

Ураҙа беҙгә үҙебеҙҙең нәфсебеҙҙе тәрбиәләүҙә ныҡ ярҙам итә. Аллаһы Тәғәлә Рамаҙан айында оло шайтандарҙы бығаулау сәбәпле, изгелектәр ҡылыу еңелләшә. Мәсеттәр тула, күп саҙаҡалар бирелә. Башҡа ваҡытта ҡунаҡҡа тип саҡырһаң да, төнөн мәсеткә халыҡты йыйып булмаҫ. Ә Рамаҙанда мосолмандар төнө буйы мәсеттә намаҙҙар уҡый.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Дәүләт Йыйылышына һайлауҙа "Берҙәм Рәсәй" праймеризында ҡатнаша. Праймеризда республика хөкүмәте вице-премьеры, бер нисә министр, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов та ҡатнаша. Бынан тыш, алдан тауыш биреүгә Ейәнсура районы хакимиәте башлығы Әлфәрис Байсурин теркәлгән.

✓ Республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты мәғлүмәте буйынса, 29 апрелдән 9 майға тиклем Башҡортостанға 40 меңдән ашыу турист килгән. Был уҙған йылға ҡарағанда 23,5 процентҡа күберәк. Һауыҡтырыу һәм экологик туризм әүәлгесә популяр, дини сәйәхәттәр артҡан. Ирәмәлгә күтәрелеү, "Ҡандракүл", "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт парктарына, "Башҡортостан" милли паркына, "Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығына барыусылар күп. Әүҙем ял итергә яратыусылар араһында тау йылғалары бик популяр.

✓ 18-25 майҙа Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы, Ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау буйынса консультация үҙәге мәктәп уҡыусылары һәм балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәренең ата-әсәләре өсөн "ҡыҙыу элемтә" ойоштора. Республика халҡына мәктәптәрҙә һәм балалар баҡсаларында туҡланыу һорауҙары буйынса консультация бирәләр. "Ҡыҙыу элемтә" телефондары: 8 800 700 90 30; 8 (347) 287 85 18. Шылтыратыуҙар эш көндәрендә иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 4-кә тиклем ҡабул ителә.

✓ Шәмбе, 19 майҙа, Өфөнөң Конгресс-холында тәүгә "Ата-әсә ҡаһарманлығы" миҙалы тапшырыла. Ошо награда менән республикаға дан килтергән балаларҙы тәрбиәләгән ата-әсәләрҙе, шулай уҡ күп балалы ата-әсәләрҙе (уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алыусыларҙы, опекундарҙы, ҡарауға алыусыларҙы) бүләкләйҙәр. Тантана Башҡортостанда барған "Ғаилә аҙнаһы" сиктәрендә үтә.

✓ Башҡортостанда "Һуңғы ҡыңғырау" көндө алкоголь һатыу тыйылған. Тыйыу республика биләмәһендә 2017 йылда ғәмәлгә инде. Уны боҙған өсөн продукцияны тартып алыу йәки вазифалы кешеләргә 20-40 мең һум, юридик шәхестәргә 100-300 мең һум штраф яҙаһы ҡаралған.

✓ *Әммә шуныһы бәхәсһеҙ: кеше тәбиғәттән ни тиклем алыҫлашһа, уның төп докторы булған иммунитеты шул тиклем ҡаҡшай һәм уның урынын прививкалар, вакциналар яулай.*



ДЕПУТАТ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ



# ҠОРО АҒАС ЙЫЙЫРҒА ЛА...

## закон рөхсәт итеүе кәрәк

**Рәсәй - урмандар иле. Ағас запасы буйынса донъя илдәре араһында ул тәүге урында тора. Әммә был тәбиғәт байлығының сиге юҡ, тигәнде аңлатмай. Урман беҙҙең һаҡсыл ҡарашыбыҙға гел мохтаж. РФ Дәүләт Думаһы күптән түгел яңы закон ҡабул итте. Ул урманды һаҡлауға ла, халыҡҡа ярҙам итеүгә лә йүнәлтелгән. Ошо турала Дәүләт Думаһы депутаты, закон авторҙарының береһе Зариф Закир улы БАЙҒУСҠАРОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**➔ Дәүләт Думаһы ҡабул иткән был яңы закон халыҡҡа үҙ мәнфәғәтендә ҡулланыу өсөн урмандағы ҡоро ағастарҙы йыйырға рөхсәт бирәсәк. Был мәсьәлә күптән хәл итеүҙе көтә ине, ахыры?**

- Урман кодексының 32-се статьяһына индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, ҡороған ағастар ағас булмаған ресурстарға ҡараясаҡ. Ошоға тиклем ҡороған ағасты йыйыу законһыҙ рәүештә ағас әҙерләү, тип иҫәпләнә ине. Был ағасты файҙаланыу өсөн район үҙәгенә барырға, документтар тултырырға кәрәк ине. Ә бит халыҡ электән урмандағы ҡоро ағасты йыйырға өйрәнгән. Закон хәҙер уларға ошоға юл аса. Закон ҡабул ителгәс, социаль селтәрҙәрҙә: "Бушлай ҡоро-һары сыбыҡ йыйырға рөхсәт иткәнгә ҡыуана халыҡ", - тип көләүселәр ҙә күренгеләне. Беренсенән, һүҙ сыбыҡ тураһында ғына бармай. Икенсенән, ҡороған ағас хужалыҡта файҙалы әйбер. Үҙем дә ауылда тыуып-үҫкән кеше булараҡ, беләм, ҡоро ағас донъя эшендә бик кәрәк. Имән, ҡарағас ағастары ҡаты, ныҡ була, атайым, мәҫәлән, бағана итеп ултыртыу өсөн ҡоро имәнде ҡуллана ине.

Закон халыҡтың көнкүрешен дә еңеләйтәсәк, урманды һаҡлауға ла өлөш индерәсәк. Бөгөн нимә күрәбеҙ: ҡороған ағастар ҡолап, урман юлдарын машиналар өсөн үткеһеҙ иткән. Янғын була ҡалһа, машиналар урманға инә лә алмаясаҡ. Унан һуң, ҡоро ағас, сытыр үҙе үк янғын сәбәпсеһе булып тора. Халыҡ ҡороған ағастарҙы йыйып, урманды ла таҙартасаҡ, уның экологик торошо яҡшырасаҡ. Закон үҙ көсөнә 2019 йылдың 1 ғинуарынан инә, уға тиклем төбәктең Урман хужалығы министрлығы белгестәре закон эшен көйләйәсәк документтар әҙерләй. Минең фекеремсә, тәүҙә ҡәтғи бер майҙанды ҡоро ағастан таҙартып бөтмәйенсә, икенсе урындан ағас йыйыуҙы ла күҙәтеү кәрәк буласаҡ. Шулай уҡ ағас ботаҡтары ятып ҡалмауын талап итергә лә кәрәктер. Һәр хәлдә, был йәһәттән аныҡлауҙар буласаҡ.

**➔ Урманды һаҡлау, ысынлап та, бөгөн көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе. Был йәһәттән башҡа яңы закон проекттары көтөлмәйме?**

- Хәҙерге мәлдә ҡырҡылған урман майҙандары күләме ағас ултыртылған майҙандар һанынан күпкә алда бара. Рәсәйҙә, тимәк, беҙҙең республикала ла, йылына 1 млн гектарҙан ашыу урман ҡырҡыла. Рәсми статистика буйынса, уның 830 мең гектары ғына кире тергеҙелә. Йәғни, 170 мең гектар урманды юғалта киләбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, был һан күберәктер ҙә әле. Ошоно иҫәпкә алып, тағы бер проект буйынса эш алып барабыҙ. Ул ҡырҡылған урманды тергеҙеүгә ҡағыласаҡ.

Закон ҡабул ителһә, урманды арендаға алған предприятие йә кеше шул ҡырҡҡан урман хәтлем ағас ултыртырға мәжбүр буласаҡ. Урманды кәметергә ярамай. Башҡортостан урмандарында үҫкән ҡарағастарҙы, ғөмүмән, ылыҫлы ағастарҙы бөтөнләй ҡырҡырға ярамай, тип иҫәпләйем. Был йәһәттән иғтибарҙы йәлеп иткән тағы бер мәсьәлә бар. Мәҫәлән, Урман хужалығы министрлығы йыл һайын күпмелер ағас ултырта. Тик уларҙың күпмелер өлөшө үҫеп китә алмай. 50-60 проценты үҫеп китһә лә яҡшы. Ә отчеттарҙа сәселгән ағас иҫәбе бирелә. Шуға ла ҡағыҙҙа бер һандар, ысынбарлыҡта иһә бөтөнләй икенсе күренеш. Шуға ла ултыртылған ағастарҙың артабанғы үҫешен дә күҙәтеү мөһим. Күпмелер өлөшө үҫмәгән икән, яңынан сәсергә кәрәк.

**➔ Былтыр законһыҙ спиртлы эсемлектәр һатыусыларға яуаплылыҡты арттырыуға ҡағылған ҡанун ҡабул ителгәйне. Һеҙ халыҡ менән йыш осрашҡан, халыҡ араһында булған депутаттарҙың береһе. Аныҡлап әйткәндә, тап ошо закондың үтәлеше тураһында ҡыҙыҡһынғанығыҙ бармы?**

- Халыҡтың яҙмышына битараф булырға ярамай. Әммә был закон эшләһен өсөн депутаттарҙың, етәкселәрҙең генә тырышлығы аҙ. Эскелек тигән афәтте еңеүгә күмәкләп тотонорға тейешбеҙ. Ауыл советы етәкселәре, старосталар, ағинәйҙәр, шулай уҡ халыҡ үҙе лә белеп тора бит ул кемдең ҡайҙа нимә һатҡанын. Бөгөн һиңә ҡағылмаһа ла, иртәгә ғаиләңә, туғандарыңа был яуызлыҡтың янауы бик ихтимал.

Закон үҙ көсөнә ингәс тә, республиканың хоҡуҡ органдарына, прокуратураға хаттар яҙғайным, улар халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барҙы. Ауылдарҙа йөрөгәндә һорашып торам, хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе, тиҙәр. Ҙур суммалағы штраф, һатыу итеп ҡабат тотолғанда енәйәт эше ҡуҙғатыу мөмкинлеге былдай сауҙа эшмәкәрҙәрен хәүефләндерҙе барыбер. Һабантуйҙар, туйҙар айыҡ үтә, был да матур күренеш. Тимәк, закондың төрлө яҡлап файҙаһы булған. Был эш артабан да киң йәйелһен өсөн, халыҡ ситтә ҡалмаҫҡа тейеш. Былдай сауҙа менән шөғөлләнгән ауылдашығыҙ тураһында хоҡуҡ органдарына хәбәр итегеҙ, тимәйем, йыйылығыҙ ҙа, асыҡтан-асыҡ һөйләшегеҙ. Халыҡты ағыулау - ҙур енәйәт. Аңлаған кеше тыйыласаҡ.

Әйткәндәй, был йәһәттән тағы ла бер закон проекты булыр, моғайын. Эсеп, ғаиләһендә ғауға күтәреп, ҡатынын туҡмап, балаларын ҡыуып сығарһа йәки енәйәт эшләһә, судтың ҡарары буйынса табиптар, был кеше дауаланыуға мохтаж, тигән ҡарар сығарһа, уның үҙенән һорамайынса мәжбүри дауалап буласаҡ. Бөгөнгө закондар буйынса, кешенең үҙенең теләге булмаһа, уны мәжбүри дауаларға ярамай. Әммә бер кем дә, мин - эскесе, мине дауалағыҙ, тип әйтмәй, ундайҙар 100-ҙән 1-әү генәлер. Был закон шулай уҡ кәрәк, тип уйлайым. Дәүләткә былдай эскеселәрҙе дауалау ҡыйбатҡа төшәсәк, тип ҡаршы килеүселәр ҙә бар. Тик ул кеше дауаланып, ғаиләһенә ҡайтып, эшләй башлаһа, уның дәүләткә файҙаһы әллә күпме тапҡырға күберәк буласаҡ. Социаль тормош яҡшырасаҡ, күпме ғаиләне һаҡлап ҡаласаҡбыҙ, күпме балалар тыуасаҡ.

**➔ Эскелектең халыҡ араһында тамырланыуының сәбәбе нимәлә тип уйлайһығыҙ? Кемдер эшһеҙлек халыҡты ошо юлға этәрҙе, тип тә әйтә?**

- Төп проблема эшһеҙлектә түгелдер, тип уйлайым. Эш юҡ тип, эсеп йөрөү - ул яҡлауҙың үҙен аҡлауы ғына. Мәҫәлән, эшһеҙлек кимәле юғары булғанда ла үҙенә ҡул һалыусылар һаны түбән булған төбәктәр бар. Суицид осраҡтары Себерҙә йыш теркәлә, Себерҙә эш юҡмы ни, бөгөн күпме халыҡ шунда йөрөп эшләй. Эшһеҙлек сәбәп түгел бында. Эш булһа, эскелекте ташлар инем, тигәндәр ялғанлай. Бәлки, ялҡаулығың ҡамасаулайҙыр һиңә? Ике һыйырҙан артыҡ мал тоторға ярамаған заманда йәшәмәйбеҙ, бесәнлек күп. Райондарҙа йөрөгәндә күпләп мал тотҡан ғаиләләрҙең хужалығына инеп сығырға тырышам, улар һәйбәт йәшәйҙәр, ҡаланан балаларына фатирҙар алып бирәләр. Эйе, малды ҡарарға, һыйырҙы һауырға, йәғни, тырыш булырға кәрәк. Башҡорт тәбиғәт балаһы, быныһында шик юҡ, әммә беҙ ҙә матур итеп йәшәргә тырышһаҡ ине. Сәмләнеп донъя көткән ауылдар бар бит, шуларҙан өлгө алайыҡ.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# КҮҘӘТЕҮҘӘР

***48-се күҙәтеүем.*** Хат алышыуҙың һүҙ менән аңлатып булмаҫлыҡ кинәнесе, романтикаһы бар. Беҙ, буранбайҙар, үҙебеҙҙәге башланғыс мәктәптән һуң Һаҡмар аша ятҡан Сыңғыҙға йөрөп уҡыныҡ. Бер мәктәптә уҡыһаҡ та, атай-әсәйебеҙҙең йән дуҫтары Париж һәм Миңзифа Туйсиндарҙың балалары менән хат алыштыҡ. Уларҙың исеменән хатты Флүрә апай Туйсина-Аллаярова яҙҙы. Шуныһы иҫтә ҡалған:хатты мәктәп эргәһендәге почта йәшнигенә төшөрәбеҙ ҙә, үҙебеҙ мәктәп коридорында осраған Флүрә апайҙан ҡасып, күренеп ҡалһа, әллә ҡайҙан урап йөрөй торғайныҡ. Хат ҡасан Баймаҡтан урап килгәнсе байтаҡ ваҡыт үтә. Нисектер, беҙ хатҡа яҙған сәләмдәрҙе уҡырҙан алда үҙебеҙҙе күрһә, оятыбыҙҙан ер тишегенә инерҙәй инек. Яҙғыһын Һаҡмар ташып, юл өҙөлгән саҡта, Париж ағай беҙҙе дәрес бөткәнен көтөп ултырып, күмәгебеҙҙе үҙҙәренә йоҡларға алып ҡайтыр ине. Шул саҡта бәләкәс кенә Йәмил, Рәмил, Радмир урындыҡта йылмайып ултырған сабыйҙар ғына инеләр. Уларға бер барғанда Миңзифа апай холодец бешергәйне. Париж ағай уны "мөйкөлдәк" тип атаны. Был ризыҡты тәүге тапҡыр уларҙа ауыҙ иттек.

Әрмелә саҡта миңә Буранбай Исҡужин хатты көн һайын яҙҙы. Дөрөҫөн әйткәндә, расходҡа һуҡты. Ни өсөн тигәндә, хат ташыусыға хат өсөн бер ҡап тәмәке бирергә кәрәк.

Һағындыра шул саҡтар. Хәҙер иһә смс йә социаль селтәрҙәр аша ғына хат яҙышабыҙ.

***49-сы күҙәтеүем.*** Бөгөн "Юлдаш" радиоһы егеттәре прививкалар, вакциналар тураһында һөйләшеү ойошторҙо. Төрлө фекерҙәр әйтелде, уларҙың барыһы менән дә ниндәйҙер кимәлдә килешергә булалыр. Әммә шуныһы бәхәсһеҙ: кеше тәбиғәттән ни тиклем алыҫлашһа, уның төп докторы булған иммунитеты шул тиклем ҡаҡшай һәм уның урынын прививкалар, вакциналар яулай. "Комфорт милләтте үлтерә", ти француздар.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ 22 майҙа иртәнге сәғәт 12-лә Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт етәксеһе Сергей Кравцов ҡыҙыу элемтә барышында ағымдағы йылда дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын ойоштороу тураһында һорауҙарға яуап бирә. Һорауҙар ege@obrnadzor.gov.ru электрон почтаһы буйынса, "Бәйләнештә" "Берҙәм дәүләт имтиханы һәм дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы" сәхифәһендә ҡабул ителә. Ҡыҙыу элемтә телефоны: +7 495 984 89 19.

✓ 2018/2019 уҡыу йылында Башҡортостан Башлығы стипендияһын тәғәйенләү өсөн йыл һайын уҙғарылған конкурс башланды. Унда магистранттар, өсөнсө уҡыу йылынан юғары белем биреү ойошмалары студенттары һәм бакалаврҙар, икенсе уҡыу йылынан аспиранттар ҡатнаша ала. Бынан тыш, Мостай Кәрим исемендәге, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге стипендияларға конкурс иғлан ителгән. Уларҙа ла юғары уҡыу йортонда көндөҙгө бүлектә уҡыусы бакалаврҙар һәм 3-5 курс студенттары, магистранттар ҡатнаша ала.

✓ Башҡортостандан һигеҙ муниципалитет - Сибай, Туймазы, Учалы, Дәүләкән, Күмертау, Бөрө, Яңауыл, Бәләбәй ҡалалары Бөтә Рәсәй бәләкәй ҡалалар һәм тарихи биләмәләр конкурсында ҡатнаша. Еңеүселәр ҡала мөхитен төҙөкләндереү проекттарын ғәмәлгә ашырыуға гранттар ала. Һөҙөмтәләр 1 июнгә тиклем иғлан ителә.

✓ Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығы агросәнәғәт комплексы ойошмаларынан агросәнәғәт комплексының кадрҙар потенциалына дәүләт ярҙамы алыуға конкурста ҡатнашыу өсөн документтар ҡабул итә башлауы хаҡында иғлан итте. Ғаризалар һәм документтар 2018 йылдың 17 майынан 1 июненә ҡәҙәр хоҡуҡ тәьминәте, дәүләт хеҙмәте һәм кадрҙар сәйәсәте бүлегендә ҡабул ителә. Дәүләт ярҙамына 2013 йылдан һуң белем биреү учреждениеһын тамамлаған, һайлау критерийҙарына яуап биргән йәш белгестәр дәғүә итә ала.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте бойороғона ярашлы, башҡорттар һәм татарҙар тығыҙ йәшәгән Рәсәй төбәктәрендә уҙаса̧ҡ традицион һабантуйҙарҙың графигы раҫланды: 16 июндә - Һарытау өлкәһендә, Пермь крайының Барҙы районында, Юграның Когалым ҡалаһында, 23 июндә - Һамар өлкәһендә, 30 июндә - Ленинград, Свердловск өлкәләрендә, 7 июлдә - Силәбе өлкәһендә, 14 июлдә - Ҡурған өлкәһендә, 21 июлдә - Мәскәү ҡалаһының Коломенск паркында.

**✓ Ремонт барышында күперҙә яңы етешһеҙлектәр табылған: 8-се терәүҙең терәү диафрагмаһы ҡәнәғәтләнерлек торошта түгел. Быға тиклем булған тикшереүҙәр ваҡытында уларҙы асыҡлау мөмкинлеге булмаған.**



БАШ ҠАЛАМ



# ТӘМЛЕ БУЛҺЫН, Башҡортостанса булһын!

**Иҫегеҙҙә булһа, йылы көндәр башланыу менән баш ҡаланың төрлө мөйөштәрендә, йылға буйҙарында бәшмәктәр кеүек йәмәгәт тукланыуы нөктәләре ҡалҡып сыға торғайны. Һуңғы йылдарҙа бындай нөктәләрҙең урынлашыуға рөхсәте, биҙәлеше, янғынға ҡаршы һәм санитария талаптарын үтәү-үтәмәүе буйынса комплекслы тикшереүҙәр ойоштороала, шуның һөҙөмтәһендә уларҙың һаны йылдан-йыл кәмей һәм быйыл тукланыу ойошмалары эргәһендәге террасалар һаны - 44, йәйге кафелар 19 буласаҡ.**

Шулай уҡ уларҙың хеҙмәтләндереүенә лә, дизайнына ла талаптар ҡәтғиләнә. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов талап итеүенсә, тукланыу сифатлы булырға, ә биҙәлештә республикала йәшәгән барлыҡ халыҡтарҙың да милли биҙәк элементтары сағылырға тейеш. "Әлбиттә, Европа стандарттарына эйәреү насар түгел, әммә беҙ Европала йәшәмәйбеҙ һәм Башҡортостандың баш ҡалаһы булараҡ, үҙебеҙҙең ерлектәге менталитеты, колоритлы йөҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тейешбеҙ".

Ирек Ишмөхәмәт улының һүҙҙәренә ҡеүәт. Һәм был теманы дауам итеп, хыялдарға ирек ҡуйырға ла мөмкиндер. Яҙғы-йәйге миҙгелдә террасалар һәм йәйге кафелар йәмәғәт тукланыуы объекттары ҡарамағында була икән, уларҙа милли ризыҡтарыбыҙ, милли аш-һыуыбыҙҙың да киң ассортименты булһын ине. Әйтәйек, хәҙер йәштәр алкоголле эсемлектәр ҡулланып бармай, тимәк, бындай урындарҙа күпләп ҡымыҙ, буҙа һатыуҙы ойоштороған шәп буласаҡ. Шулай уҡ ҡурылған шешлек, былау менән бер рәттән, теләүселәргә башҡорттоң ҡаҙыһын, тултырылған тауығын, бишбармағын һәм башҡа ризыҡтарын да тәҡдим итергә ваҡыттыр инде. Был эште ҡасан да булһа ниндәйҙер тукланыу ойошмаһы башларға тейештер, тип көтәбеҙ бына нисәмә йылдар инде...

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Баш ҡала ғына түгел, тотош Башҡортостан был көндәрҙә тантана итте. Юҡ, Еңеү байрамы айҡанлы һәм, ниһайәт, күптән көтөлгән йылы көндәр килеүенә түгел, ә тарихта беренсе тапҡыр "Өфө" футбол клубының Европа клубтары турнирында сығыш яһау хоҡуғын алыуына ҡыуанды республика. Был, әлбиттә, баш ҡаланың брендын тағы ла бер баҫҡысҡа күтәреүгә тиң.**

# СПОРТ, КҮПЕР ҺӘМ...

## ветеринария хеҙмәте хәбәрҙәре

Шуға ла ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәне Ирек Ялалов тап ошо теманан башланы ла инде. Әммә уның сығышы еңеү шатлығына ҡарағанда, нығыраҡ тәнҡиткә тартты. "Стадионда йәмғеһе 11 мең самаһы кеше булды. Һәм беҙ тағы ла тамашасыларҙың парковкаға ҡуйған автомобилдәрен эвакуациялау мәсьәләһе менән ҡуҙға-күҙ осраштыҡ. Халыҡ уйындан ҡүтәренке кәйеф менән сыҡты, уларҙың кәйефен мотлаҡ боҙорға кәрәк инеме? Мин махсус рәүештә М. Горький урамы буйлап үттем. Ял көнө, транспорт күп түгел, парковкаланған автомобилдәр бер кемгә лә ҡамасауламай. Хоккей миҙгелендә "Өфө-Арена" тирәһендә лә шундай күренештәр күҙәтелә. Мин хоккей, футбол матчтары уҙғарылған ваҡытта тамашасыларҙың автомобилдәрен эвакуациялауҙы тыям. Эш урынында кеше йөҙлө булып ҡалайыҡ. Беҙҙә, чиновниктарҙы, теге йәки был мәсьәләгә формаль ҡараште гәйеплэйҙәр. Был осраҡ формаль ҡараштың иң классик өлгөһө. Алдағы көндәрҙә аңлатыу эштәре алып барырға һәм "Нефтяник" стадионында, "Өфө-Арена"ла хоккей матчтары булған ваҡытта яҡын-тирәләге урамдарҙа парковка урыны итеп файҙаланыуҙы көсөнә индерергә кәрәк", - тип, тейешле хеҙмәттәргә һәм район хакимиәттәре башлыҡтарына бурыс йөкмәтте ҡала мэры.

Ирек Ишмөхәмәт улы баш ҡалала иргеттәрҙең көсөн һынау буйынса төрлө ярыштар ойоштороуҙы муниципалитет эшенең бер йүнәлеше тип ҡарай. Шуға ла 2005 йылда планетаның иң көслө кешеһе титулына лайыҡ булған, дүрт тапҡыр Рәсәйҙең иң көслө кешеһе исемен яулаған Эльбрус Нигмәтуллин ойоштороған "Башҡортостан батыры" көс экстримы буйынса ярышты хуплауы һәм ярҙам күрһәтеүе юҡҡа түгел. "Ярыштар мауыҡтырғыс булды, өс сәғәт дауамында халыҡ сығыш яһаусыларҙы күҙәтте. Беҙ был спорт төрөнә милли элементты индерҙек - ҡатнашыусылар 25-28 килограмлыҡ сүкмар сөйөү буйынса ла көс һынашты. Быға тиклем сүкмар ырғытыу буйынса рекорд Бөрйән егетендә булһа, хәҙер Башҡортостандың яңы рекордын бөтөнләй сит милләт кешеһе ҡуйҙы. Шуға күрә, беҙгә, башҡортостандарға, күнегергә кәрәк. Ә инде Эльбрус менән киләһе йылда сараны яңы бейеклеккә күтәреү хаҡында һөйләшеп килештек. Ул "Өфө ҡалаһы мэрының Эльбрус Нигмәтуллин исемендәге кубогы" тип аталасаҡ", - тип белдерҙе Ирек Ишмөхәмәт улы.

Һәм ҡыуанысл, күңел йылытырлыҡ яңылыҡтар шуның менән тамамланды, тиергә лә мөмкин. Сөнки сираттағы тема - Ағиҙел йылғаһы аша һалынған күперҙе ремонтлау барышы тураһында булды. Өфө ҡалаһы хакимиәтенең төҙөлөш, юлдарҙы һәм яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы Р. Мөслимов белдереүенсә, ремонт барышында күперҙә яңы етешһеҙлектәр табылған: "8-се терәүҙең терәү диафрагмаһы ҡәнәғәтләнерлек торошта түгел. Быға тиклем булған тикшереүҙәр ваҡытында уларҙы асыҡлау мөмкинлеге булмағанлыҡтан, был етешһеҙлектәр күренмәй ҡалған. Хәҙер юлдағы плитканың эшлектән сыҡҡан урынын алыштырған ваҡытта икенсе зыянланған урындар ҙа күренде. "Күперҙәр" ғилми-тикшеренеү институты" яб ыҡ акционерҙар йәмғиәте махсуслаштырылған ойошма тикшереү үткәргәндән һуң, уларҙы бөтөрөргә ҡушты. Терәү диафрагмаларының эшмәкәрлеген тергеҙеү өсөн уларҙа ла ремонт эштәрен башҡарыу талап ителә. Өҫтәмә проект ҡарарының асылы шунда: яңы терәү өлөштәре ҡуйыу ярҙамында 8-се терәүҙең майҙанын киңәйтергә кәрәк. Проект 5 технологик тәнәфес менән башҡарылған 25 төр эште үҙ эсенә ала. Барлыҡ эштәрҙе тамамлау быйыл июлдең өсөнсө декадаһына планлаштырыла". Был йәһәттән Ирек Ишмөхәмәт улы муниципалитеттың төп бурысы - капиталь ремонттан һуң объекттың ҡулланыуҙа ышаныслы булыуын тәьмин итеү, тип билдәләне: "Әлбиттә, был эштәрҙе тағы ла бер айға һуҙасаҡ, әммә ҡала халҡы проблеманы аңлап ҡабул итер, тип ышанам. Иҫке объект, ҡарт кеше кеүек: бер ерен дауалаһаң, икенсе ере ауырта башлай. Иң мөһиме - эш тәүлек әйләнәһенә алып барылһын һәм сифатлы булһын".

Икенсе уйланырға мәжбүр иткән тема: Башҡортостанға Рәсәйҙең башҡа субъекттарынан һәм яҡынлалыҫ сит илдәрҙән хайуандарҙың кеше гүмере өсөн хәүефле сирҙәрҙең инеү ихтималлығы. Был хаҡта республиканың Ветеринария идаралығы начальнигы Азат Йыһаншин сығыш яһаны. "Бөгөн Ветеринария хеҙмәте нык ҡурҡыныс булған - 35, шул иҫәптән кеше өсөн ҡурҡыныс тыуҙырған - 5, хайуандар өсөн дә берҙәй хәүефле булған 12 сиргә ҡарата саралар алып бара. Аҙыҡ-түлек баҙарында контроль тормошҡа ашырыла. Мал-тыуар аша сирҙәрҙең республикаға инеүенә юл ҡуймау өсөн быйыл 1 июлдән эшмәкәрлек алып барған барлыҡ хужалыҡ формаларынан малдың тере ваҡытынан алып әҙер продукция булып етештерелеүенә тиклемгә барлыҡ ветеринар документтар мотлаҡ электрон рәүештә тултырыла. Бындай электрон-ветеринар сертификациялау ит продукттарының бөтөн юлын асыҡ күрһәтеп торасаҡ. Әлеге ваҡытта ҡала буйынса 6500 хужалыҡ субъекты булһа, алып барылған аңлатыу эштәре һөҙөмтәһендә 3200-ө генә теркәлеү үткән. Ай ярым эсендә башҡаларының да теркәлеүе мотлаҡ. Был инде алдағы көндәрҙә социаль учреждениеларҙы һәм халыҡты продукция менән тәьмин итеүҙә өҙөклөктәр булдырмаҫҡа ярҙам итәсәк.

Әле Рамаҙан айы башланды. Ҡорбан байрамында баш ҡаланың 18 мәсетендә ҡорбан салыуҙар тормошҡа ашырыла ине. Артабан Өфөлә ҡорбан салыу быныӊ өсөн булдырылған айырым урындарҙа ғына башҡарыласаҡ һәм тикшереү үткән һарыҡтар ғына салынасаҡ. Салынған мал ветеринар-санитар экспертиза үтәсәк һәм уға келәймә һалынасаҡ. Шунан һуң ғына уны өләшергә йәки бешерергә мөмкин буласаҡ. Юҡһа, былтыр Туймазы районында бешмә сире тап ситтән килтерелгән һарыҡтар аша таралған".

Был хаҡта ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов үҙенең ҡарашын ҡәтғи белдерҙе: "Һәр мәсеттә мал салыу үткәндәрҙә ҡалырға тейеш. Ғибәҙәт урыны - мал һуйыу урыны түгел". Шулай уҡ ул Ҡорбан байрамына тиклем үҙәкләштерелгән мал салыу урынын билдәләргә ҡушты. Әле был урындың Зинино ауылы эргәһендә булыуы ҡуҙаллана. Һәр хәлдә, бынан бер нисә йылдар элек күтәрелгән тема бөгөн ныҡлы тормошҡа ашырыла башланы: мал салыуҙың үҙәкләштерелгән пункттары булырға тейеш. Был бигерәк тә ауыл халҡына туранан-тура ҡағыла, сөнки уларҙың күпселегенең бөгөн күҙ терәп торған, барлыҡ килем сығанағы шул мал-тыуарҙа. Әгәр йәрминкәләргә, башҡа һатыу нөктәләренә электрон ветеринария-санитария сертификаты булмаған мал итен һатырға килтерһәң, ҙур проблемаларға осраууң ихтимал.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Балаҡатай районы "Башҡортостан тарихы биттәре" фестиваль-марафонында ҡатнаша. Сара 26 майҙа Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында үтә. Көндөҙгө сәғәт 3-тә балаҡатайҙар етештергән продукцияны һатыу-күргәҙмәһе асыла, сара райондағы иң яҡшы коллективтарҙың концерты менән дауам итә. Инеү ирекле.

✓"Журфест-2018" 14 июндә Башҡортостандың Ҡариҙел районында Павловка һыу һаҡлағысы буйында урынлашҡан "Йондоҙло" физкультура-һауыҡтырыу комплексында ойоштороала. Быйылғы фестивалдең төп темаһы - "Телде, мәҙәниәтте, этносты һаҡлау ҡоралы булараҡ милли матбуғат". Сара иртәнге сәғәт 11-ҙә башлана.

✓Йөҙ йәште уҙған пенсионерҙарҙың күбеһе Мәскәүҙә һәм Мәскәү өлкәһендә, шулай уҡ Санкт-Петербургта һәм Башҡортостанда йәшәй. Ағымдағы айҙа Башҡортостанда юбилейлы тыуған көндәрен билдәләгән 484 йөҙйәшәргә Владимир Путиндан ҡотлау хаттары тапшырыу ҡаралған. Баҡалы, Көйөргәҙе райондарында, Благовещен, Салауат, Туймазы ҡалаларында йәшәгән биш ветеран бер быуатлыҡ юбилейын билдәләй, 55 кешегә 95 йәш тула, ә 424-е 90 йәшкә аяҡ баҫа.

✓Өфөнөң Дим районында "Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына - 100 объект" проекты сиктәрендә 1000 урынлыҡ мәктәп төҙөлә. Яңы белем биреү учреждениеһы "Сағыу" бистәһендә асыла, эштәрҙе 2018 йылда башларға ниәтләйҙәр.

✓1700 Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыға һәм инвалидҡа 10 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү билдәләнгән. Аҡса 2018 йылдың май-июнь айҙарында пенсия һәм башҡа социаль түләүҙәр менән бергә тапшырыла. Бер тапҡыр бирелә торған түләүҙе алыу өсөн район-ҡалаларҙағы Пенсия фонды идаралығына мөрәжәғәт итергә һәм ғаризалар яҙырға кәрәкмәй.

✓Баш ҡалала "Башнефть" компанияһының ягыулыҡ ҡойоу станцияларында йөнә бензинға һәм дизель яғыулығына хаҡтар 30 тингә артты. АИ-92 "Атум" маркалы бензин - 39,10 һум, АИ-95 "Атум" - 41,20, АИ-92 - 38,50, дизель яғыулығы 41,50 һум тора. Билдәләп үтергә кәрәк, "Башнефть" компанияһында хаҡтар 3 аҙна элек кенә күтәрелгәйне. Апрелдә хаҡтар ике тапҡыр артты.

✓ Икенсе йыл еңеүсегә бүләккә автомобиль әҙерләргә була, тип ишараланы. Эльбрус Фәрит улы ла, күп тамашасылар ҙа Ирек Ишмөхәмәт улының сараны ойоштороуҙа күрһәткән ярҙамын лайыҡлы баһаланы, рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе.



АФАРИН!

# "БАШҠОРТОСТАН БАТЫРЫ" - УЛ...

## көс һәм рух тантанаһы

(Башы 1-се биттә).

"Башҡортостан батыры" тигән оло исемгә эйә булыу өсөн ҡыҙыу көрәш алып барыусылар араһында яҡташтарыбыҙ ҙа бар ине. Әйтәйек, был турнирҙа өсөнсө урын яулаусы Өфө егете Булат Зарипов күптәрҙе таң ҡалдырҙы. Турнир аҙағында беҙгә биргән интервьюһында Эльбрус Ниғмәтуллин: "Уңышлы сығышы менән Булат Зарипов һөйөндөрҙө", - тине. Тағы бер яҡташыбыҙ, республиканың функциональ күпалыш федерацияһы президенты, йөштәр араһында ауыр атлетика буйынса донъя чемпионы Альберт Саяховтың сығышы ла тамашасылар күңеленә хуш килде. Был турнирҙа ул иң еңел кәүҙәле ҡатнашыусы булһа ла, уның кәүҙә ауырлығы ни бары 80 килограмм ғына ине, ул 100-120 килограммлыҡ дәғүәселәренән ҡалышманы. Хатта ҡайһы берәүҙәрҙе үтеп тә китте. 17 тонналыҡ йөк машинаһын да ул 6 метр ҙа 56 сантиметрға һөйрәп алып барҙы. Ошо урында ҡыҙыҡ өсөн ҡулға калькулятор алдым. Автомобиль Альберттан 215,5 тапҡырға ауырыраҡ килеп сыҡты. Йәғни, бәһләүән үҙенән 215,5 тапҡыр ауырыраҡ "фура"ны 6 метр ярым араға һөйрәй алды!

Яҡташтар темаһынан алыҫ китмәй торайыҡ. Был турнирҙа тағы бер ауыр атлет, Учалыла тыуып үҫеп, республиканың функциональ күпалыш федерацияһы вице-президенты, башҡорт егете Рәил Бикмаевты ла билдәләп үтке килә. Ошо урында Альберттың да, Рәилдең дә был спорт төрөндә тәүләп сығыш яһауын да әйтеп китергә кәрәктер. Быға тиклем улар үҙ дисциплинаһында ғына шөғөлләнгән. Экстремаль спорт ҡоралдарын үҙ иңендә беренсе тапҡыр татыуҙары булды уларҙың был юлы. Ярыш һуңынан Рәил үҙ сәхифәһендә: "Әгәр өс ай элек минә "Һин тиҙҙән 1500 килограмлыҡ машинаны күтәрәсәкһең", тиһәләр, ышанмаҫ инем. Ләкин 20 минут аралашҡан арала Эльбрус Ниғмәтуллин, барлыҡ сиктәр ҙә һинең башыңда ғына, тигән аҡылды һеңдерҙе, шуға уға ҙур рәхмәтемде белдерәм", - тип яҙҙы.

Өфөлә тәүге тапҡыр уҙғарылған, Башҡортостан эстрадаһы йондоҙҙары сығыштары менән байытылған, дәртле ритмлы йыр-моңға үрелеп барған был үҙенсәлекле тамашаны ҡарарға, беҙҙең ҡара иҫәп менән самалағанда, ярты меңгә яҡын кеше килгәндер, моғайын. Мәртәбәле ҡунаҡтар араһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаровтың да булыуы байрамға бәҫ өҫтәмәй ҡалманы, әлбиттә. Ирек Ишмөхәмәт улы үҙ сығышында сукмарҙың башҡорттоң боронғо яу ҡоралдарының береһе булыуы тураһында әйттe, уның "Камыр батыр" әкиәтендә телгә алыныуын билдәләне. Ә турнир һуңынан ул был турнирҙы артабан тағы ла ҙурыраҡ майҙанда ойоштороайыҡ, уны традицион итәйек, тигән теләк белдерҙе, икенсе йыл үтәсәк турнирҙа еңеүсегә бүләккә автомобиль әҙерләргә була, тип, был эшкә ныҡлап тотонорға иҫәбе барлығына ишараланы. Эльбрус Фәрит улы ла, күп тамашасылар ҙа Ирек Ишмөхәмәт улының сараны ойоштороуҙа күрһәткән ярҙамын лайыҡлы баһаланы, уға рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе.

Эльбрус ағай тураһында күпме генә һөйләһәң дә, етмәй ҡалыр. Был юлы беҙ уның бик шәп алып барыусы икәнен лә инандыҡ. Турнир барышында ул һәр ҡатнашыусыға, һәр көрәнешкә үҙ аңлатмаһын, теге йәки был хәлгә ҡарата үҙенең урынлы фекерҙәрен еткерә барҙы. Ҡайһы бер спорт ярыштарында була торған комментарийһыҙлыҡ күренеше был сарала тойолманы. Бында Эльбрус Фәрит улы телевидение алып барыусыһы Искәндәр Урманцевты йәлеп итеп тә отҡан. Искәндәр үҙе лә спортҡа битараф булмаған кеше, атлеттарҙың һәр аҙымын тамашасыға аңғыратып торҙо. 3 сәғәттән ашыу барған турнир шуға ла бер тында ҡаралды.

Беҙ иһә, әҫәрләнеп, батырҙарҙы ҡуҙәткән тамашасыларға "Бөгөнгө заман батыры ниндәй булырға тейеш?", "Эльбрус Ниғмәтуллинды батыр иткән сифаттар ниндәй?" тигәнерәк һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек. БДПУ студенты Байрас Азаматов: "Заман батыры - ул физик яҡтан ғына түгел, рухи яҡтан да көслө, мәғлүмәтле кеше. Эльбрус Ниғмәтуллин иһә үҙ маҡсатына өлгәшә белә торған шәхес", - тип яуапланы. Көрәш буйынса ике тапҡыр Европа чемпионы Марсель Йосопов Эльбрус Ниғмәтуллинды батыр иткән сифаттар тураһында шулай тине: "Эльбрус менән ун йылдан ашыу дуҫбыҙ, ул минең спортсы булараҡ үҫеүемдә ҙур көс һалған кеше. Литвала үткән көрәш буйынса Европа чемпионатында минә миҙал таҡҡан баһадир Жидрунас Савицкас минең Силәбенән килеүемде ишетеп, оҙаҡ ҡына Эльбрус Ниғмәтуллин тураһында һорашып торҙо. Эльбрустың батыр булыуын Савицкас һымаҡ батырҙар ҙа таный. Ә дөйөм алғанда, батыр төшөнсәһе минең өсөн шактай киң һәм ҙур мәғәнәгә эйә төшөнсә. Һәр кешене батыр иткән төп сифат - физик көс кенә түгел, ә үҙ үҙ халҡына һәм башҡа халыҡтарға ихтирамлы ҡараш, илһөйәрлек ул..." Рәсәйҙә генә түгел, сит илдәрҙә лә киң билдәлелек яулаған промоутер Рәмил Сәғитов әйтеүенсә, Эльбрус Ниғмәтуллин - батыр, сөнки ул - көслө. "Ә кеше булараҡ уның итәғәтлелеге, республикабыҙ илһөйәрле булыуы һоҡландыра. Ул беҙҙең милли геройыбыҙ", - тине Рәмил Миннулла улы. Эстрадабыҙҙың алтын бағанаһы, нәфис һүҙ оҫтаһы Рөстәм Ғиззәтуллин да Эльбрус батыр тураһында төплө фекерҙәре менән уртаҡлашты: "Силәбе өлкәһендә тыуып үҫһә лә, ул туған телен онотмаған, ҡайҙа йөрөһә лә, башҡорт халҡын, Башҡортостанды популярлаштыра, - тине Рөстәм Ғиззәтуллин. - Беренсенән, ошо сифаты өсөн уны батыр тип һанайым. Икенсенән, ул Рәсәйҙең иң көслө кешеләренең береһе. Өсөнсөнән, ул Силәбелә булһынмы, Силәбе өлкәһенең бөрәр ауылында булһынмы, Өфөлә булһынмы, һәр ҡайҙа ошондай турнирҙар үткәрергә батырсылыҡ итә, ҡурҡып тормай. Минең уйлауымса, ниндәй һөнәр эйәһе булыуға ҡарамай, йөрәгендә рух булған егеттәр батыр тигән исемде йөрөтөргә хоҡуҡлы".



Турнир һөҙөмтәләре буйынса беренселекте Свердловск өлкәһенән килгән Виталий Исмәғилев алды. Икенсе баҫҡысты Силәбе өлкәһенән Сергей Быков яуланы, өсөнсө урын яҡташыбыҙ, баш ҡалабыҙ егете Булат Зарипов өлөшөнә төштө. Беренсе урын яулаусыға Нуғай ҡасабаһынан эшҡыуар Алмас Шакиров тәкә бүләк итте. Эльбрус Фәрит улы сараны ошо һүҙҙәр менән йомғаҡланы: "Өсөнсө урынды яулаған Булат Зарипов минең өсөн асыш булды. Беренсе урын яулаусыны ла үҙем өсөн яңы астым. Икенсе урын яулаусы менән хәл былай ҙа аңлашылып тора ине. Ул - киң билдәле, тотороҡло һөҙөмтәләр күрһәткән атлет. Тағы, ҡеүәтле булыуы менән Өфө ҡыуандырҙы. Ҡатнашыусыларҙың исемдәре үҙгәреп торорға ла мөмкин. Минең өсөн минең ярыштарымдан һуң бында ла минең фекерҙәштәрем, рухташтарым ҡалыуы мөһим. Өфө, бай ҡала булһа ла, экстремаль спорт буйынса Силәбенән ҡалышыңҡырай. Ләкин был мәсьәлә ваҡыт үтеү менән үҙгәрер, тип уйлайым. Иң мөһиме, ярыштарҙы йышыраҡ ойоштороорға кәрәк, шул саҡта атлеттар ярыштанярышҡа үҫә, тәжрибә туплаясаҡ. Дөйөм алғанда, мин был саранан ҡәнәғәт. Шулай ҙа минә тамашасыларҙың, ҡатнашыусыларҙың тәьсораттары мөһим. Бөгөн үҙҙәренең өс сәғәтен ошо сараға бүлгәндәрҙең шатлығын күреү менән өсөн иң ҙур бүләк булды. Был ярыш һуңғыһы булмаһын ине".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәшәҡәттәргә күмелеп, кеше тигән йән эйәһенең ниндәй мөмкинлектәргә эйә икәнлеген онотоп ебәрәбеҙ. Әлеге тамаша беҙгә, технологиялар һәм уңайлыҡтар заманында, кеше тигән биологик төрҙөң экстремаль шарттарға бик тиҙ яраҡлаша алыуы тураһында иҫкәртә. Шуға, киләсәк тураһында һүҙ сыҡһа, мин кешеләр өсөн әллә ни борсолмайым. Көслө зат ул - әҙәми зат.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ҡарабойҙай

❖ Ҡарабойҙай төнәтмәһе ҡан тамырҙарын, иммунитетты нығыта, организмды шлактарҙан таҙарта. Ҡарабойҙай сәскәләре һәм ваҡланған һаламын бер тигеҙ күләмдә алып болғатырға, 1 балғалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һыуынғас, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 40-ар мл (балаларға - 20-шәр мл) эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә. Дауаланыу курсы - 1 ай. 3 аҙна ял иткәндән һуң, 3 ай буйына араларында 3-әр аҙна ял ойоштороп, 21-әр көн дауаланырға. 90 көндән тағы ҡабатларға.

### Ҡан тамырын таҙартыу

❖ Баш мейеһе тамырҙарын таҙартыу муйын остеохондрозынан, атеросклероздан ҡотҡара, баш ауыртыуҙары бөтөп ҡалыр, кәйеф тә күтәрелә. 5 әстерхан сәтләүеген ваҡлап, 1 ҡалаҡ йүкә балы менән болғатырға. Бер семтем дәрсен (корица), имбир өҫтәргә һәм 1 тәүлеккә һыуытҡысҡа ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

❖ 1/3 стакан һуған һутына 1 стакан бал өҫтәп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр балғалаҡ ашарға. Ул тамырҙарҙы таҙартып ҡына ҡалмай, иммунитетты ла нығыта.

❖ Көн һайын төшкө һәм киске аштан ярты сәғәт алда яртышар стакан анар (гранат) һуты эсегеҙ. Уны алма һәм кишер һуты менән сиратларға ла була.

❖ 10 грамм дегәнәк тамырын термоста 8-10 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм һыуытҡысҡа ҡуйырға. Төнәтмәне иртәнге аштан ярты сәғәт алда 4-әр ҡалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы - 1 ай.

❖ Организмды һауыҡтырыу һәм тамырҙарҙы таҙартыу өсөн көн һайын иртәнге аштан ярты сәғәт алда 1 мандарин, бер ус йөҙөм һәм әстерхан сәтләүеге ашап, 15-20 минуттан 1 балғалаҡ бал һәм лимон киҫәге һалынған 1 стакан һыу эсергә. Тағы ла 15-20 минуттан ашаһағыҙ була.

Айбикә ЯҠУПОВА.

**✓ 1745 йылдан алып башҡорт командалары Себер сик буйы һыҙығында ла хеҙмәт итә. Хеҙмәт ваҡыты 1 йыл була, 1769 йылдан алып - 2 йыл; 1800 йылдан йөкләмә этап хеҙмәте менән алыштырыла.**



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

## Ибраһим бәйғәмбәр

Атаһы быны дәлилләй. Ибраһим: "Эй, атай! Ниңә һин таш һындарға табынаһың?.. Миңә эйәрһәң, хәҡиҡәткә һәм бәхеткә илтеүсе тура юлды күрһәтермен. Таш һындарға ғына табынырға өгөтләгән Иблесте тыңлама. Иблес - ул Аллаға мәңге ҡарышыусы, уның менән дуҫлашһаң, үҙенә Алланың ҡаты ҡәһәре төшөр, тип ҡурҡам", тигәс, атаһы: "Нисек инде, аллаларымдан баш тартып, уларға табыныуҙан ваз кистермәксе булаһың? Әгәр беҙҙең аллаларҙы кәмһетергә уйлаһаң, таш бәреп тукмаясаҡмын. Минән һаҡ бул һәм янымдан кит...", ти. Ибраһим Алланан атаһын ғәфү итеүен үтенә, ләкин уның һаман Аллаға дошман булып ҡалыуын белгәс, араһын өҙә. Алла: "Ибраһим халҡының хата юлдан барыуын күргәс, беҙ уның инаныуҙары нығыһын һәм халҡына иҫбатлаһын өсөн уға күктә һәм ерҙә хакимлыҡ итеүебеҙҙең бөйөклөгөн күрһәттек", - ти. Ул тәүҙә ҡараңғы төндә сағыу янған йондоҙҙо, ул һүнгәс, Айҙы, Айҙан һуң офоҡтан ҡалҡҡан Ҡояшты Алла тип уйлай һәм улар бер-бер артлы һүнгәс, Алла ихтыяры менән барлыҡҡа килгән күк есемдәренең көсһеҙлөгөн күргән Ибраһим: "Мин фәҡәт Бөйөк Аллаға ғына табынам. Тәүҙә балҡып, аҙаҡ һүнеп торған аллаларға табынмайым! Һеҙгә минең менән Алланың берәү генә булыуы тураһында бәхәсләшеү яҙыҡ. Ул мине хаҡ юлға баҫтырҙы, мин һеҙҙең аллаларығыҙ ҡәһәренән ҡурҡмайым. Алла ғына, әгәр теләһә, үҙ ихтыяры менән зыян ҡыла ала. Унан башҡа Аллаһ юҡ", ти һәм көнө-төнө халҡын иманға саҡыра.

## Ибраһим бәйғәмбәрҙең Вавилон халҡы менән бәхәсләшеүе

Алла: "Беҙ Ибраһимға хәҡиҡәт юлы менән идаралыҡ итеүҙе Муса менән Һарунға тиклем үк тапшырҙыҡ, сөнки беҙ уның лайыҡлы булыуын һәм кешеләргә беҙҙең нәсихәттәрҙе теүәл еткеререн белдек", ти. Кешеләр Ибраһим бәйғәмбәргә ышанмай, ә бәйғәмбәр халыҡҡа: "Аллаһы Тәғәлә берәү генә һәм һеҙ фәҡәт Уға ғына табынырға тейешһегеҙ", ти һәм үҙе эстән генә: "Алла менән ант итәм, табынған ташбүкәндәрегеҙ янынан китеүегеҙ менән уларға ҡаршы берәй нәмә ҡыласаҡмын", тип уйлай һәм, ысынлап та, кешеләр киткәс, таш һындарҙы ҡыйратып, ваҡ киҫәктәргә бүлгеләй. Кире әйләнеп килгән кешеләр быны күргәс: "Кем шулай эшләгән, ул ысын мәғәнәһендә гонаһлы һәм яуапҡа тарттырылырға тейеш", ти. Ҡай берҙәре: "Ташбүкәндәрҙе Ибраһим исемле егет ҡыйратҡан, тип ишеттек", тигәс, өлкәндәре: "Уны хәҙер үк табып, бында алып килеп, халыҡ алдына баҫтырығыҙ", тип бойора. Ибраһим бәйғәмбәрҙе килтергәс, кешеләр: "Эй, Ибраһим! Беҙҙең аллаларҙы һин емереп ташланыңмы?" тип һорағас, бәйғәмбәр: "Мин түгел, ә таш һындарҙың иң өлкәне емерҙе. Әгәр улар һөйләшә белә икән һәм һеҙҙең һорауҙарығыҙға яуап бирә ала икән, үҙҙәренән һорашығыҙ", тип яуаплаған. Кешеләр уйға ҡалған һәм уйлана торғас, ысынлап та, бер кемгә лә файҙа килтермәгән һәм бер кемде лә яҡлай алмаған таштарға табынып, хаталаныуҙарын аңлаған. Ҡай берҙәре бер-береһенә: "Ибраһим гонаһлы түгел, ә бөтөнләй кәрәкмәгән нәмәләргә табынған һеҙ үҙегеҙ гонаһлы", тиеп бәхәсләшкән.

Ләкин хаҡлыҡтың ниҙә булыуын ваҡытлыса ғына аңлаған кешеләр янынан элекке юлға баҫҡан һәм улар Ибраһимға: "Һин бит беҙ табынған ташбүкәндәрҙең һөйләшмәүен беләһең, шулай булғас, нисек инде һин беҙҙән уларҙан яуап ишетеүебеҙҙе үтенәһең", тип аптырашҡан. Ә Ибраһим: "Шулай булғас, һеҙ уларға нисек мөрәжәғәт итәһегеҙ һуң? Нисек инде, һеҙҙе үҙ яҡлауына ала алмаған нәмәләргә табына алаһығыҙ? Оят бит. Элекке юлығыҙға баҫырға һәм хаталаныуығыҙ тураһында аҙ ғына ла фекер йөрөтмәҫкә нимә мәжбүр итте?" ти.

**(Дауамы бар).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЯУГИРҘАРЫБЫҘ...

## сик буйын да һаҡлаған!

**Сибай ҡалаһында сик буйы ғәскәрҙәренә һәйкәл асырға ниәт ҡылынғас, проект буйынса һәйкәлдәге таштың бер яғына Рәсәй сик буйы һаҡсыһын, ә икенсе яғына боронғо хәрби кейемдәге башҡортто, йәғни шундай уҡ боронғо сик һаҡсыһын ҡуйырға ҡарар ителә. Әммә ошо урында бәғзе бер кешеләрҙә һорау тыуа: ә ни өсөн тап башҡортто? Башҡорттар сик буйында хеҙмәт иткәнме ни? Тарихты яҡшы белгәндәр, әлбиттә, ошо урында хатта тертләп китер! Әммә һәйкәл эшен ойоштороусы йәмәғәт эшмәкәрҙәре Басир Шәрипов, Рәсүл Аманов, Әхәт Аҫылбаев һәм Дамир Ғиззәтуллиндар юғалып ҡалмай. Ул кәңәшмәлә ата-бабаларыбыҙҙың әле 10-сы быуаттан хәрби хеҙмәттә булыуын, 1744 йылдан алып Рәсәй сик буйҙары ғәскәрҙәре составында тороуын һәм ике быуат буйына Ырымбур сик буйы линияһын тик үҙ көстәре менән генә һаҡлауын документтар һәм тарихсылар яҙмалары менән иҫбатлай. Һәм был мәғлүмәтте гәзит уҡыусыларға ла белдерергә теләй.**

Башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте бик борондан килә. Тарихсылар Рәмил Рәхимов, Марат Ҡолшәрипов, Азат Ярмуллин һәм башҡаларҙың был хаҡта бик ентекләп яҙылған фәнни хеҙмәттәре лә, китаптары ла бар. Әммә, үкенескә күрә, һәр уҡыусы тарихи китапҡа тотонмай, күптәргә ябай һүҙ менән аңлатыу, төшөндөрөү кәрәк. Тарихи баҫмаларға таянғанда, әле X быуаттың беренсе яртыһында уҡ (ҡайһы бер инешләрҙә IX быуаттың беренсе яртыһы) башҡорт ҡәбиләләре етәксеһе Башҡорт 2 мең һыбайлыһы менән Хазар ҡағанаты ғәскәрендә Ҡыймаҡ ҡағанаты сигендә хеҙмәт итә. Башҡортостандың Монгол империяһы составына инеү осоронда (XIII б.) башҡорт отрядтары үҙҙәренең аты, ҡоралы һәм кәрәк-ярағы менән монгол армияһын, XIII-XVI бб. Алтын Урҙа, Ҡазан ханлығы, Нуғай Урҙаһы һәм Себер ханлығы ғәскәрҙәрен тулыландыра. Жалованный грамота, шәжәрә һ.б. тарихи сығанаҡтарға ярашлы, башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы шарттарының береһе була. XVII быуаттан алып ул юғары власть (батша, император), дәүләт властының үҙәк органдары (Баяр думаһы, Сенат, Ҡазан һарайы приказы, Хәрби коллегия, Хәрби министрлыҡ) акттары тарафынан көйләнә, урындағы үҙидаралыҡтың юғары вазифалы кешеләре (воевода, губернатор, хәрби губернатор, генерал губернатор) тарафынан контролдә тотола. Уны туранан-тура ойоштороуҙы старшина, тархан, батырҙар, XVIII быуат уртаһынан алып оберкомендант, комендант, гарнизон начальнигы, старшина, яҫауыл, хорунжий, сотник, XIX быуат шул уҡ Башҡорт-мишәр ғәскәре командующийы, кантон һәм дистанция башлығы, йорт һәм поход старшинаһы, башҡорт полктары командирҙары һ.б. тормошҡа ашыра. Башҡорт халҡының тышҡы хеҙмәткә (Европа сиктәрен һаҡлау һәм һуғыштарҙа ҡатнашыу) һәм эске хеҙмәткә (сик хеҙмәте - Рәсәйҙең көньяҡ көнсығыш нығытмалы сик һыҙыҡтарын һаҡлау; этап хеҙмәте - хөкөм ителгән кешеләрҙе Себер трактында, Өфөнән Силәбе ҡалаһына тиклем юлда оҙатып барыу; Ҡазан, Мәскәү, Түбәнге Новгород, Ырымбурҙа һ.б. ҡалаларҙа ҡарауыл һәм полиция хеҙмәте, йәрминкәләр ваҡытында юлдарҙы һаҡлау) бүленә.

Башҡорттар 1744 йылдан алып йыл һайын әле XVIII быуаттың 30-сы йылдарында уҡ барлыҡҡа килгән Ырымбур сик һыҙығы һағында хеҙмәт итә (1744 йылда 1,5 мең кеше; 1769 йылда 2,2 мең; 1798 йылдан алып 5-6 мең кеше). Был сик Тубыл йылғаһынан алып, Уй йылғаһы үренә һәм ары Урал йылғаһы ағымы буйлап Каспий диңгеҙенә ҡәҙәр һуҙыла. Линия биш дистанцияға бүленә. Беренсеһе үҙ эсенә ҡәлғәләрҙе һәм Звериноголов ҡәлғәһенән Верхнеуралға тиклем булған редуттарҙы ала. Бында Звериноголов, Усть-Уйск, Крутоярск, Ҡаракүл, Троицк ҡалаһы, Степной, Петропавловск, Ҡарағай ҡәлғәләре инә. Икенсеһе Верхнеуралдан Орск ҡәлғәһенә тиклем арауыҡты ала. Бында иһә Верхнеурал, Магнит, Ҡыҙыл, Уртазым, Таналыҡ ҡәлғәләре була. Өсөнсөһө Орскиҙан Ырымбурғаса булып, Орск, Губерлинск, Ильинск, Верхнеозерный, Красногорск һәм Ырымбур ҡалаһын ала. Дүртенсеһе Ырымбурҙан Уральскиға тиклем килә, Чернореченский, Татищев, Нижнеозерный, Рассыпной ҡәлғәләрен үтә. Бишенсе дистанция Уральск ҡалаһынан Гурьев ҡаласығынаса килеп туҡтай.

1745 йылдан алып башҡорт командалары Себер сик буйы һыҙығында ла хеҙмәт итә. Хеҙмәт ваҡыты 1 йыл була, 1769 йылдан алып - 2 йыл; 1800 йылдан йөкләмә этап хеҙмәте менән алыштырыла. Йәйге хеҙмәт 15 майҙан 16 ноябргә тиклем дауам итә, ҡышҡы (уға өс тапҡыр кәмерәк кеше йәлеп ителгән) -16 ноябрҙән алып 15 майға тиклем. Башҡорт командаһы (полкы) походҡа үҙенең аҙыҡ түлеге һәм ат аҙығы менән сыға, йыйылыу урынынан 100 саҡрымдан алыҫыраҡ киткән осраҡта юл сығымдары ҡаҙна иҫәбенә күсерелә.

1797 йылдан алып хәрби хеҙмәт осорона һәр хеҙмәт итеүсегә айына 1 һум аҡса бирелә. Асылда, был түләү 2 атҡа, аҙыҡ түлеккә, ҡоралға һәм ғәскәри кәрәк-яраҡҡа киткән ғәмәлдәге сығымдарҙы ҡапламаған да.

1798-1863 йылдарҙа Ырымбур крайында хеҙмәтле ҡатламдар, шул иҫәптән башҡорттар менән идара итеүҙең кантон системаһы ҡулланыла. 1847 йылдан 30 йыллыҡ хеҙмәт итеү ваҡыты индерелә. Һәр 100 хеҙмәт итеүсе менән поход яҫауылы, поход сотнигы һәм хорунжийы, һәр 250 хәрби менән поход старшинаһы, сотник йәки яҫауыл етәкселек итә. Йәйләп сик хеҙ-

МИН БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШӘМ

# ТУҒАН ТЕЛЕҢДЕ БЕЛЕҮ МОДАҒА ӘЙЛӘНҺЕН

**Үҙ туған телеңде белмәү, ошо телдә хатта көнкүреш кимәлендә аралаша алмау - оят. Шуға күрә балаларға туған телде бәләкәйҙән, балалар баҡсаһынан, улар бөтөн нәмәне еңел үҙләштергән ваҡытта өйрәтә башларға кәрәк.**

Мәктәп программаһын артыҡ ҡатмарлаштырмайынса, баланы үҙ телендә һөйләшергә өйрәтеү, грамматика нигеҙҙәрен генә биреү ҙә етә. Ә башҡа милләттәрҙә иһә республикаһын дәүләт теле булған башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятырға кәрәк. Ә беҙ, артистар, йырҙарыбыҙ аша туған телебеҙгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу өсөн барлыҡ мөмкинлектәрҙе файҙаланасаҡбыҙ. Йәштәр араһында башҡорт һәм татар телдәре модалы трендҡа әүерелә, телдәрҙе көсләп уҡытыу тураһындағы фекер берәүҙең дә башына ла инеп сыҡмаясаҡ. Беҙҙең концерттарҙа рус ҡыҙҙары, сыуаш, рус егеттәре башҡорт йырҙарына ҡушылып йырлай. Был бик яҡшы! Ә инде сәхнәгә әсәләр сығып, йырҙарыбыҙ аша балаларының туған телдәре менән ҡыҙыҡһына башлауы өсөн рәхмәт белдергәндә, мин бигерәк тә шатланам һәм ғорурланам.



Әйткәндәй, был мөрәжәғәтемдә социаль селтәрҙәрҙә ни өсөн русса яҙыуым тураһында һорарһығыҙ. Яуап бирәм: мине башҡорттар һәм татарҙар ғына түгел, тотош ил, бөтөн донъя ишетеүен теләйем. Был - минең күңел ораным.

**Элвин ГРЕЙ.**

**("Бәйләнештә" социаль селтәренән алынды).**




мәте сик буйындағы ("хеҙмәт итеүсе") кантон башҡорттары өсөн генә мәжбүригә әйләнә.

Башҡорттар илдең көнбайыш рубеждарында ла хеҙмәт итә. Империяның көнбайыш сик буйына ебәрелгән башҡорт полктары унда әллә нисә йылдарға ҡалдырыла. Ошондай тышҡы хеҙмәт Бессарабияла үтә. 1828 йылда 6-сы һәм 9-сы башҡорт кантондарында барлыҡҡа килгән 1-се, 2-се полктар сик буйында 1833 йылға тиклем тора. 1-се Башҡорт полкы 1831 йылда Дунай һәм Прут йылғалары буйында Рени ҡалаһында, ә 2-се полк Дунай һәм Ҡара диңгеҙ яры буйындағы Измаил ҡәлғәһендә һаҡта тора.

XIX быуат уртаһында башҡорт халҡының хәрби хеҙмәте эш һәм ылау хеҙмәте (төҙөлөш эштәре, йөк ташыу һ.б.) менән алыштырыла башлай. 30-50-се йылдарҙа хәрби хеҙмәт үтәү өсөн саҡырылғандар һаны 70 проценттан 24 процентҡа тиклем кәмей. 1863 йылға ҡарата эшсе командаларҙа 28 кантондан 9 кантон башҡорттары тора, ҡалғандарының хеҙмәте аҡсалата йыйым менән алыштырыла. Башҡорттар хеҙмәт отрядтары составында йәки Яйыҡ казактары менән берлектә 1558-1581 йылғы Ливон һуғышында, Өфө өйәҙендә Себер татарҙарының һәм ҡалмыҡтарҙың сапҡындарын (XVI- XVII бб.) кире ҡағыуҙа, Рәсәйҙе поляк интервенттарынан азат итеүҙә (XVII б. 1-се сирege), 1643-1644 йылдарҙағы Ҡалмыҡ походында, 1687 һәм 1689 йылдарҙағы Ҡырым походтарында, 1695 һәм 1696 йылдарҙағы Азов походтарында ҡатнаша. Башҡорт командалары һәм полктары 1700-1721 йылдарҙағы Төньяҡ һуғышында (1 мең кеше; Балтик буйы крайында), 1756-1763 йылдарҙағы Ете йыллыҡ һуғышта (1,5 мең кеше; Көнсығыш Пруссияла), 1789-1790 йылдарҙағы рус-швед һуғышында (4 полк; Финляндияла), 1806-1807 йылдарҙағы Рәсәй Пруссия-Франция һуғышында (10 мең кеше; Көнсығыш Пруссияла), Ватан һуғышында (1812) һәм 1813-1814 йылдарҙағы рус армияһының сит илгә походтарында (20 полк), 1828-1829 йылдарҙағы рус-төрөк һуғышында (Ырымбур казактары менән берлектә 0,5 мең; Көнбайыш Ҡара диңгеҙ буйында), Хиуа походында (1839-1840), Коканд походтарында, 1853-1856 йылдарҙағы Ҡырым һуғышында (4 полк; Балтик буйы крайында) хәрәкәт итә. 1792 йылдан 2 башҡорт полкы Балтик буйында Рәсәй-Польша сиген һаҡлай. 1828- 1833 йылдарҙа 2 полк Бессарабияла сик буйын һаҡлау хеҙмәтен үтәй.

"Башҡорттар тураһында положение" буйынса башҡорт халҡының хәрби хеҙмәте бөтөрөлә, башҡорттар ирекле ауыл кешеләре ҡатламына күсерелә. 1865 йылда Башҡорт ғәскәре таратыла. 1882 йылдан алып башҡорттар хеҙмәткә дөйөм хәрби йөкләмә нигеҙендә саҡырыла башлай. 1874-1882 йылдарҙа Силәбе өйәҙе, Верхнеурал өйәҙе һәм Ырымбур өйәҙе башҡорттары хәрби хеҙмәтте Башҡорт атлы полкында үтә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөтөн ошо факттарға өҫтәп, башҡорт халҡының Рәсәйҙең алыштырғыһыҙ сик һаҡсыһы ғына түгел, ә тәбиғәте, ҡаны менән дә ҡурҡыу белмәҫ яугир, быуаттар ағымында һыналған тоғро һалдат булыуын да иҫбатлап торорға кәрәкме? Сибайҙа - башҡорттарҙың ояһында "Башҡорттар сик һаҡлағанмы?" тигән һорауҙың тыуыуы сәйер, бик сәйер күренеш. Рәхмәт, изге башланғысты Сибай ҡала хакимиәте башлығы Рөстәм Әхмәткәрим улы Афзалов та яҡлап сыҡты һәм һәйкәлдә башҡорт яугиры ла булырға тейешлекте раҫланы. Ошо мәсьәлә буйынса Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы сираттан тыш ултырыш уҙғарҙы. "Киске Өфө" гәзите лә был идеяны яҡлап сыҡты. Бөгөн күптәр, һәйкәлдә Рәсәй сик буйы ғәскәрҙәре яугиры менән бер рәттән башҡорт яугиры ла булырға тейеш, тигән фекерҙә.**

**Миләүшә ХӘБИЛОВА әҙерләне.**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# БЫЯЛА



**Үтә күренмәле, тиҙ ярылып барған материалдың атамаһы булған "быяла" тигән башҡорт һүҙе бик боронғо һәм тамыры менән боронғо гректарҙың "фиала (fiala)" тигән һүҙенә барып тоташа.**

Гректарҙа был һүҙ "шешә" ("бутылка", "флакон") тигән мәғәнәлә ҡулланылған. Бик боронғо дәүерҙәрҙә хәҙерге Үзбәкстандың көньяғында һәм Тажикистан ерҙәрендә ярайһы уҡ көслө Согдия тип аталған һәм сауҙагәрҙәре менән дан тотҡан дәүләт була. Был дәүләт боронғо гректар менән дә әүҙем алыш-биреш, сауҙа эше алып бара. Согд сауҙагәрҙәре аша "фиала" һүҙе беҙҙең эраға тиклем өсөнсө быуатта Урта Азияла йәшәгән иран телле халыҡтар теленә инеп таралып китә. Һуңғарак был ерҙәрҙә төрки телле ҡәүемдәр нығынғас, был "фиала" һүҙе "быяла" формаһын алып, төрки телле халыҡтар телендә лә нығына һәм үҙ һүҙенә әүерелә. Бөтә төрки халыҡтарҙа ла "быяла" материалды аңлатһа, үзбәктәрҙә "пиала" формаһында конус кеүегерәк сәй йәки бүтән шыйыҡ ризыҡты ҡойоп эсә торған һауытты аңлата. Үзбәктәрҙәге кеүек үк, "пияла" һүҙе һауыт мәғәнәһендә башҡорттоң ҡайһы бер һөйләштәрендә лә ҡулланыла, әммә был мәғәнәлә ныҡ таралмаған. Йәғни, үзбәктәрҙә был һүҙ, гректарҙағы кеүек үк, "һауыт" мәғәнәһен һаҡлап ҡалһа, башҡа төркиҙәрҙә үҙгәреш кисереп, тиҙ ярылып барған, үтә күренмәле материалды аңлатҡан термин булараҡ нығына.

Хәҙер был һүҙҙең әллә ҡайҙа йәшәгән гректар менән бәйле булыуын берәү ҙә уйлап та бирмәйҙер, моғайын. Шулай итеп, хатта бер һүҙ аша ла халҡыбыҙҙың бик боронғо тарихына күҙ һалырға мөмкин икәнен күрәбеҙ.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Хәмит АЛҒАР*

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Зияутдин Гумушаневи Хәлидиә суфый туғанлығына шәйех Әхмәт бән Сөләймән әл Әрүәди тарафынан алына. Был зат Истанбулдағы Айа Суфия мәсетенә мөғәллимлек итергә килгәнсе Мәүлән Хәлид Багдадиҙың Триполиҙағы (Сирия) хәлфәһе (вариҫы) була. З. Гумушаневи суфыйҙар туғанлығына алыныу менән уның артынан эйәреүселәр тиҙ арала туҡтауһыҙ күбәйә барып, уның рухи етәкселеге аҫтында Фатима Солтан мәсетенең Ҡалаоглу бүлексәһендә осраша торған булған. Оттоман бюрократияһының күп һанлы вәкилдәре уның эйәрсәндәре булһа, солтан Әбделхәмид II Гумушаневи 1875 йылда ул нигеҙләгән теккеға (дини йорт) бер нисә тапҡыр килеп китә. Суфый шәйехтәренә хас әүҙемлегенән тыш, З. Гумушаневи үҙенең мөриттәре менән 1877 йылда урыҫ-төрөк һуғышына ялланып барыуы менән дә билдәле. Ул шулай уҡ китап нәшер итеү өсөн типографиялар ойоштора, Трапезунд, Риза һәм Офта йәмәғәт китапханалары астыра. Уның ошо күп төрлө һәм новаторҙарса эшмәкәрлеге Зәйнулла Рәсүлевҡа һис шикһеҙ ҙур йоғонто яһап, уны ла ҡайһы бер тәүәккәл мәҙәни һәм мәғрифәти инновацияларға этәрә.

Зияутдин Гумушаневи З. Рәсүлевҡа, уны "тулы белемле, камил булған хәлфә", тип баһалап, мөриттәр уҡытып, уларҙы Хәлидиә-Нәҡшбәндиә суфыйҙары туғанлығына алыу хоҡуғы бирә. Аҡҡужаға ҡайтҡан З. Рәсүлевтың, үҙе ойошторған йыйылыштарға уҡыусылар йыйнап, тиҙ арала уңышҡа өлгәшеүе урындағы танылған шәйехтәрҙе һәм уларҙың мөриттәрен маҙаһыҙлай башлай. Уға ҡарата булған дошманлыҡ З. Рәсүлевтың һәм уның мөриттәренең ҡысҡырып зекер әйтеүе тураһында хәбәр таралып китеүе арҡаһында көсәйеп китә (зекер - Алаһы Тәғәләнең асылын аңлау маҡсатында трансҡа инеп, Илаһи Заттың барлығын һиҙә, тоя ала торған халәткә етеү ысулы). Был З. Рәсүлевтың оппоненттары тарафынан Нәҡшбәндиә суфыйҙары традицияларын бысратыу итеп баһалана. Академик В. Бартольд 1917 йылда З. Рәсүлевтың вафатына бағышланған некрологта уны "Башҡортостанда ҡысҡырып зекер әйтеү ғәмәлен индереүсе беренсе инсан", тип билдәләй.

Зәйнулла Рәсүлевтың ҡысҡырып зекер әйтеү яҡлы булыуы дөрөҫ булғанға оҡшамаған. Мәүләнә Хәлид суфыйҙар йәмғиәтенең үҙе нигеҙләгән филиалы өсөн эстән, үҙ алдына ғына зекер әйтеүҙе раҫлаған. З. Рәсүлев үҙенең суфыйҙар ғәмәлиәте асылының төп һыҙаттары тәфсирләнгән "Аль-фауаидуль-аль-мухимма" әҫәрендә ошоно уҡ раҫлай. Әммә З. Рәсүлевтың ватандашы Мөхәммәт Морат Минзәләүи "З. Рәсүлев тирәһендәгеләр араһында элек был яҡтарҙа булмаған мистик ҡысҡырыуҙар ишетелә торған булған", тип яҙа. Былдай мистик ҡысҡырыуҙар Хәлидиә ысулына ғына хас һыҙат булып, күңел илһамланыуы халәтендә башҡарылған зекер һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Быйдай ҡысҡырыуҙарҙың үҙ алдына зекер әйтеүҙән һуң башланыуына шик юҡ, һәм был ҡысҡырып зекер әйткәндәге тәьҫиргә тиң.

**(Дауамы бар).**

✓ **"Йәш Гвардия" ойошмаһының эш йүнәлештәре пионер һәм комсомол ойошмалары эшмәкәрлеге менән тап килә. Илһөйәрлек тәрбиәләү, граждандар итеп үҫтереү, йәмғиәттәге процестарҙа әүҙем ҡатнаштырыу йүнәлешендә эш бара.**

# ТУҒАН ТЕЛЕҢДЕ

## күп йәштәрҙең

**Киләсәк - йәштәр ҡулында икән, тимәк улар алдына юғары талаптар ҡуйыла, улар иңенә оло яуаплылыҡ йөкмәтелгән. Ошо талаптарына яуап биреү өсөн ниндәй сифаттарға эйә булырға кәрәк һуң? "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Йәш Гвардия"сылар ойошмаһы етәксеһе, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай эргәһендәге Йәштәр йәмәғәт палатаһы ағзаһы, Өфө дәүләт нефть техник университетының иктисад һәм сервис институты йәштәр сәйәсәте буйынса директор урынбаҫары Люциә ЮЛЫЕВА менән бергәләп ошо һәм башҡа актуаль һорауҙарға яуап эҙләйбеҙ.**

**Люциә, һеҙҙе әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, йәштәр өсөн төрлө проекттарҙы тормошҡа ашырыусы лидер тип беләбеҙ. Юл башы нисек башланды?**

- Баштан уҡ бер ниндәй ҙә пландар ҡорманым, үҙенән-үҙе ошолай килеп сыкты. Сығышым менән мин Ырымбур өлкәһенән. Гимназияны алтын миҙалға тамамланым, унда уҡыған йылдарҙа Ырымбурҙағы "Лидер" тигән мәктәптә ситтән тороп шөғөлләндем һәм унан да ҡыҙыл диплом алып сыҡтым. Артабан принципиаль рәүештә дәүләт һәм муниципаль идаралыҡ йүнәлеше буйынса юғары белем алырға ниәтләндем. Сөнки ул саҡта уй-ниәттәр башҡасараҡ ине, йәғни үҙемдең тыуған яғымда - Ырымбур өлкәһенең Александровский районына ҡайтып эшләйәсәкмен, тип хыялландым. Әммә тормошта бер аҙ икенсерәк килеп сыҡты. Ул ваҡытта Ырымбур өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы бик әүҙем эшләне, Башҡортостан вуздарына уҡырға йүнәлтмә бирә торғайнылар. Миңә бер нисә уҡыу йортона бер нисә төр йүнәлеш буйынса уҡырға инергә тәҡдим иттеләр, мин дәүләт һәм муниципаль идаралыҡ йүнәше буйынса белем алырға теләп, Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис академияһын һайланым. Беренсе курста дәрестәр менән бер ниндәй ҙә ҡыйынлыҡтар булмай бит инде, буш ваҡыт күп. Староста бер ваҡыт ниндәйҙер ойошма үткәргән сараға саҡырҙы, унда мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр өсөн архитектур мөхиттен уңайлығы тураһында һүҙ барҙы. Йәштәр ҡаланың сауҙа үҙәктәрендә, төрлө административ учреждениеларҙа, фатирҙарҙа мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр йөрөй алһын өсөн махсус уңайлыҡтар барлығы-юҡлығын тикшереп, доклад яһаны. Шулай осраҡлы рәүештә "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Йәш Гвардия" ойошмаһының эше менән таныштым һәм үҙем дә ошо костюм-галстукта килгән матур йәштәр рәтенә инеп киттем. Ике йыл ярым ойошманың мәрхәмәтлек эштәрен алып барҙым, беҙ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр, етем балалар, мәктәп-интернат тәрбиәләнеүселәренә төрлөсә ярҙам күрһәтә, сараларға бушлай билеттар тарата торғайныҡ. Ярты йылдан "Йәш Гвардия" район ойошмаһының идара етәксеһе урынбаҫары итеп һайландым, һуңынан Киров районы бүлексәһен етәкләй башланым. 2012 йылда "Йәш Гвардия" Волга буйы округы аппараты етәксеһе булырға тәҡдим иттеләр. Ризалыҡ бирер алдынан бик оҙаҡ уйланым, сөнки студент кешегә ун дүрт өлкә менән идаралыҡ итеүе ҙур яуаплылыҡ өҫтөй. Волга буйы округы аппараты етәксеһе булып эшләү минең өсөн ҙур тәжрибә мәктәбе булды, киң фекерләргә, төрлө кешеләр менән уртаҡ тел табып эшләргә өйрәндем һәм хатта иң яҡшы етәксе булараҡ наградландым. Вузда уҡыған саҡта студенттар советы ойоштороҡ, уҡыу йортоноң телевидениеһын астыҡ, тәүге фекер алышыу клубтарын булдырҙыҡ, бихисап саралар ойоштороп, бында белем алған йәштәрҙең үҫешенә йоғонто яһарлыҡ үҙгәрештәр индерҙек.

2013 йылда һөнәр алып сыҡҡас, миңә вуздың студенттар һәм хеҙмәткәрҙәр профкомын етәкләргә һәм ошонда эшкә ҡалырға тәҡдим иттеләр. Әйтергә кәрәк, профсоюз эшен ойошторғанда студенттар менән эшләүе күпкә еңелерәк ине, сөнки йәштәр өсөн ниҙер эшләһәң, улар һиңә ыңғай тәьҫораттарын әйтә, ихласлыҡҡа ихласлыҡ менән яуап бирә. Эшләй башлағас та 300 кеше араһында һорау алыу үткәрҙек, тәүге баһалар кире булды, сөнки быға тиклем профсоюз биш йыл эшләмәгән булған. Күптәр, беҙҙең өсөн ишектәр ябыҡ, ярҙам юҡ, тип яҙғайны. Бөтә фекерҙәрҙе иҫәпкә алып, эш башланым һәм 2016 йылға тиклем профсоюзды етәкләгән осорҙа студенттар араһында күрһәткестәр 18-ҙән 56 процентка тиклем, хеҙмәткәрҙәр араһында 22 проценттан 70-кә тиклем күтәрелде. Бер юлы бер нисә йүнәлештә эшләүемдең файҙаһы тейҙе, профсоюзға мөрәжәғәт итеүселәргә БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың Йәштәр йәмәғәт палатаһы ағзаһы булараҡ та, "Йәш Гвардия" ойошмаһы аша ла ярҙам итә алдым. 2014-2015 йылдарҙа ректорҙың йәштәр сәйәсәте буйынса кәңәшсеһе вазифаһын башҡарҙым, 2015-2015 йылдарҙа "Йәш Гвардия"ның төбәк штабы етәксеһе урынбаҫары булып эшләнем. Бына шулай, "Йәш Гвардия" ойошмаһына әүҙем йәш кешеләрҙең береһе булараҡ ҡына килеп индем һәм 2016 йылдан үҙем төбәк штабының рәйесе итеп һайландым. Ысынын әйткәндә, ошолай уңыштарға өлгәшермен тип уйламағайным да...

**Совет заманындағы пионер, комсомол ойошмалары йәш быуынды илһөйәр, яуаплы граждан итеп тәрбиәләүҙә төп маҡсат итеп ҡуя ине. "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Йәш Гвардия" ойошмаһы ағзалары уларҙың эшен дауам итеүсеме, әллә һеҙҙең маҡсаттар башҡасараҡмы?**

- Беҙ үҙебеҙҙе элек эшләгән үҫмерҙәр һәм йәштәр ойошмаларының эшен дауам итеүселәр, тип һанай алабыҙ. Сөнки беҙ ҙә шулай уҡ "Берҙәм Рәсәй" партияһы ҡанаты аҫтында эшләйбеҙ һәм партия идеологияһын алға һөрәбеҙ. Бик күп аспекттар буйынса "Йәш Гвардия" ойошмаһының эш йүнәлештәре пионер һәм комсомол ойошмалары эшмәкәрлеге менән тап килә. Йәштәрҙә илһөйәрлек тәрбиәләү, граждандар итеп үҫтереү, йәмғиәттәге процестарҙа әүҙем ҡатнаштырыу йүнәлешендә эшләгәс, беҙ ҙә шул уҡ тәрбиә мәктәбе, тип иҫәпләй алабыҙҙыр үҙебеҙҙе. "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Йәш Гвардия" төбәк штабы эшләй башлауына быйыл ун ике йыл тулды. Беҙ үҙ заманында комсомол лидерҙары булған оло йәштәге кешеләр менән аралашып торабыҙ, бер йүнәлештә эшләүебеҙҙе аңлайбыҙ. Граждандар йәмғиәтен тәрбиәләү, йәштәрҙең хоҡуҡтарын яҡлау, илһөйәрлек, рухи һәм әхлаҡи тәрбиә биреү, мәҙәнилеккә өйрәтеү, аң-белем таратыу йүнәлештәре ойошма барлыҡҡа килгәндән бирле төп бурыстар итеп билдәләнгән. Заман үҙгәрештәре халыҡ-ара сәйәсәт, мәғлүмәти мөхиттә эшләү, тыйылған контентҡа ҡаршы көрәш кеүек яңы йүнәлештәр һәм бурыстар билдәләнгән.

"Йәш гвардия" ойошмаһы илгә кәрәкле кадрҙар әҙерләүгә лә булышлыҡ итә, әммә был активист булған өсөн генә ниндәйҙер өлкәлә уңышҡа өлгәшергә ярҙам итәсәкбеҙ, тигәнде аңлатмай. Ҡайһы саҡта амбициялы йәштәр, нисә йылдан депутат йә министр кимәленә күтәрелә алам, тиған һорау бирә. Карьера төҙөүҙе тәүмаҡсат итеп килгән йәштәргә беҙ һәр ваҡыт бер төрлө яуап бирәбеҙ: үндай юғарылыҡҡа күтәрелеү тураһында уйларҙан алда, республика мәнфәғәтендә һәм йәштәр сәйәсәтендә ниндәй файҙалы эштәр атҡарыуың тураһында ҡайғыртырға кәрәк. Сөнки ун йыл буйы "Йәш гвардия" ағзаһы булып йөрөргә һәм бер нисек тә алға китмәҫкә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта ҡайны берәүҙәр беҙҙең сафҡа алыныу менән йәмғиәткә файҙалы проекттар тәҡдим итеп, эште ҙур яуаплылыҡ менән атҡарып, республика һәм федераль кимәлдә үҙен яҡшы яҡтан күрһәтеп өлгөрә. Беҙҙең коллегалар Мәскәүҙәге "Йәш гвардия" штабында эшләй, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға, РФ Дәүләт Думаһына депутат булып һайланғандары ла бар. Мин дә ябай активист булараҡ эш башланым, "Йәш гвардия" - ул ни бары ҡорал, уны нисек файҙаланыу һәр кемдең үҙенән тора.

**"Йәш Гвардия" ойошмаһының төбәк штабы рәйесе булараҡ, ойошманы ниндәй юҫыкта үҫтерәһегеҙ?**

- Мине "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Йәш Гвардия" ойошмаһының төбәк штабында тәүге етәксе ҡыҙ, тәүге башҡорт кадры тип тә билдәләйҙәр. "Йәш Гвардия" эшләй башлағас, мин ойошманың иғтибарын тәүге тапҡыр милли сәйәсәткә йүнәлттем. Яңы команда йыйылғас, 250 делегат йыйып, форсайт-сессия үткәрҙек һәм яңы йүнәлеш буйынса эш башланыҡ, ике йылға план төҙөп алдыҡ. Былтыр өс проектты тормошҡа ашыра алыуыбыҙ менән ғорурланам: беренсеһе - Йәштәр субкультураһы фестивале, икенсеһе - "Аҫылташ" башҡорт мәҙәниәте форумы, өсөнсөһө - "Башҡорт телендә республика дебат уйындары". Йәштәр субкультураһы фестивалендә косплей, кей-поп, футбол фристайлы, роллерспорт, лонгборд, төрлө музыкаль ағымдар менән мауыҡҡан йәштәр бер майҙанға йыйылды. Ун бишкә яҡын майҙансыҡта һәр кем үҙенең шөғөлө буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрҙе, һөнәрҙәрен күрһәтте. Һәр береһе үҙенсәлекле булған бөтөнләй икенсе төрлө йәштәр менән таныштыҡ, хатта ундай шөғөлдәр барлығын белмәгәнбеҙ ҙә алдан. "Ватан" паркында өс меңгә яҡын кеше йыйылды, Салауат Юлаев һәйкәле эргәһенә ял итергә килгән халыҡ ҡыҙыҡһынып ҡарарға килде.

Йәштәр субкультураһы фестиваленән һуң бер ай үткәс, "Аҫылташ" башҡорт мәҙәниәте форумын уҙғарҙыҡ. Был форум 250 ҡатнашыусыға иҫәпләнгәйне, башҡорт мәҙәниәтен үҫтереү, пропагандалау, башҡорт телен күтәрмәләү, йәштәрҙе башҡорт мәҙәниәте менән яҡындан таныштырыу маҡсатында ойошторҙоҡ уны. Бөтә сара башҡортса барҙы, спикерҙар Башҡортостандың тарихы, яҡын киләсәктә иҡтисади-социаль үҫеше тураһында һөйләне. Интерактив майҙансыҡтарҙа милли аш-һыу, музыка ҡоралдары, бейеү, йолалар, кәсептәр буйынса оҫталыҡ дәрестәре күрһәтелде. Быйыл да ошондай мәғариф форумы үткәрергә уйлайбыҙ, тағы ла күберәк темалар буйынса лекциялар үткәрергә, федераль кимәлдәге спикерҙарҙы ла саҡырырға иҫәп тотабыҙ. Сөнки үткәнен белмәгән халыҡ киләсәген дә күҙаллай алмай. "Аҫылташ" башҡорт мәҙәниәте форумы тап шул үткәндәрҙе һәм киләсәкте ялғарға булышлыҡ иткән сара ул...

Бөгөн башҡорт телен балалар үҙ теләге менән уҡыһын, үҫмерҙәр башҡортса һөйләшһен өсөн инициативалы йәштәр тормошҡа ашырған проекттар күбәйә бара. Беҙ ҙә башҡорт телен популярлаштырыуға, йәштәргә рәсми һүҙҙәрҙе өйрәнергә этәргес булһын тип, "Башҡорт телендә республика дебат уйындары" тигән сара үткәрә башланыҡ. Тәүҙә уны Өфө йәштәре араһында үткәрҙек, унан Башҡортостандың район, ҡалаларында ойошторҙоҡ һәм 30 йәшкә тиклемгә бөтә теләүселәр ҙә ҡатнаша алды. Бөтәһе 156 команда ярышты, йәштәр һүҙҙәрҙе һайлап ҡына саф башҡортса һөйләште. Сөнки фекер алышыу темалары иҡтисад, сәйәсәт, мәҙәниәт, мәғариф, социаль мәсьәләләргә арналды һәм төрлө терминдарҙы башҡортса әйтергә кәрәк ине. "Башҡорт телендә республика дебат уйындары" телде яҡшыраҡ өйрәнеү өсөн генә түгел, белем даирәһен киңәйтеүгә лә булышлыҡ иткән сара булып сыҡты. Бына ошондай саралар туған телде өйрәнеүҙең мөһимлеген аңларға ярҙам итә лә инде. Былтыр "Башҡорт телендә республика дебат уйындары" проектын тулыһынса йәштәрҙең теләгенә, фиҙаҡәрлегенә таянып тормошҡа ашырһаҡ, быйыл "Рәсәй йәштәре" ойошмаһының грантын оттоҡ һәм уны тағы ла ҙурыраҡ аудитория йыйып үткәрергә иҫәп тотабыҙ.

"Берҙәм Рәсәй" партияһының "Йәш гвардия" ойошмаһының төбәк штабы етәксеһе булған осорҙа тормошҡа ашырған проекттар араһында тағы береһе өсөн ғорурлыҡ тойғоһо кисерәм. Ул да булһа, "Кескәй геройҙар форумы". Батыр йөрәкле кескәйҙәрҙең барыһының да тарихтарын районларҙа шылтыратып, интернет селтәренән эҙләп, хаттар яҙып йыйып алдыҡ һәм Өфөгә тантаналы сараға саҡырҙыҡ. Бында йыйылған бәләкәй балалар һәр береһе маҡтауға лайыҡ, улар хатта ололар ҙа юғалып ҡалырға мөмкин булған ауыр ситуацияларҙа үҙҙәрен ҡыйыу тоткан, яҡындарын һәм дуҫтарын ҡотҡар-

✓ *Йәшәйеш ҡиммәттәрен асыҡлау буйынса тикшереүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, йәштәр беренсе урынға ғаиләне ҡуя - уны улар ныҡлы терәк итеп күрә, унан һуң инде тормошта уңышлы кеше булыуҙы мөһим тип һанай.*

# БЕЛМӘҮЕ ОЯТ -

## ошоно аңлауы ҡыуандыра



**ЛЮЦИӘ ЮЛЫЕВА:**

*Йәштәр араһында лидер булам тиһәң, иң мөһиме, һәр ваҡыт үҙгәрергә, уҡырға һәм яңы йүнәлештәрҙә белемеңде камиллаштырып торорға, заман менән бергә атларға кәрәк. Әгәр ҙә беҙ үҫеүҙән туҡтаһаҡ, йәштәрҙең талаптарына яуап биреүҙән туҡтайбыҙ, уларға беҙҙең менән ҡыҙыҡ булмай башлай.*

ған. Мәҫәлән, Иглин районынан ете йәшлек Максим Бархатов ата-әсәһе өйҙә юҡ саҡта йорттарында янғын сығып киткәс, 6 йәшлек ҡустыһын тәҙрәнән тышҡа төртөп сығара ла, үҙе 3 йәшлек һеңлеһен күтәреп сыға. "Кескәй геройҙар форумы" тамамланғас, бик күп башҡа йәмәғәт ойошмалары ла киләһе йыл бергә үткәреү тәҡдиме менән сыҡты. Ҡайһы саҡта минән: "Ошондай сара үткәреү һиңә нимә өсөн кәрәк?" - тип һорайҙар. Тәү ҡарамаҡҡа артыҡ әһәмиәтле лә булмаған кеүек күренһә лә, илһөйәр, рухлы, батыр һәм әүҙем граждандлыҡ позицияһы булған йәш быуынды тәрбиәләп үҫтереү йәһәтендә бик әһәмиәтле эш. Был балалар тураһында ауылдаштары, бик һирәк осраҡта райондаштары белә. Ә улар тураһында бөтә ил белергә һәм ғорурланырға тейеш, сөнки ошонда килгән балалар яҡын кешеһен яҡлау, һаҡлау өсөн ҡайһы бер ололарҙан да күберәк эшләгән.

Беҙгә ситтән бик күп инициативалы йәштәр тәҡдимдәр менән мөрәжәғәт итә, беҙ дәүләт органы түгел, шуға йәш быуын өсөн ысынлап та мөһим булған идеялар ғына хуплау таба һәм йыш ҡына проекттарҙы башҡа йәмәғәт ойошмалары менән берлектә тормошҡа ашырабыҙ. Шундай проекттарҙың береһе - 2014 йылдан башланған "Башҡортостан Республикаһының сәйәси лидерлыҡ мәктәбе" тигән проект. Унда республиканың төрлө төбәктәренән йыйылған утыҙ кеше бер аҙна эсендә, белемдәрен камиллаштырып, артабан үҙ проектын төҙөп, еренә еткереп эшләп, бер айҙан проекттарын яҡлап сыға. Былтыр Сәйәси лидерлыҡ мәктәбе медиа-мәктәп формаһында үтте, йәштәр "Молодежь. Идеи. Развитие" тигән мәғлүмәти медиа-портал эшләне. Бында яҙышҡан, ижади фекерләгән, мәғлүмәт саралары менән ҡыҙыҡһынған йәштәр йыйылды. Быйыл ул апрель айында үҙ эшен башланы.

Йәштәр араһында лидер булам тиһәң, иң мөһиме, һәр ваҡыт үҙгәрергә, уҡырға һәм яңы йүнәлештәрҙә белемеңде камиллаштырып торорға, заман менән бергә атларға кәрәк. Әгәр ҙә беҙ үҫеүҙән туҡтаһаҡ, йәштәрҙең талаптарына яуап биреүҙән туҡтайбыҙ, уларға беҙҙең менән ҡыҙыҡ булмай башлай. Шуға күрә, ваҡытында уртаҡ эшкә үҙ өлөшөңдө индереп ҡалырға һәм артыңдан килгән йәштәргә үҙ идеяларын тормошҡа ашырырға, бүтәнсә эшләргә, үҙ сәйәсәтен алып барырға мөмкинлек бирергә кәрәк.

**Ғәҙәттә, бер-ике иң әүҙем йәш кеше йәмәғәт эштәрендә даими рәүештә ҡатнаша, башҡаларҙы саҡыра, әйҙәй, саралар ойоштора. Бөгөнгө йәштәр араһында энтузиастар, бушҡа эшләргә әҙер кешеләр күпме?**

- Беҙҙең йәштәштәр, замандаштар илдә үҙгәртеп ҡороуҙар барған осорҙа тыуған балалар. Мин үҙем дә 1990 йылғы. Элек бер генә партия булған, уға ҡараған ойошмаларҙа эштәр тәртипкә тотолған. Хәҙер партиялар ҙа күп, йәмәғәт ойошмаларының төрлөлөгө тураһында әйтеп тораһы ла түгел, республикала 5 меңдән ашыу коммерция булмаған ойошма бар. Улар араһында йәштәрҙе йәлеп иткән дә, эшкә ололарҙы ҡушҡандары ла бихисап. Йәштәрҙе ойошма эшенә йәлеп итеү өсөн беҙ алып барған эшмәкәрлек ҡайһылыр яғы менән уларҙы ылыҡтырып торорға тейеш. Сөнки һәр кем үҙенә оҡшаған шөғөлдө һайлай, күңеленә хуш килгән йүнәлештә проекттарын тормошҡа ашыра, үҙ юлын табыу хоҡуғына эйә. Энтузиастар бар, ләкин бөтәһен дә ойошма эшенә ылыҡтырыуы ауыр, улар башҡа ойошмаларҙа ла үҙҙәрен таба ала.

Элекке һәм хәҙерге быуынды сағыштырып, күп кенә осраҡта, элек йәштәр тырышыраҡ, энтузиастар, илһөйәрерәк булған, тип әйтеүселәр бар. Ысынында, бөгөн дә беҙ шундай уҡ илһөйәр, аҡыллы, әүҙем йәштәр барлығын beләбеҙ. Бары тик был сифаттар һәр быуын кешеһендә төрлөсә сағыла. Быйыл бөтә Рәсәй буйлап йәштәрҙең йәшәйеш ҡиммәттәрен асыҡлау буйынса тикшереүҙәр үткәрелде. Уның һөҙөмтәһе буйынса, йәштәр беренсе урынға ғаиләне ҡуя - уны улар ныҡлы терәк итеп күрә, унан һуң инде тормошта уңышлы кеше булыуҙы мөһим тип һанай. Демократия институты үҫешә алған, власть һәм бик күп йәмғиәт процестарына асыҡлыҡ индерелгән мәлдә йәшәйбеҙ һәм айырым ижтимағи-сәйәси ситуацияларҙа һәр кем үҙ ҡарашын асыҡ әйтә, үҙе һәм эштәре тураһында публикаға белдерә ала. Хәҙер форматтар башҡаса, йәш быуындың патриотлығы ветерандарға ярҙам итеүҙәрендә, йә башҡа изге эштәрҙә генә түгел, сәләмәт тормош алып барыуға ынтылышында ла сағыла. Бөгөнгө йәштәр араһында эсергә яратыусылар һаны кәмегәнен күҙәтергә була. Был ғына ла түгел, тормошҡа ҡараштары дөрөҫ, китап уҡыйҙар, шәхес булырға ынтылалар, рухи яҡтан да, физик яҡтан да камиллыҡҡа ынтылалар һәм иң ҡыуаныслыһы, башҡаларҙы үҙ араһына яҡшы, файҙалы эштәре, уңыштары менән ылыҡтырырға тырышалар.

**Былтыр Сочи ҡалаһында үткән XIX Бөтә донъя йәштәр һәм студенттар фестиваленДә һеҙ ҙә ҡатнашҡайнығыҙ. Йәштәр өсөн ошондай саралар нимәһе менән әһәмиәтле?**

- Сочи ҡалаһында уҙғарылған был фестивалгә Башҡортостан Республикаһынан иң ҙур делегацияларҙың береһе барҙы. Рәсәйгә донъяның төрлө илдәренән 30 меңгә яҡын йәш кеше йыйылды, улар өсөн был сара танышыу, аралашыу һәм фекерҙәштәр табыу өсөн бигерәк тә әһәмиәтле булды. Унда йәштәр Рәсәй, Франция, Италия, Германия, Австралия һәм башҡа илдәрҙән килгән билдәле шәхестәрҙең һөйләгәнен ишетеү өсөн, тамаҡ та ялғамай, өсәр сәғәт сиратта торҙо. Сығыш яһаусылар араһында сәйәсмәндәр, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ғалимдар, яҙыусылар, актерҙар һәм башҡа төрлө өлкә белгестәре бар ине. Бихисап майҙансыҡтарҙа Рәсәй өлкәләренең күргәҙмәләре ойошторолдо. Башҡортостан Республикаһының күргәҙмәһе бик уңайлы урында урынлашҡайны, килеп ингәс тә күҙгә ташлана, милли кейемдәрҙәге һылыу башҡорт ҡыҙҙары баллы бауырһаҡ тәҡдим итеп тора, теләһәң, балдан яһалған "фонтан"дан ауыҙ ит. Күргәҙмәләрҙә Рәсәйҙең күп милләтле ил булыуын ғына түгел, заманса техника һәм технологиялар өлкәһендә лә артта ҡалмауын сағылдырған майҙансыҡтар эшләне. Сколково һәм Иннополис йәштәре робот техникаһын килтергәйне. Улар эшләгән робот һорауҙарға ғына яуап биреп ҡалмай, кешегә ҡарап хатта маҡтау һүҙҙәре лә әйтә ала ине. Көн дә төрлө илдәрҙең делегацияһы ҡыҙыҡлы интерактивтар ойошторҙо, улар менән милли көйҙәр тыңлап, бейеп, аралашып алырға мөмкинлек булды. Һәр кем үҙ илен күрһәтһә лә, фестивалдең төп маҡсаты йәштәргә бер-беребеҙ менән тығыҙ бәйләнештә булырға, хеҙмәттәшлек итергә, белемдәребеҙ менән бүлешергә, уртаҡ идеяларҙы тормошҡа ашырырға, мәҙәниле, илдәр араһында низағтар килеп сыҡмаһын өсөн берҙәм булырға өйрәтеү ине. Йәштәр дуҫ булырға тейеш, сөнки киләсәк улар ҡулында. Шуға ла йәштәрҙе ойоштороу, илһөйәр итеп тәрбиәләү, эшмәкәр итеп үҫтереү мөһим. Бөтә донъя йәштәре һәм студенттары фестивале тап шул йәһәттән бик кәрәкле сара булды, шунда башҡорт йәштәре лә ҡатнаша алыуы айырыуса әһәмиәтле.

**Бөгөнгө заманда йәш кеше өсөн иң мөһиме нимә?**

- Ниндәй генә заман булмаһын, кеше өсөн ҡайһы бер төшөнсәләр һәр ваҡыт мөһим булып ҡалырға тейеш. Минең өсөн был төшөнсәләр - намыҫ, ғәҙеллек, әҙәплелек. Хатта йыш ҡына миңә "Һин СССР заманында тыуғанһың, бөгөн кешелек ҡиммәттәре бөтөнләй үҙгәргән", тиһәләр ҙә, кеше үҙенең ныҡлы фекеренә таянып, теге йәки был ситуацияла дөрөҫ юл һайларға тейеш. Берәй эште дөрөҫ эшләһәм, шунда уҡ булмаһа ла, һәр ваҡыт һөҙөмтәгә өлгәшәм. Дөрөҫ һайлауҙың нигеҙендә дөрөҫ маҡсаттар, донъяға дөрөҫ ҡараш ята һәм башҡалар ҙа шуны күрә. Бөтә нәмә лә кире үҙеңә әйләнеп ҡайта: яҡшылыҡ өсөн дә, яманлыҡ өсөн дә үҙеңә яуап бирергә тура киләсәк. Шуға, ошо минутта һинең һайлауың бер кем тарафынан да яҡлау тапмаған хәлдә лә, дөрөҫ принциптарға таянып, тоғро юлдан барырға кәрәк. Дөрөҫ юлдан барыуҙы аңлау кешегә тормошта йәшәү көсө, рухи ныҡлыҡ бирә.

**Ә һеҙ берәй ваҡыт дөрөҫ эшләмәгән өсөн оялыу тойғоһо кисергәнегеҙ булдымы?**

- Бик һирәк кенә була ундай осраҡтар, сөнки үҙемде һәр ваҡыт дөрөҫ, әхлаҡлы һәм ғәҙел тотам. Әммә ошо һуңғы йыл эсендә ике тапҡыр үҙем өсөн ояндым. Борай районында үткәрелгән башҡорт телендәге КВН-ға барғанда бик ныҡ оят булды, сөнки унда миңә саҡырылған ҡунаҡ булараҡ һүҙ биргәйнеләр, башҡортса сәләмләй генә алдым. Икенсе тапҡыр Өфөлә Конгресс-холда үткән шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсында туған телемде белмәүемә үкендем. Телем башҡортса асылһа ла, артабан русса ғына һөйләшеп, русса уҡып, рус мөхитендә тәрбиәләнеп үҫкәс, башҡортса йүнләп һөйләшә белмәйем. Мәктәптә лә башҡорт теле буйынса бер ниндәй ҙә өҫтәмә түңәрәктәр булманы. Ниһайәт, быйыл "Башҡорт телен өйрәнәм" проектында ҡатнаштым һәм яйлап ҡына туған телемде өйрәнә башланым. Сөнки туған телеңде белмәүе оят, күп йәштәрҙең ошоно аңлауы ҡыуандыра.

**Йәштәштәргә әйтер теләктәрегеҙ?**

- Ярҙам итерлек кешең бармы-юҡмы - мөһим түгел. Һәр кемгә мөмкинлектәр асыҡ, теләгән кеше үҫешә, юғары маҡсаттарына өлгәшә ала. Бер кеше яугир түгел, тип уйламағыҙ: һин яңғыҙың артыңдан фекерҙәштәреңде эйәртә һәм туплай алаһың. Шуға ла һәр ваҡыт үҙ көсөңә ышанырға, өлгәшкәндәрҙә туҡталып ҡалмай, артабан атларға, йәштәр өсөн лидер булырға кәрәк. Эшең яҡшылыҡҡа йүнәлтелгән булһа, ярҙамы ла, хеҙмәттәшлек итергә теләүселәре лә табыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Киләсәгеңде уйлаһаң - орлоҡ сәс, тигәндәр. Люциә Юлыева менән әңгәмәләшкәндән һуң, уның кеүек аҡыллы, маҡсатлы, үҙ эшен намыҫ менән башҡарған йәштәребеҙ булыуы халҡыбыҙҙың киләсәген тәьмин итә лә инде, тигән уй ҡалды. Сөнки тап ошондай шәхестәр ҡасан, ҡайҙа, ниндәй орлоҡ сәсеү һәм йәш үҫентеләрҙе нисек тәрбиәләп үҫтереү тураһында яҡшы белә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

***✓ Ир-егетте мин йәлләйем. Ил өсөн ҡанын ҡойған фронтовиктар, илде күтәрәм тип төҙөлөштәрҙә, ил һағында көсөргәнеүселәр хаҡындағы киноларҙы, документаль кадрҙары күргәндә - илайым.***






### "Мөхәббәткә генә ышанам "

*Аҡ сирендәр ергә сәскә ҡоя,*
*Йондоҙ буранына оҡшаған.*
*Күп нәмәлә мин дә икеләнәм.*
*Мөхәббәткә генә ышанам,*
*Мөхәббәткә генә ышанам...*

Минең " Мөхәббәткә генә ышанам" исемле шиғырҙар йыйынтығым бар. Ул 2006 йылда донъя күрҙе. Уны Яҙыусылар союзы идарАлығы Республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына тәҡдим итеп ҡарағайны. Комиссия ағзалары китапты лайыҡлы тип тапманы. Хәйер, китаптан былай минең үҙемдә яратманы буғай ул юғары мәҙәниәтле комиссия ағзалары. Улар шулай ҙа республикабыҙҙың данлыҡлы шәхестәре. Уларҙың зауҡына ҡарата икеләнеү белдереп, ижадымды яратыусыларҙың кәйефен төшөргөм, күңелдәрен ҡайтарғым килмәй. Шуны ғына әйтә алам: минең үҙем өсөн ул ағзалар араһында авторитет юҡ. Берәһебер минән артыҡ эш ҡыйратҡаны юҡ әле.

Хәйер, һүҙем мөхәббәт хаҡында ине бит... Шиғыр китабымдың исемен "Мөхәббәткә генә ышанам" тип атаған, ысынлап та мөхәббәт ҡоломо мин? Шул тойғонан башҡа инаныстарым юҡмы ни? Дөрөҫөн әйткәндә...

О, ул тойғо... Ул тойғонан мәхрүм булған, һине , бүтәндәр нисек ҡабул итеүгә ҡарамаҫтан, идеал, иң матур, иң аҡыллы, иң батыр йәнә әллә ниндәй метафоралар менән нарыҡлаусы, быға са барлығын да белмәгән бер йәндең һиңә һоҡланыулы, хатта ки, табыныулы кисерештәренән баш әйләнеү хәсиәтен кисермәгән кеше бармы икән? Ғашиҡлыҡтың төп принцибы, уны нисек кенә мөхәббәт хаҡына үҙ-үҙеңде ҡорбан итеү тип аңлатмаһындар, шулай ҙа ғашиҡтарҙың бер-береһен "һин, тик һин, һин берәү һәм ҡабатланмаҫ" тиешеп инандырыуҙары ул. Ә кемдең берҙән-бер булғыһы килмәһен. Мөхәббәт ғәләмәтенә тарыр алдынан яҡты донъяға килгән кеше ярайһы ҡаршылыҡтырға, шәхсиәтен ҡабул итмәүгә, конфликттарға осрап өлгөргән була. Имештер, ата-әсәһе уны аңламай, дуҫтары, класташтары... Ә ул !.. Бөтә шул икеләнеүҙәрҙе, әйләнә-тирәләге "ғәҙелһеҙлек", "баһалап бөтмәүсәнлектәрҙе" инҡар итеп, "һин, һин..." тип иҫбатлай һәм , һинең эсенә йомолған, тышҡа сығарырға ҡыймаған амбицияларына ҡанат ҡуя. Һинең хаҡта шундай фекерҙә булған кешенән дә яҡшыраҡ әҙәмдең булыуы мөмкинме? Юҡ әлбиттә. Һәм һин үҙең дә уны идеаллаштыра башлайһың.

О, ул мөхәббәт тигәнең...Һин яртыаҡыл, ярым иҫәр хәлдә, күҙеңә аҡ-ҡара күренмәҫлек томанға сорналғанһың. Психикаһы ныҡлап ултырып бөтмәгән ҡайһы бер ғашиҡтар, был тәүге кисерештәр һуңғы һәм ҡабатланмаҫ тойғолор, тип уйлауҙан, мөхәббәт яуапһыҙ булып сыҡһа, үҙ-үҙенә ҡул һалыуға тиклем барып етә. Их, яңылышалар! Ярамай! Түҙергә, кисерергә, айышына төшөнөр өсөн ваҡыт кәрәк. Ваҡыт хәсрәтте лә, шатлыкты ла, айышһыҙлыкты ла урынына ҡуйыусы төп һәм алыштырғыһыҙ дауа ул. Ваҡыт аңды уята. Тимәк, мөхәббәттә йөрәк менән аҡылдың берҙәм булыуы зарур.

Кешенең төп инстинкты - бала тыуҙырыу. Ғашиҡтарҙың никахы шулай ҙа, ғашиҡтар, тойғолар солғанышында нисек кенә бәхетле булмаһын, уларҙың тәкәтһеҙ яратышыуының ихтыярынан былай, Раббы тарафынан ырыуҙың ғүмерен дауам итеү хаҡына эшләнә. Эйе, ғашиҡтар үҙҙәренең бер-береһен табышыу бәхетенә ихлас күңелдән ышана һәм ләззәт кисерә , әммә кешенең төпкә аны шулай ҙа ғашиҡтарға тик уларҙың союзынан ғына тыуасаҡ балалар хаҡындағы маҡсатты ҡуя. Нәк ана шул инстинкт кешене мөхәббәт тигән серле лә, ғазаплы ла, илаһи ҙа тойғолар эсенә әйҙәй. Шул инстинкт һәм мөғжизәле мөхәббәт кисерештәре йәшәүҙе мәңгеләштерәсәк киләсәк быуынға ғүмер бирә. Юҡ, әлбиттә, тәүге осорҙағы ҡайнар хистәр улай уҡ мәңгелек түгел, йылдар ул хистәрҙе һүрелдерә биреп тә ҡуя, әммә теге аңлайышһыҙ бер-береңә тартылыуға килтергән тәкәт ғәләмәтен икенсе тойғолар, икәүләшеп "ижад" иткән балаларға булған яратыу, наҙ, ҡурсаларға, тәрбиә бирергә тырышыу хистәре алыштыра, шул рәүешле, ир менән ҡатын бер-береһенән айырылғыһыҙ бер бөтөнгә, ғаилә тип аталған берҙәмлеккә тарый. Хистәр һыуынғас, айырылышыусы ғаиләләр ҙә бар. Быныһы XX-XX1 быуаттың әлеге лә баяғы рухиәтҡа ынтылыуҙан баш тартып, ләззәткә, матдилыҡҡа күсә барыуы кеүек мәғәнәһеҙ ғәҙәттәренең сәскә атыуы, үрсей барыуына бәйле, күрәһең. Бындай айырылышыуҙарҙың төп фажиғәһе - балаларҙың етемлеге.

Ғүмер буйы бер-береһен идеаллаштырған бәхетле никахтар күп булмай. Мөхәббәттән бәхетле булыусылар ҙа һирәк. Киреһенсә, дауылға оҡшаш хистәр өйөрмәһенә инеп башын юғалтҡан, яртыаҡыл хәлөнә ҡалып бөткән саҡтарынан ҡотола алғаны өсөн ҡыуанып бөтә алмаған кешеләрҙе осратҡаным бар.

Әммә үҙ ғүмеренде киләсәк быуындарҙа дауам итергә ынтылыу теләге үлемһеҙ. Күргәнебеҙ бар бит, ғашиҡтар бер-береһенең күҙенә шундай мөкиббәнлек менән текләүсән. Юҡтан түгел бындай табыныуға оҡшаш бирелгәнлек, улар бер-береһенең күҙенән үлемһеҙлек эҙләй. Нәк ошондай үлемһеҙлек, күрәһең, беҙҙең ерҙәге ғүмеребеҙҙең асылын һәм мәғәнәһен тәшкил итәләр ҙә. Мөхәббәт, тимәк, эске аңдың йәшәүгә булған ихтыяры. Шул ихтыяр көсө ир менән ҡатынды ҡауыштыра, балалар тыуҙырыу кеүек изге ғәмәлгә әйҙәй, балалар, билдәле инде, беҙҙең ҡаныбыҙҙы мираҫҡа ала, ҡан аша милли, генетик, тарихи хәтер ҙә йәшәүен дауам итә. Үлемһеҙлек идеяһы солғанышындағы кешеләрҙе таныу мөмкин түгел, улар үҙҙәре үк быны йәшерә алмай. Улар, йәшәүҙе мәңгеләштереүҙең серенә төшөнгән ике заговорсы кеүек, шул серҙе, йәшәүҙең төп мәғәнәһен тормошҡа ашырыу маҡсатына табан ашыға һәм ошо үтә лә тәрән миссияны мөхәббәт тип атай. Минә ҡалһа, иҫ киткес шәп "кармаҡ" был. Иҫ киткес шәп! Хатта ки, Аллаһтың иң гениаль табышы һәм... хәйләһелер ҙә әле...

Кешене байтаҡ гонаһтарҙан, яман аҙымдарҙан ҡурсалауҙағы төп таяныстарҙың береһе булған мөхәббәт кисерештәренән бәндәләрҙең баш тарта алғаны юҡ әле. Өҫтәнлектәр, формациялар, йәшәү шарттары үҙгәрә, ер өҫтө лә, халайыҡтар ҙа афәткә, ғазаптарға, юғалтыуҙарға тарый, әммә йәшәүгә ихтыяр һәм уны мәңгеләштереү идеяһы юғалмай. Әйтергә кәрәк, иҫ киткес тәрән һәм даими, шул уҡ ваҡытта үтә юғары динамикаға көйләнгән идея был. Беҙ уға күндәмлек, бирелгәнлек, инанғанлыҡ һәм үҙ теләгебеҙ менән буйһонабыҙ.

Ә минең шиғырҙарымдағы мөхәббәт темаһының өҫтөнлөгө лә, тик мөхәббәт эҙләп кенә йәшәгәнем өсөн түгел, асылда, Аллаһтың ана шул Мәңгелекте һуғарыуҙағы камил һәм ҡабатланмаҫ көҙрәтенә һоҡланыуҙан, был көҙрәттең тәрәнлеге һәм юғарылығына мөкиббән ғашиҡлыҡтан ул.

Кеше... Эйе, беҙ һәммәбеҙ ҙә әйләнә-тирәләге шарттар, милли мөхит, әкиәттәр һәм китаптар менән тәрбиәләнәбеҙ. Бындай тәрбиә, аңға һәм күңелгә һеңгән мәғлүмәт беҙҙе кеше итеп үҫтерә, холҡобоҙҙо, ышаныстарыбыҙҙы формалаштыра. Әкиәттәребеҙ, риүәйәт-легендалар, мифология асылда ҡурҡыу белмәҫ батырҙар, ҡыйыу йөрәкле геройҙар хаҡында, китаптарҙан да беҙ ана шундай айырым һәләтле шәхестәр хаҡында уҡыйбыҙ һәм ҡыҙҙар күңелендә кино геройҙарына, китаптыларға оҡшаған йәр осратыу хаҡында хыял ярала. Әммә тормош бүтәнсәрәк ул. Геройҙар күп булмай. Рыцарҙар ҙа һирәк осрай. Шуға күрә, минеңсә, ҡыҙ баланы тормошҡа айыҡ күҙ менән ҡарарға өйрәтеү зарур. Күк атҡа атланған йәйиһә ал елкәндәр таҡҡан карапҡа ултырған рыцарҙы көтөргә ярамай. Кешеләр ябай ул. Ир-ат та әллә ни ҙур ҡөҙрәткә эйә түгел. Ул ҡатын-ҡыҙҙан ни бары физик яҡтан көслөрәк булыуы менән генә айырыла. Психологик һәм мораль яҡтан беҙ бербер ебеҙҙән ҡалыш түгел. Ана шундай ысынбарлыҡты баһаларға, танырға өйрәнһәк, тормоштағы конфликттар, аңлашылмаусанлыҡ һәм дәғүәләр, ҡыйралған яҙмыш һәм ғаиләләр ҙә әҙерәк булыр ине.

Ҡыҙҙарға рыцарь эҙләмәҫкә кәрәклекте юҡҡа ғына әймәйем. Ғаилә ҡорғанда, ир-атҡа өҫтөнлөк биргән шарттар солғанышында йәшәргә мәжбүр буласаҡһың. Бүтән юл әлегә юҡ.

Ә асылда, ир-егеткә донъя көтөү беҙ, ҡатын-ҡыҙҙан да ауырыраҡ. Беҙ улдарыбыҙҙы, аталары хыялыбыҙҙан алыҫ булыу сәбәпле, идеалдарыбыҙҙы тормошҡа ашырырлыҡ итеп тәрбиәләргә тырышабыҙ. "Һин малай ҙа инде, ебемә!" Ә ул малай беҙҙең ҡаныбыҙ һәм йәнебеҙҙән яралған. Ул беҙҙең ҡыҙыбыҙҙан тик физик көсө менән генә айырыла, рухи көстө Аллаһ һәммәбеҙ өсөн дә ғәҙел бүлә. Ә бит физик көс, бер уйлаһаң, ул тормошобоҙҙа ни тиклем кәрәкле һәм ҡөҙрәтле булмаһын, рухи көстән юғарыраҡ түгел. Шулай ҙа бөгөнгө цивилизацияның яҙмышы бит ир-ат таһыллығы һәм аҡылына, уның көсөнә бәйле. Үтә яуаплы миссия был.

Ир-егетте мин йәлләйем. Бигерәк тә мегаполистарҙың ҡатмарлы конструкцияларын күтәргән, цивилизацияның айырылғыһыҙ өлөшө булған коммуникациялар һәм инфраструктураны тәьмин иткән ҡара һәм ауыр эштәрҙе башҡарыусы ир-егеттәр эшмәкәрлеген күргәндә, эсем өҙөлә. Миңә кеше, уның тәбиғәте, мөхәббәте, мәңгелек алдындағы бурысы хаҡында фәлсәфә ҡорорлоҡ шарттарҙы кем тыуҙыра һуң? Крандан эҫе, һыуыҡ һыу аға, газ плитәһе яна, ғәфү итегеҙ, ашҡаҙаным эшкәрткән ҡалдыҡтарҙың мәшәҡәтһеҙ ағып китеүен кем тәьмин итә һуң? Мин философ-шағирмы? Йәиһә бесән әҙерләп үрсетелгән мал итенән, ир көсө менән ер ҡаҙып үҫтерелгән йәшелсәнән оҫта итеп ризыҡ рәтләгән ҡатынмы?

Ир-егетте мин йәлләйем. Ил өсөн ҡанын ҡойған фронтовиктар, илде күтәрәм тип төҙөлөштәрҙә, ил һағында көсөргәнеүселәр хаҡындағы киноларҙы, документаль кадрҙары күргәндә - илайым. Ир-атҡа ҡояш аҫтындағы урын, карьера өсөн дә көрәшергә, тәбиғәттән һалынған амбицияларын тормошҡа ашырыу өсөн абруй яулап айҡашырға ла тура килә. Ир-аттарҙың күбеһе булдыҡһыҙ тигән мөһөрҙән ҡурҡа. Дөрөҫ, көсәнеп йәшәй-йәшәй кендеген дә ҡаната ул.

Ә унан да бигерәк ҡатын-ҡыҙҙы йәлләйем. Идеалдары тормошҡа ашмаҫ шарттарҙа йәшәргә мәжбүр, әммә Мөхәббәт тигән усаҡтар һүрелгәндән һуң да, балаларын тәрбиәләүгә, иренә хеҙмәт итеүгә дусар, шуны бәхет тип танырға мәжбүр ҡатын-ҡыҙҙы әйтәм.

Эйе, ҡырағай тарпанды ҡулына эйәләштергәне бирле үҙенең көслө зат булыу хоҡуғын яулаған, ғаиләнең туҡлығы өсөн яуаплылыҡты үҙ теләге менән өҫтөнә алған ир-егеткә бөгөн үҙе өсөн үҙе килтереп сығарған ҡанундар эсендә йәшәү, үҙенең булдыҡлылығын иҫбатлау еңел түгелдер. Улар, үкенескә ҡаршы, Аллаһ тарафынан ҡуйылған әхлаҡи талаптар көсөргәнешен тартып бөтә алмауҙары сәбәпле, бөгөн мораль ҡыйралышҡа ла тарып ҡуя.

Ә ҡатын-ҡыҙ... Ҡатын-ҡыҙҙы мин ихлас күңелемдән хөрмәт итәм, сөнки уларҙың хәсиәте миңә аңлайышлы...Уға баш мейеһе эшмәкәрлеген егеп, Бар Ҡылыусыбыҙҙың төп маҡсатты - Мәңгелекте, Мөхәббәт, инанғанлыҡ, табыныу сигендәге бирелгәнлек, теләһә ниндәй шарттарҙа ла ана шул Бөйөк идеяны төпкө аң, йәнде һуғарыусы ҡан аша бойомға ашырыу мәжбүрилеге яҙған. Асылда, мәжбүрилекте ҡатын-ҡыҙ яратмай. Тормош юлына баҫыр алдынан Армия сафында хеҙмәт иткән, аҙаҡ тотош ғүмерендә субординатив буйһоноуҙы тәбиғи тип иҫәпләргә өйрәтелгән ир-аттан айырмалы, ҡатын-ҡыҙҙың тәбиғәте баҫҡыслы буйһоноусанлыҡты яратмаһа ла, баштараҡ "һин, һин" тигән йәренең торараҡ "мин,мин!" тигән талаптарына күнеүгә риза була. Риза булмаһа - ул алйот. Иренең ихтыярын яҙмышы тип һанамаған, үҙен уның идеалдары хаҡына ҡорбан итмәгән ҡатын йүләр һанала. Ә был ысынында ла шулай, сөнки бөгөнгө беҙ йәшәгән цивилизация ирҙәр ҡанундары, уларҙың психологияһы, аҡыл һәм физик көсөнә яраҡлаштырылған. Бөгөн ғаилә мөнәсәбәттәренең бүтән формаһы юҡ тиерлек. Ә был, дөрөҫөн әйткәндә, хаҡ түгел. Ни өсөнме? Беләһегеҙме...

Ирҙәр донъя тотҡаһы тип яратылмаған да баһа.

Ирҙәр... бала тапҡан, аш бешергән, именлек тип йәнен фиҙа ҡылған ҡатын-ҡыҙҙың һәр теләген, ымын еренә еткереп башҡарырға вазифаландырылған зат.

Ирҙәр донъяны ҡороуға, уның йәшәйеш ҡанундарын ижад итергә һәләтһеҙ. Сөнки улар тәбиғәте буйынса - тик башҡарыусы, русса әйткәндә - исполнитель.

***"Тағы ла борондан ҡалған Ҡөрьән Кәрим, теүәл фәндәр буйынса ғәрәпсә әсбаптар ҙа бар беҙҙә. Бик уҡымышлы кешеләр булған ата-бабаларыбыҙ, яңы табылған китаптар ҙа бик хикмәтлегә оҡшай, тикшертергә ниәтебеҙ бар", - ти ул.***

Ирҙәр тамаҡ туйҙырыу, именлек һағында тороуға бурысландырылған особь. Ирҙәргә донъя әҙәбиәте лә, диндәр ҙә үтәй алмаҫлыҡ бурыстар ҡуя: рыцарь бул, ҡатыныңдан өҫтөн бул, сөнки һин - табыусы. Ә табыусыға физик өҫтөнлөктәрен йышыраҡ үҙ мәнфәғәтендә файҙаланыу оят түгелме икән? Бала табыу, усаҡты тере тотоу, ризыҡландырыу, рухи тәрбиә биреү, мамонттымы, тарпандымы атып йығыуҙан еңелерәк түгел шикелле. Диндәрҙе, аңлашыла ки, ирҙәр формалаштырған һәм өҫтөнлөктәрҙе лә үҙ файҙаһына көйләгән булып сыға. Дөрөҫмө был юл? Йәмғиәт ни өсөн бәхетле кешеләрҙән тормай? Кешеләрҙең дин тотоуына, диндәрҙең барлыҡҡа килеү тарихына меңәр-меңәр йылдар ҙа баһа...

Ярай әле, ҡатын-ҡыҙҙы бөгөн бик үк көсһөҙ зат тип атап булмай. Был дөрөҫ йүнәлеш. Донъяны туҡтауһыҙ матди һәм рухи көрсөккә терәтеүсе ир-ат теләгенә ярашлы донъяла беҙ нисә мең йыл йәшәнек? Кем бәхетле булды? Әсәйебеҙме? Өләсәйебеҙме? Күпме ҡорбан килтерергә мөмкин йәшәүҙе ойошторорға һәләтһеҙ ирҙәр хаҡына? Белем, таһыллыҡ, рухи яҡтан ҡатын-ҡыҙҙар ҙа ярайһы ҙур үҙгәрештәр кисерә. Улар ҙа хәҙер мал табыуға, идара итеү һәләтенә эйә була бара. Нисек булыр, был ниндәйҙер өҫтөнлөктәр үҙгәрешенә килтерерме? Үҙгәрештәр конфликттар аша яуланырмы, әллә яҡтарҙы компромислы килешеүҙәргә килтерерме? Уныһы - киләсәк ҡулында. Әммә кешелек, минең тоҫмаллауымса, ғаилә институты, мөхәббәт емеше булған балаларҙы донъяға табыу кеүек изге миссияны үтәүҙән баш тартыуға уҡ барып етмәйәсәк. Һәр хәлдә, Юғары Аң бындай яман уйҙан аралау ысулы һәм юлдарын табышасаҡ.

Кеше... Йыһан эсендәге иң хәсрәткә, һағышҡа, һыҙланыуҙарға, юғалтыуҙарға, бәхет, шатлыҡҡа дусар, Мөхәббәт тигән серле мөғжизәне татыу бәхетенә эйә, ижади асыштар яһарға, ҡыйралыштарҙы кисереүгә һәләтле, ғилми телдә homo сапиенс тип аталған Кеше, ғөмүмән, Кешелек, мин һеҙгә рәхмәтлемен. Тотош серҙәрҙе, һеҙ уйлап тапҡан тәғлимәттәрҙе үҙләштерерлек һәләтем булмаһа ла, һеҙҙең табыштар менән туҡланырға , бер аҙ булһа ла үҙемсә һығымталарға килә алырлыҡ мәғлүмәт тупларға өйрәткәнегеҙ, мөмкинлектәр асҡанығыҙ өсөн рәхмәтлемен!

Беҙ эволюцияға бирелеүсән йән эйәләре. Эволюция, күрәһең, үҙе лә сикһеҙ түгел. Байтаҡ фәнни табыштар, тормошобоҙҙо еңеләйтеүсе ғилми һәм техник асыштар менән файҙаланып ғүмер итәбеҙ беҙ бөгөн. Ә артабан?.. Минеңсә, беҙ әлегә бер аҙ депрессияға бирелеберәк, киләсәкте тоҫмаллау юлдарын эҙләгән осорҙа йәшәйбеҙ. Әммә кешелектең потенциалы тамамланмаған. Ҡайҙа табан йүнәлеш алырбыҙ? Ниндәй илаһи идеялар мауыҡтырыр, идеалдар маяғыбыҙ булыр? Билдәһеҙ.

Билдәле булһа, күңелһеҙ булыр, ижади ойоштороуға талап булмаһа, йәшәү үҙе лә мәғәнәһеҙлеккә дусар булыр ине. Ә бит йәшәүҙең төп мәғәнәһе - ҡыҙыҡһыныулы ижади ғүмер, танып-белеүгә ынтылыш ул. Һәм кешеләр, үҙ-ара ҡатмарлы, хатта ки, аңлап бөтөүе бик үк еңел булмаған мөнәсәттәр арһындағы иң ҙур һәм илаһи тойғо Мөхәббәттең йәшәүебеҙҙең иң төп таянысы булыуына һоҡланырға ғына ҡала.

**(Дауамы. Башы 17-18-се һандарҙа).**

ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ

# БЕР ОСРАШЫУ - ҮҘЕ БЕР ҒҮМЕР

**Милләттең рухиәт һағында торған вайымлы ағинәйҙәребеҙ халыҡ күңеленә ятмалы, үҙенсәлекле саралар үткәреп кенә тора. Был юлы ундай күркәм йыйынды Учалы районы Сораман ауылы ағинәйҙәре ойошторҙо һәм унда райондың башҡа ауылдарынан, шулай уҡ Әбйәлил районынан, Межгорье ҡалаһынан да ағинәйҙәр ҡатнашты. Тын, һәүетемсә генә донъя көтөп ятҡан кешене һиҫкәндереп, дәртләндереп, күңеленә ғәм өҫтәп ебәрер сара булып сыҡты сорамандар йыйыны.**

Башҡорт халҡының "Яратып эшләнгән эш арытмай, ихлас әйтелгән һүҙ ялҡытмай", тигән мәҡәле бөгөн бигерәк актуаль яңғыраған кеүек. Арымай-талмай милләт һағында торған ағинәйҙәрҙең һәр эште яратып башҡарыуына, күңел талабы итеп һанап, көс-дәртен ауылдаштары менән уртаҡлашып йәшәүенә күп тапҡырҙар инанырға тура килде. Был юлы ла Сораман ауылы ағинәйҙәре сараға бөтә күңел йылыһын һалып әҙерләнгәйне. Ҡунаҡтар Сораман ауылының башланғыс мәктәбе ҡапҡаһын асып уҙғас та, уҡ-һаҙаҡлы малайҙарҙың сәпкә атып уйын ҡороуына шаһит булдыҡ. Малайҙар уҡ-һаҙаҡты үҙҙәре эшләп алған һәм "Мәргән уҡсы" хәрәкәтенә ҡушылып, таһыллыҡ күрһәтмәкселәр. Әлегә уҡытыусылары өйрәткән ысын башҡорт егете нимә эшләй белергә тейешлеге тураһындағы төп ҡағиҙәләрҙе ҡабатлай-ҡабатлай, мәктәп ихатаһында мәргәнлектә көс һынашалар. Сослоҡта малайҙарҙан Сораман ауылының ҡыҙҙары ла ҡалышмай булып сыҡты, ҡунаҡтар уларҙың бура һуғыу уйынының иң ҡыҙыу мәленә тура килде.

Алыҫ араларҙы яҡынайтып килеүсе ҡунаҡтарҙы хөрмәтләп, сәләмләү йырына кәсәләрҙә күпереп торған буҙа ҡойоп ҡаршы алғас, йыйындың хужабикәләре мәктәптең спорт залында байрам тантанаһын башлап ебәрҙе. Сораман ауылының "Ағинәй" ойошмаһы етәксеһе Зөбәйҙә Ҡәләмова дилбегәне тәүҙә ир-егеттәргә тотторҙо: ауыл мәсетенең имамы Фәнүр хәҙрәт үҙ фатихаһын биргәндән һуң, матур кисә башланып китте. Зөбәйҙә Ҡәләмова тәүҙә йыйынға килгән Мәҫкәү, Көсөк, Ғәлиәхмәр, Межгорье, Уральск, Иманғол, Озерный, Ҡунаҡбай, Миндәк, Һарт, Иҫтанғол, Мансур, Бәләкәй Ҡаҙаҡкол ауылдары ағинәйҙәре менән айырым таныштырып сыҡты. Унан һуң һәр кемгә ҡыҙыҡлы булған Сораман ауылы тарихы, унда йәшәгән халыҡ, уларҙың көнкүреше һәм эштәре тураһында тулы йөкмәткеле мәғлүмәттәр еткерҙе. Ситтән килгән ҡунаҡтар өсөн дә, бында тыңлап ултырған ауылдаштар, бер яҡта теҙелешеп, оло илтифат менән тыңлап торған балалар өсөн дә Сораман ауылының күренекле шәхестәре, тәбиғәт ҡомартҡылары, иҫтәлектәре тураһында тыңлауы ҡыҙыҡ булды. Баҡтиһәң, ҡасандыр Троицк ҡалаһында Зәйнулла Рәсүлевтың шәкерте булған Шәрәфетдин Мотаһаров Сораман ауылынан булған, әлеге көндә Зәйнулла ишандың шәкертенә иҫтәлеккә биргән еҙ тасы, таяғы ауыл музейында һәм мәсетендә һаҡлана икән. Ә быйыл Шәрәфетдин мәзиндең йортон боҙған саҡта уның варисҭары боронғо китаптар һәм мәзингә бирелгән танытманы табып алған. Өйҙөң башында тупраҡ араһынан килеп сыҡҡан был ҡиммәтле ҡомартҡыларҙы Фәйзулла Шәрәфетдиновтың ҡатыны Суфия Ҡәләмова һаҡлай. "Тағы ла борондан ҡалған Ҡөрьән Кәрим, теүәл фәндәр буйынса ғәрәпсә әсбаптар ҙа бар беҙҙә. Бик уҡымышлы кешеләр булған ата-бабаларыбыҙ, яңы табылған китаптар ҙа ябайҙан түгел, бик хикмәтлегә оҡшай, тикшертергә ниәтебеҙ бар", - ти ул.

Ауыл кешеһенә балаларын уҡытыу өсөн мәктәп, мәҙәни саралар үткәреү өсөн клуб һәм күңел тыныслығы табыу өсөн мәсет булыуы шарт. Былар барыһы ла Сораман ауылында бар, мәсетте ауылдаштары Юлай Моратов төҙөшкән. Халыҡ үҙе лә буш ятмай, йәштәр эшләп мал таба, ололар киләсәк быуындың тәрбиәһен, рухиәтен ҡайғыртып йәшәй. Ағинәйҙәр сәләмәт тормош алып барыу, иманлы булыу, тыуған төйәгеңә һөйөү, тарихыңды белеү, йолаларҙы тотоп йәшәү тураһында ҡоро һүҙ һөйләп кенә түгел, эштәре менән дә өлгө күрһәтеп йәшәй. Зөбәйҙә Ҡәләмова, Сәғиҙә Ҡотоева, Шәүрә Шәкирйәнова, Суфия Ҡәләмова, Рәмилә Ямалова "Киске Өфө" гәзитендә баҫылып сыҡҡан Тибет гимнастикаһы буйынса көн дә күнегеүҙәр эшләп, сәләмәтлектәре һиҙелеп яҡшырыуы тураһында һөйләне. Улар Тибет күнегеүҙәрен эшләгәндә Аллаһы Тәғәләнең исемдәрен дә әйтеүҙе ғәҙәт итеп алған һәм ошо ла ныҡ ярҙам итәлер, тигән фекерҙәләр.

Сораман ауылының ағинәйҙәре тәжрибә уртаҡлашҡанда бер бик хуп күренешкә һоҡланып ултырҙыҡ: улар һәр эшкә балаларҙы, мәктәп уҡыусыларын йәлеп итә икән. Был юлы унлаған ҡыҙ ҡурсаҡтарын күтәреп, алғыш әйтергә сыҡты: "Олоно "оло" тип әйт, кесене "кесе" тип әйт, атайҙы "атай" тип әйт, инәйҙе "инәй" тип әйт, ағайҙы "ағай" тип әйт, апайҙы "апай" тип әйт, ҡәйнәне "ҡәйнә" тип әйт, ҡайныны "ҡайны" тип әйт, - тип һамаҡлап алғас, - "Бәпес-бәпес-бәпестүк, бәләкәй генә бәпестүк, һикереп тороп китәр ул, йүгерә-атлай уйнар ул, хәрәкәттә бәрәкәт, йүгерә-атлай уйнар ул. Ҡыҙым-ҡыҙым ҡыҙ кеше, ҡыҙыма килер йөҙ кеше, йөҙ кешенең араһынан алып китер бер кеше. Улым-улым ул кеше, атҡа менәр ир кеше, атҡа менәр ир кеше, илде һаҡлар ир кеше", - тип ҡурсаҡтарын уйнатҡан ҡыҙҙарға һоҡланып ҡарап ултырған һәр ағинәйҙең күңеленә бер генә уй килде: үҙҙәре һамаҡлаған һүҙҙәргә ҡолаҡ һалып, тиҫтерҙәренә лә өйрәтеп, тәрбиәле һәм тәүфиҡлы булып буй еткерһендәр берүк.

Ағинәйҙәр тәбиғәт телен белеү ауыл кешеһе өсөн бик мөһим тип иҫәпләй. Шуға күрә улар ошо төбәктә һаҡланған, ололар белгән бик күп йолаларҙы тергеҙеү, йәштәргә өйрәтеү юҫығында ла әүҙем эшләй. Улар йыйында "Йолоҡ туйы" тигән фольклор күренеше сәхнәләштерҙе: яҙ еткәс өйҙө, бында йәшәгән кешеләрҙе, кәртә-ҡураны, малды дауалы үләндәрҙең төтөнө менән ыҫлап, таҙарыныу була был. Боронғо йола менән танышып, әллә күпме файҙалы мәғлүмәттәр тыңлағандан һуң, ағинәйҙәргә, балаларға рәхмәт хаттары һәм иҫтәлекле бүләктәр тапшырылды.

Осрашыуҙың тантаналы өлөшө тамамланғас, ҡунаҡсыл Сораман ағинәйҙәре барыһын да байрам табынына саҡырып, махсус рәүештә салынған ҡорбан итенән бешерелгән тәмле аш, милли аш-һыу менән һыйланы. Мөнәжәттәр йырлап, "Салауат" әйткәндән һуң, йыйындың ҡунағы - Башҡортостан телевидениеһының "Йома" тапшырыуы алып барыусыһы Морат Лоҡманов һүҙ алды. Ул һөйләгән тәрән мәғәнәле вәғәздәр һәр кемдең күңеленә ятырлыҡ, уйландырырлыҡ һәм хикмәтле яңғыраны: "Әйтмәгән менән әйткән бер түгел, тип динебеҙҙә ҡаты итеп киҫәтелде. Әйтеп тороғоҙ, тәрбиәләгеҙ, рухландырығыҙ, тиелә унда. Һеҙҙең был тырышлығығыҙ, әлеге көндәге эш йүнәлешегеҙ юҡҡа сыҡмаясаҡ, ул шул ҡәҙәре кәрәкле бер эш булыр, - тип юғары баһаланы Морат Лоҡманов был сараны.

**(Дауамы 12-се биттә).**



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺЫУЫҠ СӘЙ...

## ябыҡтыра

■ Бешкән ризыҡты пластик контейнерҙарҙа һаҡларға һәм ошо уҡ һауытта йылытырға күнеккәнбеҙ. Йылы тәьҫирендә пластиктан күп хәүефле матдәләр бүленеп сыға, тип иҫкәртә Һиндостан ғалимдары. Был матдәләр диабет, ҡан баҫымы күтәрелеүенә килтереүе ихтимал. А бисфенолы һәм фталаттар - пластиктағы иң хәүефле химик берләшмәләр, улар тулһеҙлекте, гормональ тайпылыштарҙы, хатта яман шеш ауырыуын булдыра. Аҙыҡ-түлек һаҡланған пластикта башҡа канцерогендар ҙа бар. Улар микротулҡынлы мейестә йылынған ризыҡҡа еңел генә үтеп инә. Белгестәр тукланыу продукттарын быяла һауытта йылытырға кәңәш итә. Быға тиклем үткәрелгән һынауҙар йәшелсә, ит, диңгеҙ продукттары һаҡланған тимер банкаларҙа цинк оксиды өлөшсәләре тапҡайны. Цинк, ғәҙәттә, бактерияларға ҡаршы ҡулланыла. Был ризыҡтың һаҡлау ваҡытын оҙайтырға мөмкинлек бирә. Әммә кеше өсөн уның миҡдары етди хәүеф тыуҙыра.

■ Депрессияға бирешеп барған кешеләр ҡартая килә хәтер менән бәйле проблемаларға тап була. Статистика буйынса, оло кешеләрҙең яҡынса 25 процентында депрессия билдәләре бар, улар, үҙ сиратында, баш мейеһендәге үҙгәрештәр менән бәйле. Был үҙгәрештәр баш мейеһе ҡартайыуы процесын тиҙләтә. Майами университеты белгестәре билдәләүенсә, әгәр ҙә ваҡытында депрессияны дауалаһаң, мейе менән бәйле үҙгәрештәрҙе туҡтатып тороу мөмкин. Альцгеймер ауырыуы булған кешеләрҙә депрессия булыуы ла ғилми яҡтан раҫланған. Билдәләре буйынса ла, был ике сирҙең уртаҡлыҡтары күп. Депрессия мәлендә баш мейеһе күләме буйынса бәләкәйләнә икән, шулай уҡ ҡан тамырҙары үҙгәрештәре лә 55 процентҡа йышыраҡ осрай. Әгәр ҙә быңдай ҡан тамырҙары шартлаһа, инсульт була.

■ Сәй күп диеталарҙа ҡулланыла. Швейцария ғалимдары билдәләүенсә, һыуынған үлән сәйе калорияларҙы яҡшыраҡ яндыра икән. Фрибурга университеты хеҙмәткәрҙәре үткәргән һынауҙарҙа 23 кеше ҡатнашҡан. Улар һәр иҡенсе көндө 500 мл һалҡын сәй, ҡалған көндәрҙә ҡайнар сәй эскән. Белгестәр йөрәк ритмы, ҡан баҫымын тикшергән, күпмегә ябыҡҡандары ла иғтибар үҙәгендә булған. Һалҡын сәй эсеүе һөҙөмтәһендә организм энергияны күберәк ҡулланған. Ғалимдар был һынауҙы әле лә дауам итә.

■ Матдәләр алышыныуҙы тиҙләтеү - көүҙәне һомғол тотоуҙа ҙур роль уйнай. Кемгәләр был нәҫелдән бирелә. Ир-егеттәр, мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда калорияларҙы тиҙерәк яндыра. 40 йәште үткәс, күптәрҙең метаболизмы әкренәйә. Ғалимдар билдәләүенсә, беҙ хатта тик ултырғанда ла, организм калорияларҙы яндырыуын дауам итә. Кемдең мускулдар массаһы күберәк, уларҙа матдәләр алышыныу тиҙлеге лә ҙурыраҡ. Сама менән иҫәпләгәндә, 500 грамм мускул тукымаһы көнөнә 6 калория тотона. Шул уҡ ваҡытта, 500 грамм май көнөнә 2 калория ғына яндыра. Шуға ла мускулдарҙы үҫтерегеҙ. Калорияларҙы эшкәртеү өсөн организмға һыу кәрәк. Һыу етешмәй башлаһа, матдәләр алышыныуы шунда уҡ яйлай. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә 6-8 стакан һыу эсергә кәрәк.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

**Ни өсөн мәҡәләнең башына шундай исем ҡуйыу аптыратмаймы? Сөнки күп кенә төрки телдәрҙә ер өҫтөндә үҫкән йәшелләкте тап шулай "ут" тип атайҙар. Мәҫәлән, өҫтәлгә ҡуйылған һәр ризыҡҡа йәшел үләндәр ҡушып ашауға күнеккән әзербайжан, үзбәк, ҡарағалпаҡ, төрөк халҡы был һүҙҙе яҡшы аңлай. Бик боронғо һөйләштәрҙә һаҡлаусы халыҡтарҙың телендә лә "ут" тамырлы һүҙҙәр ҡулланыла. Мәҫәлән, "румпУТ" (индонезия теле), "тарУТару" (маоми), "УТшани" (кхоса, золо), "тикУТ" (судан), "УТзу" (чева), хатта немец телендәге Kraut (краУТ), урыҫ телендәге "ботва" һүҙҙәрендә лә ишетелә "ут" өнө. Был һүҙҙәр бар телдә лә "үлән, йәшеллек" һәм иң мөһиме, кеше һәм мал-тыуар өсөн ашарға яраҡлы йәшеллекте аңлата. Иғтибар иткәнегеҙ бармы, йорт хайуандары, бигерәк тә атҡа бәйле һүҙҙәрҙә "УТ" тамыры хәҙер ҙә ҡулланыла - "утлыҡса" (бесән һала торған яйланма), "быҙауҙарҙы утлауға сығарҙым", "аттар утлай" һ.б. Бик борондан килгән был матур һүҙ халыҡ телендә, халыҡ хәтерендә һаҡлана. Беҙгә уны бары тик йышыраҡ ҡулланырға һәм көндәлек һөйләшкә индерергә генә кәрәк. Шул саҡта төрөк донъяһына бәйләнгән тамырҙарыбыҙ нығыныр ғына. Шуның өсөн дә мин был һөйләшеүҙе "Шифалы ут" тип атаным.**

# ШИФАЛЫ УТ



**Улайһа, киттекме?** Ҡайҙа, тиһеңме? Күптән түгел ҡарҙан әрселгән тау битләүҙәре, урман аҡландарына инде. Йә булмаһа, ҡала янындағы баҡсаларҙың ҡалҡыуыраҡ урындарына. Күпереп кенә йәшел үләндәр ҡалҡып сыҡҡан икән. Улар шул тиклем йомшаҡ, наҙлыҡай ғыналар. Араларында һары, зәңгәр умырзаялар ҙа, аҡ ҡына кескәй йондоҙсоҡтар, хатта яҫы япраҡ уртаһынан "мин бында" тип үҙенә саҡырып торған инйы сәскәләре лә күренә. Тик бөгөн беҙ сәскәләргә теймәйек. Күҙ яуын алып ҡыуандырып үҫә бирһендәр. Умырзаялар ғүмере былай ҙа ҡыҫҡа икәнен беләбеҙ ҙә.

Иғтибар менән һирәгерәк үҫкән үләндәрҙең араһына баҡһаң, ерҙән бер иле (ҡуш бармаҡ) арауығы ҡыҙғылт төҫтәге, нәҙек кенә оҙон, бер аҙ һарымһаҡ һабағына оҡшаған үләнде күрерһең. Бер һабаҡтан бер нисә ҡыяҡ тармаҡлана. Төптамырына теймәй генә ҡыҙғылт өлөшө тапҡырынан һындырып ал. Еңел генә өҙөлөп тора ул. Башҡа үләндәр кеүек беше түгел. Тик инде һутлы ғына ҡыяҡтың осон тәмләп ҡара. Бер юлы һуған да, һарымһаҡ та ҡапҡан тәм тойолдомо? Һин яңылышмағанһың. Ҡулыңда, халыҡса әйткәндә, "йыуа".

Был тәүге яҙғы үләндең төрлө тарафта шундай атамалары бар: "тау йыуаһы", "әсе йыуа", "талғыр йыуа", "осҡон йыуаһы" һ.б. Һәр хәлдә, әле мин һүҙ алып барған йыуаның тәме әсе, ҡырҡыу, ә һабағы тығыҙ, нәҙек-оҙон. Туғайҙа үҫкән башҡа ҡыяҡлы үләндәрҙән әллә ни айырмаһы ла юҡ һымаҡ. Мин үҙем шәхсән уны бары тик ерҙән ҡалҡып сыҡҡан өлөшөндәге ҡыҙғылт өлөшө һәм ҡыяғының башҡа үләндәрҙән ҡалыныраҡ, төҫө лә ҡуйы йәшел булыуынан һәм бер төптән, һарымһаҡ, һуған һымаҡ, күп ҡыяҡтар айырылып сығыуынан ғына айырам. Йәнә, бик тә бутала башлаһам, үләнде өҙөр алдынан әҫкә өлөшөнән бер семтем генә алам да тәмләп ҡарайым - ҡырҡыу һарымһаҡ тәмәйтһә, был йыуа!

Ғәҙәттә, йыуа үләне, баҡсалағы ҡыр һарымһағы кеүек, бер тирәлә өйкөм-өйкөм булып үҫә. Бының сәбәбе ябай - был ҡыр һарымһағы (әйткәндәй, "әтмәкәс" тә ҡыр һарымһағына ҡарай) сәскәһенән барлыҡҡа килгән орлоҡтар сағыштырмаса ауыр була. Шуға улар алыҫҡа осоп китә алмай. Ҡайҙа сәскә атҡан, шул тирәгә (яҡынса 1-2 метр диаметрында) тарала. Иғтибар итһәгеҙ, бигерәк тә урман ситендәге буйлауҙа үҫкән йыуалар, урман эсенә ҡарай түгел, ә ҡайһы яҡҡа күберәк ел иҫә, шул яҡҡа тарала. Яланда ла, тау түбәһендә лә йыуа "түтәлен" елдең йышыраҡ иҫеү йүнәлешендә эҙләргә кәрәк. Беҙҙең Башҡорт-

ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ

# БЕР ОСРАШЫУ - ҮҘЕ БЕР ҒҮМЕР



(Башы 11-се биттә).

Шунан дауам итте: - Иван Грозный: "Төркизәрҙе еңеп булмай, иң тәүҙә уларҙың ҡатындарын аҙҙырығыҙ, юҡҡа сығарығыҙ, шунан ғына беҙ был халыҡты еңәсәкбеҙ", - тип әйткән тиҙәр бит. Беҙҙең йәмғиәттә лә шулай: хәҙер һеҙ, ҡатын-ҡыҙҙар, донъя дилбегәһен үҙ ҡулығыҙға алһағыҙ, аҙаҡтан көслө ирҙәрҙе күрәсәкһегеҙ. Ир кешенең күренгән һәм күренмәгән көүҙәһе бар, шул күренмәгән көүҙәһе төҙ булһа, уның күләгәһе - ҡатыны ла төҙ була. Ир ҡатынды былай ғына төҙәтә алмай, тип Бәйғәмбәр ҙә киҫәтә. Ә ошо күренмәгән көүҙәнде төҙ итеп ҡуйһаң, ҡатының менән көрәшеп йәшәргә лә кәрәкмәҫ. Ир кешенең беренсе сифаты - яуаплылыҡ һәм ҡарар ҡабул итә белеү. Ирҙәрҙе шуға әҙерләргә кәрәк, ә бөгөн уларҙың яуаплылыҡ та алғыһы килмәй, ҡарар ҙа ҡабул итә белмәйҙәр. Шуға, агинәйҙәр, һеҙҙең эштәрегеҙ бик таман булды. Малайҙарығыҙҙы дөрөҫ тәрбиәләһәгеҙ, киләсәктә үҙегеҙ ҙә яҡшы тормошта йәшәрһегеҙ".

Йыйынға килгән халыҡ ауыл мәсетенә, музейына барып, хөрмәт күрһәткәндән һуң, Ташморон ҡаяһына юлланды. Быға үҙенсәлекле сәбәп тә бар: был ҡаяның таштарында төрлө һындар, рәпсә яҙылған яҙыуҙар күрергә була. Барған һайын үҙгәреп, икенсе төрлөгә әйләнеп тора икән улар. Был юлы таш һындарҙа бүре, эт, ҡатын-ҡыҙ һындары күренде, рус шағиры Александр Пушкиндың да йөҙө һәйкәлләнгәндәй булды. Был ҡыҙыҡлы феноменға биология фәндәре кандидатына, ғүмере буйы тыуған төбәген өйрәнгән һындары Лариса Ишморатова төрлө ғалимдарҙың фекерҙәренә таянып, Йыһан аңында йыйылған мәғлүмәт сағыла уларҙа, тип аңлатма бирҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Осрашыуҙан ҡунаҡтар фәһем алһа, ойоштороусылар аралашыу, күрешеү мөмкинлеге тыуҙыра алыуҙарынан ҡәнәғәт ҡалды. "Беҙҙең һөйләгән һүҙҙәр агинәйҙәрҙең күңеленә ятһа, маҡсатыбыҙға ирештек. Күрһәтелгән йолалар беренһен дә битараф ҡалдырмағандыр, ә Ташморон менән танышыу һәр кем үҙ төбәгендә ер-һыу атамаһы менән ҡыҙыҡһынып, тарихын тергеҙһен, тигәнгә ишаралау булды", - тип, осрашыуға йомғаҡ яһаны Сораман агинәйе Зөбәйҙә Ҡәләмова.**

Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.

✔ **Мин һеҙгә шуны әйтәм: байлыҡ - ул көшөлөктәге аҡса түгел, ә ул килтергән, үҫкәндән-үҫә барған килем. Минең Аггарға биргән ссудаларым уңышлы инвестициялауҙың тәүге уңышлы тәжрибәһе булды.**



останда көнбайыш һәм Себерҙән иҫкән елдәр күберәк (көньяҡтан һәм көнсығыштан тау ышыҡлай).

Тағы ла бер үҙенсәлек - йыуа, һәр үлән кеүек, ҡояш йылыһын ярата. Шуға ла һирәк үләнле, ҡороҡ, ҡалҡыуыраҡ урында күп үҫә. Ә баҡсала (дачала), гәҙәттә, һөрөлгән баҫыу ситтәрендәге ҡалҡыулыҡта, түтәл тирәләрендә, ҡалҡыу, ҡояшлы урында үҫкән алмағас, сейә ағастары төптәрендә күп була. Хатта түтәл уртаһында үҫһә лә, сүп булып ултыра тип, йолҡоп ташлама. Һаҡ ҡына тамыры менән ҡаҙып алып, йыуа үҫергә яраткан, башҡа баҡса йәшелсәләре үҫмәгән урынға күсереп ултыртып ҡуй. Бер, хатта ике йылда ла әллә ни йыуа ашап ҡыуанмаҫһың. Ә бына өсөнсө йылда көн һайын турама, йә бәлеш һалырлыҡ файҙалы витаминдарың булыр.

**Файҙаһы.** Йыуаның файҙаһы, дөрөҫөрәге, ҡиммәте: оҙон ҡыш буйына төрлө минераль матдәләр, витаминдарға танһыҡлаған организмды туйындырыусы булыуында. Иң мөһиме - был витамин өсөн аҡса түләргә лә, бик күп физик көс түгергә лә кәрәкмәй. Хатта ризыҡҡа ҡулланыуы ла еп-еңел. Июнь айҙары башланғас, әлбиттә, баҡсала редис, һуғандар өлгөрә - йыуаның ҡиммәте бөтә. Әммә яҙ менән йәй алышынған мәлдә йыуа - алыштырғыһыҙ йәшелсәләрҙең береһе. Береһе тием, сөнки халыҡта "йыуа", "яҙ үләне" атамаһы менән йөрөгән тағы ла әллә күпме үлән бар (мәсәлән, "һаҫыҡ йыуа", "айыу һуғаны" (черемша), "балтырған" (борщевик, сныть), "ҡымыҙлыҡ" (горец альпийский, кислица), "кесерткән", "ҡуҙғалаҡ" һ.б.). Бөгөнгө һүҙем бары тик әсе йыуа тураһында ғына. Сөнки башҡа үләндәр тураһында яҙмалар табырға була. Ә бына әсе йыуа тураһында аҙыраҡ, ә файҙаһы башҡаларға ҡарағанда хатта күберәк тә.

Көнсығышта был үләнде "ҡытай һарымһағы" тиҙәр һәм баҡсаларҙа махсус рәүештә сәсеп үҫтерәләр һәм һуған, һарымһаҡ һымаҡ тәрбиәләп, ҡарап, көҙгә тиклем ризыҡҡа ҡулланалар. Исеменән үк күренеүенсә, был үлән һуғандан бигерәк һарымһаҡҡа яҡын. Тәме лә, файҙаһы ла, сәскәләре лә, орлоғо ла һарымһаҡҡа оҡшаш. Ҡытайҙа хатта "кара һарымһаҡ"ты ла үҫтерәләр. Ул да, тәбиғәт шарттарында үҫкән һәр үлән кеүек, файҙалы матдәләргә бик бай.

Йыуаның һуған менән ҡорҙашлеген раҫлаусы, баҡсала махсус үҫтерелгән бер үлән бар. Ул "Лук душистый Априор" тип атала. Күреүегеҙсә, бер кем дә һуғандың үҙен "хуш еҫле" тип әйтмәҫ. Ә был үләндән үҙенсәлекле һарымһаҡ еҫе аңҡып тора. Тимәк, йыуала һуған менән һарымһаҡта булған бар файҙалы матдәләр тупланган. Бигерәк тә яҙғыһын көс тупларға ярҙам итеүсе С витамины күп унда. Еҫе аңҡып торғас, эфир майҙары күп. Кешегә кәрәкле майҙар һәм аминокислоталар бар. Йәнә, бик күп минераль матдәләр йыйылған (иғтибар итһәгеҙ, йыуа ташлы тауҙарҙың битләүен ярата. Ә тауҙа, таштарҙа минералдар күп). Мин ғалим-биолог түгел, интернеттан алған мәғлүмәтте генә еткерәм: йыуала көкөрт, фтор, калий, кальций, хатта йод, бор, тимер, баҡыр, селен, цинк, марганец кеүек минераль матдәләр бар. Белеүегеҙсә, ҡайһы бер витамин кеше организмы көндәлек ризыҡты эшкәрткәндә барлыҡҡа килә, ә бына минералдарҙы бары тик тукланған ризыҡ аша, үҙгәртелмәгән көйө генә алып була. Шул мәғлүм, үсемлектәрҙәге минералдар кеше организмына яраҡлы миҡдарҙа һәм тулыһынса үҙләштерелерлек сифатта була.

**Медицинала.** Минеңсә, йыуаның төп дауаһы - уның әселегендә. Был файҙалы үләнде күп итеп ашап булмай. Ике-өс төптө ашағас та организмдағы "әске бер тауыш" башҡа ашарға кәрәкмәгәнен әйтә. Әммә ике-өс сәғәттән йыуаны тағы ла ашағы килә башлай. Тимәк, йыуаның һуты ашҡаҙан-эсәк юлдарына килешә. Аш эшкәртеүҙә яҡшырта. Гастрит, ашҡаҙан елһенеүе (язва желудка), бәйән (двенадцатиперстная кишка) сирҙәренән яфаланғандарға ла ашарға ярай йыуаны. Тик айырым арауыҡ аша (1-2 сәғәт) берәр төптән башлап ашарға. Бик ҡурҡҡандар йыуаны оҙаҡ итеп сәйнәп ашағандан һуң ярты стакан таҙа шишмә һыуы эсеп ҡуя ала. Йыуанан һуң башҡа бер ни ҙә ашамай 2-3 сәғәт йөрөһәң - нәҙек һәм йыуан эсәктәге сир тыуҙырыусы микроорганизмдарҙан да ҡотолорға мөмкин. Ғалимдар асыҡлауынса, йыуалағы матдәләр икмәк әсеткеһе бәшмәгән (мицелий) кәмәтә ала. Ә ҡыш буйына ит, икмәк ризыҡтары ашау һәм аҙ хәрәкәтләнеү эсәктәрҙә тап шул "икмәк әсеткеһе бәшмәге" (дрожжи) йыйылыуға килтерә. Халыҡса әйткәндә, "һауа йыйылыу", "эс күбеү"ҙе кәмәтә. Ә был иһә ашҡаҙан-эсәктәрҙең дөрөҫ эшләп китеүенә булыша.

**Интернеттан.** Йыуаны борон ашҡаҙан һәм аш эшкәртеүе боҙолғанда, ҡатын-ҡыҙҙарҙың климаксы осоронда, тын юлы ҡыҫылып быуылғанда, эсәктәге ҡылыйландарҙы ҡыуғанда, зәңге, тиф, грипп, дизентерия кеүек йоғошло ауырыуҙар мәлендә, йәнә күреүҙе яҡшыртыу, ирегеттәрҙең енси көсөн арттырыу өсөн күп ҡулланғандар. Борон йыуаны аҙ ғына бешекләп, оҙаҡ йүнәлә торған сей ярағә, бешкән урындарға ябғандар.

**Оҙаҡҡа һаҡлау. Туңдырыу.** Таҙа целлофан моҡсайҙарға йыуылмаған, әммә артыҡ үләндәрҙән яҡшылап таҙартылған йыуаларҙы услап (бер моҡсайға ике ус тирәһе) турамай ғына буйлап һалып, моҡсайҙы ҡыҫып уратығыҙ ҙа туңдырғыс (морозильник) һауытына һалып ҡуйығыҙ. Аш йә картуф бешергәндә, хатта турамаларға ла ошо ҡапсыҡтан алып, туң көйөнсә генә бысаҡ менән турап (ул мурт ҡына була, еңел турала) кәрәгенсә алаһың да, ҡалғанын кире туңдырғысҡа һалып ҡуяһың. Хуш еҫе лә, тәме лә, төҫө лә һаҡлана.

**Киптереү.** Бының өсөн махсус киптереү яйланмаһы кәрәк. Шунда 1-2 см ҡалынлығында йәйеп һалып, 4-5 сәғәт 50 градуста киптерергә. Шығырҙап тормаһа, тағы ла аҙыраҡ тоторға. Кипкән йыуаны сепрәк моҡсайға һалып, тышынан полиэтилен моҡсай кейҙереп, бүлмәлә һаҡларға мөмкин. Кәрәк саҡта ҡуш услап алып, ыуып, тәмләткес итеп ашҡа ҡушаһың.

**Тоҙлау.** Хатта тоҙлап та була. Бер литрлыҡ банкаға 0,5-1 см оҙонлоҡта туралған йыуаны (хатта ит турағыстан үткәрһәң дә ярай) 2-3 см ҡалынлыҡта итеп ағас ҡалаҡ менән төйөп һалаһың да өҫтөнә тоҙ һибәһең. Шулай банка тулғансы дауам итәһең. Банканы һыуыҡта һаҡларға. Кәрәк саҡта тоҙ урынына ашҡа, турамаға һалып ебәрәһең.

Рубриканы
**Лилиә ҠӘЙЕПОВА**
алып бара.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Елһенеүгә ҡаршы 10 суперпродукт

Күп авторҙар елһенеүгә ҡаршы сифаттары булған 10 продуктты билдәләй: һарымһаҡ, һуған (башлы, татлы, йәшел, шинтт, шалои), арпа, йәшел тәмләткестәр, ҡарабойҙайҙың үҫентеләре һәм ярмаһы, ҡуҙаҡлылар, яҫмыҡ борсаҡ, әсе борос, сәтләүектәр һәм орлоҡтар, брюссель кәбеҫтәһе, йогурт һәм кефир.

## Оло йәштә туҡланыуҙың алтын ҡағиҙәләре

♦ Мал майын (майлы ит, майлы ҡош ите, мал һәм ҡош майы, колбаса изделиелары, ныҡ майлы һөт продукттары - аҡ май, һөт өҫтө, ҡаймаҡ) һәм холестерин булған продукттарҙы (эсәк-ҡарын, йомортҡа һарыһы, балыҡ ыуылдырығы) ҡулланыуҙы сикләргә.

♦ Калориялылығы буйынса ябай шәкәрҙе (шәрбәтле, кондитер изделиеларын) ҡулланыуҙы 10 процентҡа тиклем кәметергә.

♦ Аш тоҙон ҡулланыуҙы көнөнә 5 грамға тиклем кәметергә.

♦ Рационды омега-6 һәм омега-3 майҙары (көнбағыш, зәйтүн, етен, соя, рапс майҙары; майлы балыҡ - скумбрия, сардина, сельдь иваси, палтус, һөмбаш) сығанағы менән байытырға.

♦ Про- һәм пребиотиктар менән байытылған, майлылығы аҙ булған әсегән һөт продукттарын ҡулланырға.

♦ Күҙәнәклеккә бай булған (сей һәм бешкән йәшелсәләр, емеш-еләк, көрпәле һәм ярҙырылмаған ярмалы икмәк) продукттар ҡулланырға.

♦ Магний һәм калий тоҙҙары күп булған продукттар (тары, дөгө, һоло ярмаһы, ҡара емеш, күрәгә, кәбеҫтә, кишер, сөгөлдөр, картуф, сәтләүектәр, һөт, ит, көрпәле һәм ярҙырылмаған ярмалы икмәк) ҡулланырға.

♦ С һәм Р витаминдары сығанағы булған продукттарҙы (гөлйемеш ҡайнатмаһы, әфлисун, татлы ҡыҙыл борос, ҡара малаш, ҡарағат, петрушка, укроп, йәшел һуған, крыжовник) ҡулланырға.

♦ В төркөмө витаминдары күп булған продукттарҙы (эре тарттырылған он икмәге, ярмалар - ҡарабойҙай, һоло, тары, һөт ризыҡтары, балыҡ) ҡулланырға.

♦ Көнөнә 4-5 тапҡыр ашарға. Ризыҡтар майҙа түгел, һыуҙа, парҙа бешерелгән, томаланған булһа, тағы ла яҡшыраҡ.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

## Байығыуҙың өсөнсө ысулы: "Аҡсаны "эшләргә" мәжбүр ит"

Өсөнсө көндө лә Аркад үҙенең уҡыусылары менән байығыу ысулдары тураһында һөйләшеүҙе дауам итә:

- Шулай итеп, һеҙ үҙегеҙҙең барлыҡ килемдәрегеҙҙең ундан туғыҙ өлөшөн көшөлөккә һала бараһығыҙ һәм ул тула башлай, - ти ул. - Һеҙ үҙегеҙҙең арта барған ошо аҡсағыҙҙы һаҡлар өсөн барлыҡ сығымдарығыҙҙы контролдә тотаһығыҙ.

Ә хәҙер ошо аҡсаны нисек итеп "эшкә ҡушыу" һәм арттырыу тураһында уйлашайыҡ. Әлбиттә, көшөлөктәге аҡса ниндәйҙер ҡәнәғәтләнеү килтерә һәм йәнде йылытып тора, ләкин улар әле бер ниндәй ҙә килем килтермәй.

Аҡсаны нисек итеп "эшләргә" мәжбүр итергә һуң? Минең тәүге инвестициялау тәжрибәм уңышлы булманы һәм мин барыһын да юғалттым. Уныһын һуңыраҡ һөйләрмен. Аггар исемле щиттар эшләү буйынса оҫтаға биргән ссудам тәүге табыш килтергән инвестициям булды. Аггар йыл да үҙенең оҫтаханаһында файҙаланыу өсөн диңгеҙ аръяғынан партиялап бронза һатып ала торғайны. Ҡайһы саҡта ул башҡаларҙан да аҡса алып тора. Ул намыҫлы кеше ине. Щиттарын һатыу менән бурысҡа алған аҡсаһын да ҡайтара, уға өҫтәп проценттар ҙа бирә. Йәғни уға бурысҡа аҡса биреп торған һайын мин уларҙы янынан проценттар менән ҡайтарып ала торғайным. Шуға ла минең капиталым ғына түгел, ул килтергән килемем дә арта барҙы.

Мин һеҙгә шуны әйтәм: байлыҡ - ул көшөлөктәге аҡса түгел, ә ул килтергән, үҫкәндән-үҫә барған килем. Минең Аггарға биргән ссудаларым уңышлы инвестициялауҙың тәүге уңышлы тәжрибәһе булды. Белемемдә һәм тормош тәжрибәмдә арттыра барған һайын, минең ссудам һәм инвестициям да үҫте, улар менән бергә капиталым да арта барҙы. Шулай итеп, аҙ ғына килемдән башланған байлығым әллә күпме алтын тәңкәләр алып килде.

Аҡса күләме етерлек төшөм килтергәндә тиҙерәк арта. Бер фермерҙы миҫалға килтерәм. Тәүге улы тыуғас, ул бер ростовщикҡа ун көмөш тәңкә алып бара һәм улына егерме йәш тулғансы уларҙы күпмелер процент менән һаҡлауҙы үтенә. Ростовщик риза була һәм үҙ шартын әйтә, йәғни ул түләгән процент һәр дүрт йыл һайын был көмөш аҡсалар хаҡының дүрттән бер өлөшөн тәшкил итәсәк, ти. Улына егерме йәш тулғас, фермер тағы ла ростовщикҡа мөрәжәғәт итә һәм үҙенең көмөш тәңкәләренең яҙмышын һорай. Ростовщик уның ун көмөш тиненең 30-лап көмөш тингә артҡанын әйтә. Фермер бик ҡәнәғәт ҡала. Әлегә улына был аҡсалар кәрәк булмай, шуға ла ул был аҡсаларҙы тағы ла ростовщикта ҡалдыра. Улына 50 йәш булғанда ростовщик уға 167 көмөш тин түләй. Шулай итеп, 50 йыл инвестициялау ваҡытында фермерҙың аҡсаһы 17 тапҡырға арта.

**Джорж С.КЛЕЙСОН.**
**(Дауамы бар).**



### 21 МАЙ
### ДҮШӘМБЕ
### БСТ

Профилактика на канале.
14.00 "Итоги недели".
14.45 "Специальный репортаж" (12+).
15.00 "Наука 102" (12+).
15.30 "Книга сказок".
15.45 "Байтус" (6+).
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Перекличка" (6+).
16.30, 17.30, 21.30 Новости.
16.45 "Интервью" (12+).
17.00 "Наши годы" (12+).
17.45 "Красная кнопка" (16+).
18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).
19.00 "Вечерний телецентр".
19.30 "Бай" (12+).
20.15 "Сәңгелдәк".
20.30 "Бизнес-проба" (12+).
20.45 "Дорожный патруль" (16+).
21.00 "Аль-Фатиха" (12+).
22.00 "Спортбар".
23.15 "Автограф" (12+).
23.45 "Весело живем" (12+).
24.00 "Ворчун". Худ. фильм (12+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
02.30 "Бәхетнамә" (12+).

### 22 МАЙ
### ШИШӘМБЕ
### БСТ

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Исаев". Сериал (12+).
11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45 "Бизнес-проба" (12+).
12.00 "Счастливый час".
13.00 "Күңелем моңдары" (12+).
13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
14.45, 16.45 "Интервью" (12+).
15.00 "Дорога к храму".
15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).
15.45 "Бауырһаҡ".
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Семәр".
17.00 "Дознание" (16+).
17.45 "Орнамент" (12+).
18.00 "Бай бакса" (12+).
19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".
19.30 "Автограф" (12+).
20.15 "Сәңгелдәк".
20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).
20.45 "Криминальный спектр" (16+).
21.00 "Уфимское "Времечко".
23.00 "Башҡорт йыры-2018" (12+).
23.45 "Весело живем" (12+).
24.00 "Амели". Худ. фильм (16+).
02.00 "Бәхетнамә" (12+).
02.45 Т.Миннуллин. "Сумасшедший" (12+).

### 23 МАЙ
### ШАРШАМБЫ
### БСТ

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Исаев". Сериал (12+).
11.00 "Наука 102" (12+).
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45 "Криминальный спектр" (16+).
12.00 "Счастливый час".
13.00 "Тәмле" (12+).
13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
14.45, 16.45 "Интервью" (12+).
15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).
15.30 "Городок АЮЯ".
15.45 "Ал да гөл" (6+).
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Физра".
17.00 "Моя республика" (12+).
17.45 "Орнамент" (6+).
18.00 "Башҡорттар" (6+).
19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".
19.30 "Алтын тирма".
20.15 "Сәңгелдәк".
20.30 "Полезные новости" (12+).
20.45 "Дорожный патруль" (16+).
21.00 "Историческая среда" (12+).
23.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).
23.45 "Весело живем" (12+).
24.00 "Ас из асов". Худ. фильм (12+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
02.15 "Бәхетнамә" (12+).

### 24 МАЙ
### КЕСАҘНА
### БСТ

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 "Исаев". Сериал (12+).
11.00 "Моя планета Башкортостан"
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45 "Дорожный патруль" (12+).
12.00 "Счастливый час".
13.00 "Күңелем моңдары" (12+).
13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
14.45, 16.45 "Интервью" (12+).
15.00 "У дачи" (12+).
15.30 "Борсаҡ".
15.45 "Кош юлы. Балалар" (6+).
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Йырлы кәрәҙ".
17.00 "Лидеры региона" (12+).
17.45 "Современник".
18.00 "Үткән ғүмер" (12+).
19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".
19.30 "Башҡорттар" (6+).
20.15 "Сәңгелдәк".
20.30 "Полезные новости" (12+).
20.45 "Криминальный спектр" (16+).
21.00 "Уфимское "Времечко".
23.00 "Колесо времени" (12+).
24.00 "Бинго-бонго". Худ. фильм (16+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
02.15 "Бәхетнамә" (12+).

### 25 МАЙ
### ЙОМА
### БСТ

07.00 "Сәләм" (12+).
10.00 Док. фильм "Алсу. Я не принцесса" (12+).
11.00 "Автограф" (12+).
11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.
11.45 "Криминальный спектр" (16+).
12.00 М.Кунафин. "Раб Божий предполагает" (12+).
13.30 "Күңелем моңдары" (12+).
14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).
14.45 "Бала-саға" (6+).
15.30 "Сулпылар".
15.45 "Шәп арба" (6+).
16.00 "Гора новостей".
16.15 "Зеркальце" (6+).
16.45 "Специальный репортаж" (12+).
17.00 "100 имен Башкортостана" (12+).
17.45 "Замандаш" (6+).
18.00 "Йома".
19.00 "Хазина о Хазине".
19.30 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).
20.15 "Сәңгелдәк".
20.30 "Полезные новости" (12+).
20.45 "Большой чемодан" (6+).
22.00 "Наука 102" (12+).
23.00 "Байыҡ-2018" (12+).
24.00 "Интуиция". Худ. фильм (12+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).
02.00 Г.Каюмов. "Наследство" (12+).

### 26 МАЙ
### ШӘМБЕ
### БСТ

07.00 "Доброе утро!" (12+).
07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).
08.00 "Гензель и Гретель" (12+).
09.30 "Здоровое решение" (12+).
10.00, 21.00 "100 имен Башкортостана"
10.30 "Большой чемодан" (6+).
11.15 "У дачи" (12+).
11.45 "Орнамент" (12+).
12.00 "Тәмле" (12+).
13.00 Замандаш" (6+).
13.15 "Учу башкирский язык".
13.30 "Бай" (12+).
14.00 "Дарю песню" (12+).
16.00 "Байыҡ-2018" (12+).
17.00 "Концерт Нефтекамской государственной филармонии".
19.00 "Колесо времени" (12+).
20.00 "Весело живем" (12+).
20.15 "Сәңгелдәк".
20.30 "Күңелем моңдары" (12+).
21.30 Новости.
22.00 "Следопыт" (12+).
22.30, 02.00 "Итоги недели" (на башк. яз.).
23.15 "Башҡорт йыры-2018" (12+).
24.00 "Обитель проклятых". Худ. фильм (18+).
По окончании: Новости (на башк. яз.).

### 27 МАЙ
### ЙӘКШӘМБЕ
### БСТ

07.00 "Доброе утро!" (12+).
07.45 Новости (на башк. яз.).
08.00 "Фиксики".
09.00 "Йома".
09.30 "Бай бакса" (12+).
10.00 "Перекличка" (6+).
10.15 "Выше всех!" (6+).
10.30 "Ал да гөл" (6+).
10.45 "Книга сказок".
11.00 "Байтус" (6+).
11.15 "Сулпылар".
11.30 "Гора новостей" (6+).
11.45 "Алтын тирма" (12+).
12.30 Итоги недели (на башк.яз.).
13.15 "Учу башкирский язык" (6+).
13.30 "Үткән ғүмер" (12+).
14.00 "Дарю песню" (12+).
15.15 "Башҡорттар" (6+).
15.45 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа" (12+).
16.00 "Дорога к храму".
16.30 "Как прекрасен этот мир" (12+).
17.30, 01.00 "Крысиные бега". Худ. фильм (12+).
19.30 "Бизнес-обзор" (12+).
19.45 "Лидеры региона" (12+).
20.15 "Кош юлы. Балалар" (6+).
20.30 "Моя республика" (12+).
21.00 "Дознание" (16+).
21.30 "Итоги недели".
22.15 "Специальный репортаж" (12+).
22.30 Ток-шоу "Красная кнопка" (16+).
23.15 "Вечер.com" (12+).
24.00 "Свидание с джазом" (12+).

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Май (Шәғбан - Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (6) дүшәмбе | 3:02 | 3:32 | 5:02 | 13:30 | 19:53 | 21:23 | 22:53 |
| 22 (7) шишәмбе | 3:01 | 3:31 | 5:01 | 13:30 | 19:55 | 21:25 | 22:55 |
| 23 (8) шаршамбы | 3:00 | 3:30 | 5:00 | 13:30 | 19:57 | 21:27 | 22:57 |
| 24 (9) кесе йома | 2:58 | 3:28 | 4:58 | 13:30 | 19:58 | 21:28 | 22:58 |
| 25 (10) йома | 2:57 | 3:27 | 4:57 | 13:30 | 20:00 | 21:30 | 23:00 |
| 26 (11) шәмбе | 2:56 | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 20:01 | 21:31 | 23:01 |
| 27 (12) йәкшәмбе | 2:54 | 3:24 | 4:54 | 13:30 | 20:03 | 21:33 | 23:03 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ЭТО ПОЛЕЗНО ЗНАТЬ

# Обогреватель с эффектом горячего кирпича

## Современный вариант русской печи от завода "ТеплЭко"




**В старину русская печь занимала половину избы, требовала внимания и заботы, а за отдаваемое тепло заставляла человека поработать. Зато в доме всегда было тепло и комфортно. Современная система центрального отопления избавила нас от необходимости растапливать печь и подкидывать дрова, но многие все же не отказались бы обзавестись хотя бы "буржуйкой".**

Что ж, мечты сбываются! Не "буржуйкой", а целой русской печью сегодня может обзавестись каждый, при этом займет новая печь всего *около одного квадратного метра на стене,* не потребует дров и вообще какого-либо внимания, ее всего лишь надо включить в розетку.

Речь идет об экономичном обогревателе **"ТеплЭко",** который сочетает в себе лучшие теплоносные характеристики кирпича русской печки и современные технологии, сделавшие его компактным и экономным.

### МЕЧТЫ О ТЕПЛЕ

Во многих квартирах батареи то греют, то не греют. Если в мае квартирную "печку" можно отключить, в сентябре ее не включишь, так как отопительный сезон еще не начался. А еще иногда батареи засоряются... А еще падает давление в системе... А еще... Да мало ли отговорок мы слышали о том, почему в квартире вдруг становится холодно. Послушав о причинах похолодания, мы достаём обогреватели, какие у кого есть: масляные, тепловентиляторы, калориферы. Одни сушат воздух, другие угрожают пожаром, к третьим нельзя подпускать детей. В общем, мороки с ними не меньше, чем с громадной русской печью. При этом они еще крайне "прожорливы": счет за электроэнергию лучше оплачивать с закрытыми глазами!



Обогреватель **"ТеплЭко"** разом решает все эти проблемы. Он представляет собой декоративную панель, внутри которой спрятан хромоникелевый нагреватель, залитый составом из кварцевого песка. **"ТеплЭко"** можно использовать, как отдельно, так и создавать отопительные системы - количество обогревателей зависит от площади. Один обогреватель устанавливается на 9 квадратных метров, при условии стандартной высоты потолков. До требуемой температуры такая панель нагревается за 10-15 минут, а остывает, как плотная кирпичная стена - несколько часов.

**"ТеплЭко"** не сушит воздух, не сжигает кислород, пожаробезопасен (так как поверхность не нагревается более чем до 98 градусов) и в четыре раза экономнее обычного чайника (даже за сутки работы одна панель потребляет всего 2,5 кВт при использовании терморегулятора). Номинальная мощность обогревателя: 400 Вт, размер: 600 мм*350мм*25мм, вес: 12 кг.

### ВЛИЯНИЕ НА ЗДОРОВЬЕ ЧЕЛОВЕКА

Тепло - это инфракрасные лучи, но не все из них безопасны для человека, только те, которые находятся в диапазоне излучения человеческого тела - от 6 до 20 мкм. Внешнее излучение с такими длинами волн наш организм воспринимает как своё собственное и интенсивно его поглощает. За счет этого в организме активизируется микроциркуляция крови, ускоряется метаболизм, улучшается самочувствие, исчезает усталость. Природный источник длинноволновых инфракрасных лучей - это солнце, а бытовой - русская печь, излучающая тепло, комфортное для организма. Обогреватели **"ТеплЭко"** используют естественные свойства кварцевого песка накапливать тепло, а затем долгое время отдавать его в длинноволновом инфракрасном диапазоне по принципу горячего кирпича. В отличие от всех других обогревателей, **"ТеплЭко"** не только безвреден, но и оказывает благотворное влияние на здоровье человека.

### САМОСТОЯТЕЛЬНЫЙ И НАДЁЖНЫЙ

Главное преимущество обогревателя **"ТеплЭко"** - его самостоятельность. Оптимальную температуру, которую он должен поддерживать в комнате, можно задать с помощью терморегулятора. *И все. Он будет работать, создавая атмосферу настоящего домашнего, "обжитого" уюта - когда можно играть с детьми на полу, спокойно спать, ворочаясь и раскрываясь, какие бы морозы ни трещали за окнами.* Еще обогреватель **"ТеплЭко"** идеально подходит для дачи, гаража и офиса. Несколько обогревателей способны полностью заменить центральное теплоснабжение.

Завод **"ТеплЭко"** является единственным в России производителем энергосберегающих обогревателей из кварцевого песка высокой степени очистки. Купить обогреватель вы можете в нашем фирменном магазине или заказать доставку по телефону. А для установки обогревателя потребуется минимум сил и сноровки, три самореза и отвертка.

И пусть простота обогревателя не вызывает никаких сомнений в его долговечности. Как известно, все гениальное устроено довольно просто. И обогреватель **"ТеплЭко"** может работать практически вечно, ведь его нагревательные элементы не контактируют с воздухом и не окисляются. Гарантия 5 лет, срок эксплуатации не ограничен.

**ЭКОНОМИЧНЫЙ** 2-3,5 кВт в сутки при использовании терморегулятора
**БОЛЬШОЙ СРОК СЛУЖБЫ** Срок службы не ограничен, гарантия 5 лет
**БЕЗОПАСНЫЙ** 100% пожаробезопасность
**КОМФОРТНЫЙ** Не сушит воздух, не сжигает кислород
**ПРОСТОЙ В УСТАНОВКЕ** Справится любой хозяин дома
**ЭКОЛОГИЧНЫЙ** Наша продукция соответствует самым высоким санитарным требованиям
**ПОЛЕЗНЫЙ ДЛЯ ЗДОРОВЬЯ** Улучшает самочувствие, исчезает усталость

СДЕЛАНО В РОССИИ
Подтверждено европейское качество
CE

ТЕПЛЭКО

**Обогреватель "ТеплЭко" является победителем конкурса "100 лучших товаров России 2015 г., 2017 г.", патент РФ № 152820 "Лучшие товары и услуги ГЕММА 2017 г."**

Единственный фирменный магазин компании "ТеплЭко" в Уфе расположен по адресу:
**ул. Конституции, 2. Время работы: пн. - суб. с 10 до 20 часов без обеда, воскресенье - выходной. Тел.: (347)214-93-08, (964) 956-23-00, 8 800 333 05 35 (звонок бесплатный по России)**
ОСТЕРЕГАЙТЕСЬ ПОДДЕЛОК!
tepleko.ru

На правах рекламы.

✓ *"Осенний гигант" сорты эре, аҡ төҫтәге уңышы менән ҡыуандыра. Был редистарҙы баҙҙа ике айға тиклем һаҡларға була, тәмен дә, һутын да юғалтмай. Редис эре булһын өсөн уны йыш сәсергә ярамай.*



БАҠСА

# ЙЫЛДЫ ТУЙҘЫРЫР...

## яҙҙың көнө



**Яҙҙың бер көнө йылды туйҙыра, тиҙәр. Май баҡсала эштәр ҙә күп була. Ошо хаҡта һөйләшәйек.**

### Тәүге мәшәҡәттәр

● Май башында уҡ һуған менән редис сәскәнһегеҙҙер. Уларҙы бер түтәлгә сәсергә лә була. Һуған үҫкәнсе, редисты ашап бөтәһегеҙ. Әгәр ҙә редисты артыҡ яратмаһағыҙ, ошо ысулды ҡулланығыҙ. Редисҡа һыуҙы йыш һибергә кәрәк. Ике көнгә бер һибеп тормаһағыҙ, редис ваҡ, әсе буласаҡ. Асыҡ һауала "Данко", "Маяк", "Белый клык", "Октава" сорттары яҡшы үҫә. "Октава" сорты аҡ төҫтә, тәмле лә, майланып тора, уны өҫтәлде биҙәү өсөн ҡулланырға мөмкин. Был сорттар һаҡлауға ла уңайлы. Һуңыраҡ уңыш алыу өсөн ике төрлө сорт тәҡдим итәбеҙ: "Удача" сорты 18 см-ға еткән боҙбармаҡ формаһында, ә "Осенний гигант" сорты эре, аҡ төҫтәге уңышы менән ҡыуандыра. Был редистарҙы баҙҙа ике айға тиклем һаҡларға була, тәмен дә, һутын да юғалтмай. Редис эре булһын өсөн уны йыш сәсергә ярамай. Аралары 5-6 см-ҙан кәм булмаһын.

● Ҡышҡа сәсеп ҡалдырған һарымһаҡ та сәскә ата башланы. Ошо осорҙа ул да һыуҙы ярата. Һарымһаҡтың тамырҙары өҫтә генә була, шуға ла тупраҡ ҡоро булһа, үҫемлек һарғая башлай.

● Майҙа ағас төптәренә ҡайһы бер ҡоротҡостарҙан һаҡлаусы үҫемлектәр сәсәбеҙ - ағас бетенән настурция, тырнаҡ сәскәһе, бәрхәт сәскәһе, бәшмәк сирҙәренән һарымһаҡ һаҡлай. Баҡса еләгенең тамырҙарына зыян итеүсе паразит селәүҙәрҙән (ғилми әҙәбиәттә уларҙы нематода тип йөрөтәләр) һаҡланыу өсөн еләк түтәленә бәрхәт, календула сәскәләре сәсегеҙ. Бәрхәт сәскәһе үҫемлекте бәшмәк ауырыуынан һаҡлар, календула шулай уҡ бәшмәк ауырыуҙарын, мәҫәлән, фузариозды булдырмай.

● Сәскә атмаҫ элек емеш ҡыуаҡтарының төбөн йомшартырға. Еләккә теймәйбеҙ, сөнки аҙ ғына ҡырауҙан да улар өшөйәсәк. Был эште еләк сәскә атып бөткәнгә тиклем ҡалдырығыҙ. Баҡса еләге тупраҡты ныҡ ярлыландыра, шуға ла бер урында 4-5 йыл үҫкәндән һуң, уларҙың урынын алыштырығыҙ. Тупраҡ уңдырышлылығын ҡайтарһын өсөн уның урынына тәүге йылда фасоль, кишер сәсәләр. Унан һуң ҡабаҡ, унан һуң картуф, баклажан, петуния, физалис сәсергә. Һуңынан еләгегеҙ кире үҙенең урынына ҡайта ала.

● Баҡсаға бал ҡорттарын йәлеп итеү өсөн емеш ағастары төбөнә бал биреүсе үҫемлектәр - укроп, клевер, гәрсис сәсергә була.

### Сәскәләр

● Майҙа бер йыллыҡ сәскәләрҙе, шулай уҡ бүлбеле сәскәләрҙе сәсәләр. Бейек булып үҫә торған сәскәләрҙе, мәҫәлән, георгиндарҙы, хризантемаларҙы артҡараҡ, башҡа сәскәләргә яҡтылыҡты ышыҡламаҫлыҡ итеп ултыртығыҙ. Алғы планға кәкүк емеше, маргаритка, миләүшәләр сәсегеҙ. Үҫемлектәрҙе төҫө буйынса ла яраштырып ултыртығыҙ, ҡыҙыл, алһыу сәскәләр араһына аҡтарын сәсегеҙ, сөнки аҡ төҫ сағыу төҫтәрҙе тағы ла сағыуыраҡ итеп күрһәтә. Сәскә сәсеү өсөн тупраҡты алдан әҙерләгеҙ, серегән япраҡ йәки үлән менән ашлағыҙ. Ваҡытында һыу ҡойоп, сүп үләндәрен утап, һулыған сәскәләрҙе өҙөп торһағыҙ, уларҙың сәскә атыу осоро тағы ла оҙаясаҡ.

● Сәскә үҫтереүселәр араһында пион, башҡортса әйткәндә дөр-дөр сәскәһен яратыусылар күп. Әммә бик нескә был сәскә ҡайһы берҙә сәскә атмай.

Сәскәнең тамыры 3-4 йыл эсендә саҡ нығынып етә. Тап ошо мәлдән улар яҡшылап сәскә ата башлаясаҡ. Пиондың тамыры 5-6 сантиметр тәрәнлектә ултыртығыҙ, унан тәрәнерәк ултыртылһа, сәскә атмаясаҡ. Пион сәскәлеге ағастар, ҡыуаҡтар, башҡа эре үҫемлектәр эргәһенән йыраҡыраҡ урынлашһын. Пионды икенсе урынға күсереп ултыртҡанда, уның тамырын өлөштәргә бүлегеҙ. Юғиһә, сәскә оло ҡыуыҡтың запасы иҫәбенә туҡланып йәшәй һәм яңы тамыр системаһы үҫешмәй, һөҙөмтәлә, пион насар сәскә ата. Тамырҙарҙы бүлеү август аҙағында - сентябрь башында башҡарыла.

Сәскәләр эре булһын өсөн:

✓ сәскәләрҙе ултыртҡан ваҡыттан 4 йыл самаһы ваҡыт үтергә тейеш;

✓ үҫемлекте даими рәүештә туҡландырып тороу кәрәк, миҙгеленә 3-4 тапҡыр минераль ашламалар менән ашлағыҙ;

✓ сәскәгә тумаланған бөрөләрҙе кәрәгенсә генә ҡалдырып, ҡалғандарын өҙөп ташлағыҙ;

✓ сәскә атыр алдынан һәр ҡыуаҡтың тупрағын йомшартып, 3-4 биҙрә һыу ҡойоғоҙ;

✓ алһыу төҫтәге пиондың сәскәләрен асылып етмәҫ элек, ә аҡ төҫтәгеһен сәскәләр тулыһынса асылып бөткәс ҡырҡалар.

### Баҡса еләге

Баҡса еләге һыуыҡҡа бирешеп бара. Шуға ла уны яҙғы һыуыҡтар тамамланғас ҡына былтырғы япраҡтарынан таҙарталар. Еләк яратыусыларға тағы ла бер үҙенсәлекле ысул тәҡдим итмәксебеҙ.

Яңы япраҡтар күренә башлағас, ерен йомшартып, ашламалар менән туҡландырабыҙ ҙа, еләк араларына ылыҫлы ағастарҙың кипкән энәләрен 5 см бейеклегендә түшәйбеҙ. Яңы йыл байрамында ҡулланылған шыршының энәләре лә бара. Йәки энәләрҙе ылыҫлы ағастар үҫкән урынға барып, ерҙән йыйып алаһың. Бына ошо энәләр үләнгә үҫергә ирек бирмәйәсәк, һыу һипкәндә тупраҡты тығыҙламаясаҡ. Хатта һыуҙы ла йыш һипмәйәсәкһегеҙ, сөнки улар дымды яҡшы һаҡлай. Шулай уҡ тупраҡты йомшартып тороу кәрәклеге булмаясаҡ. Йыл ямғырлы килгәндә, еләктәр бысранмаясаҡ. Ҡыҫҡаһы, ылыҫ энәләре түшәһәгеҙ, артыҡ мәшәҡәтһеҙ генә уңыш алырһығыҙ. Бары тик һыу һибеп, яңы формалашҡан еләк үҫентеләрен ҡарап, кәрәкмәгәндәрен өҙөп торорға ғына кәрәк буласаҡ. Бер еләк ҡыуағынан 1-2 генә үҫенте ҡалдырығыҙ һәм ул тамыр ебәрһен өсөн энәләрҙе шылдырығыҙ. Уңыш йыйып алынғас, энәләрҙе йыйып алырға (ергә күмергә ярамай, тупраҡ әселәнә), марганцовка иҙелмәһе һибеп киптерергә һәм киләһе яҙға тиклем ҡоро урында ҡағыҙ тоҡтарҙа һаҡларға. Уларҙы 3-4 йыл ҡулланырға була. Урманда ылыҫ энәләрен ҡоро көндә йыйырға.

### Томат

Томат үҫентеләре бар көсөн япраҡтарға бирмәһен һәм бының менән уңышҡа зыян килтермәһен өсөн бер нисә кәңәш:

✓ теплицала томаттар өсөн туҡлыҡлы тупраҡ әҙерләмәгеҙ. Үҫкән саҡта тиҙәк ашламаһы индермәгеҙ. Быны хатта көҙҙән дә эшләргә ярамай.

✓ күсереп ултыртҡандан һуң тәүге 2-3 аҙнала һыу һипмәгеҙ. Ултыртҡан саҡта соҡорға ҡойолған һыу тамырҙар нығынып китһен өсөн етә. Һыу һипмәй торһаң, тамыр нығыраҡ була. Тәжрибәле баҡсасылар тәүге ботаҡта тәүге емеш төймәләнгәнгә тиклем артыҡ һыу һипмәй. Шул уҡ ваҡытта тупраҡ ныҡ кибеп тә китмәһен. Был хәүефле. Үҫемлек үҫеүҙән туҡтауы, сәскәләре ҡойолоуы ихтимал. Һыуҙы ботаҡтарҙағы уңыш ныҡлап үҫә башлағас һибә башалайҙар. Дым етәме, юҡмы икәнен түбәндәгесә тикшерегеҙ: 10-15 см тәрәнлектәге тупраҡты усҡа алып, ҡыҫып ҡарағыҙ. Әгәр ҙә усты асҡандан һуң тупраҡ таралмаһа - дым етерлек, әгәр ҙә тупраҡ таралып төшһә, һыу һибергә кәрәк. Йыш һыу һибеү һөҙөмтәһендә өҫкө тамыр системаһы ныҡ формалаша, үҫемлек тышҡы факторҙарға бирешеп бара.

✓ азот ашламаһын бөтөнләй ҡулланмағыҙ. Был осраҡта томат үҫентеһе йәшел массаны үҫтерә, ә уңыш биреүҙе һуңғараҡ ҡалдыра.

✓ әгәр ҙә томат буйға үҫеп, сәскә атмай ултыра икән, уға стресс эшләп алығыҙ. Мәҫәлән, һыу һибеүҙе кәметегеҙ. Аҫҡы 1-3 ботағын өҙөп ташлау ҙа файҙа бирә.

✓ үҫентенең аҫҡы ботаҡтарында томаттар формалашып бөтһә лә, ул өҫкә табан үҫеп, сәскә атып тик ултырһа, ботаҡта 5-7 томат ҡалдырып, ҡалғанын өҙөп ташлағыҙ. Юғиһә, уңыш ваҡ буласаҡ.

### СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



#### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 май "Йәшәгән ти..."** (М. Ладо), драмеди 16+
**20 май "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия 16+

#### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**19 май "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова) 0+
**20 май "Волк и семеро козлят"** (А. Рахманкулова) 0+
Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00
**24 май "Хроники путешествия Нильса"** (И. Әлмөхәмәтов). Башлана 12.00 6+

ЯҢЫ КИТАП СЫҠТЫ

# ШИҒЫРҘАР...

## ҡоро хистән генә тормаһын ул

**Зөлфиә Ханнанованың "Мин - башҡорт, тип таныштығыҙ" тип аталған китабының донъя күргәнен ишетеп бер шатланһам, был йөмле китапты күреп, тағы бер ҡыуандым. Ысынлап, һыбайлы төшөп, йәйәүле туктап ҡарарлыҡ ижад емеше был баҫма. Эсендәге байлығын баһалап бөтөп булмаһа, тышлыҡтағы милли кейемдәге авторҙың һүрәтен дә, китаптың шундай оран кеүек яңғыраған атамаһын да юғары, бик юғары баһалар инем. Яңы баҫма хаҡында авторҙың үҙе менән дә һөйләштек.**




▸ **Зөлфиә апай, һеҙҙең һуңғы китабығыҙ менән быныһы араһында арыуыҡ йылдар айырмаһы бар, ахыры?**

- Ун дүрт йыл ята араларында. Был күптән көтөлгән китап. Ниндәйҙер тышҡы сәбәптәр арҡаһында түгел, ә бары үҙемдең хөкүмәт эшенә бирелеп, ижадты икенсе планға күсереп йөрөгәндән оҙаҡлаған баҫма ул. Исемен дә артыҡ аҙапланып эҙләмәнем, үҙемдең бер шиғыр атамаһын алдым. Китапҡа ошо йылдар арауығында йыйылған шиғырҙарым инде, ниндәйҙер элеккерәк яҙмалар ҙа бар. Яҙыусылар ҡулында ҡалын китап күрһәм, минең былдай ҡалын китабым булмаҫ инде ул, тип уйлай инем. Аллаға шөкөр, бына мин дә ҡалын ялтыр баҫмамды ҡулыма алдым.

▸ **Был һеҙгә, моғайын, ҙур стимул. Киләсәктәге ижадта ниндәйҙер үҙгәрештәр булырмы? Һәр хәлдә, донъяға ҡарашығыҙ ҙа сағылыш табалыр бит ижадығыҙҙа?**

- Әлбиттә, минең һәр шиғырымда донъяға ҡарашым, был донъяға ҡатын-ҡыҙ булараҡ ҡарауым, уны нисек ҡабул итеүем ярылып ята.

Киләсәктәге ижадымда тап поэзияла ғына эшләрмен, тип әйтә алмайым. Бәлки, үҙгәрештәр ҙә булыр, бында башҡа жанр күҙ уңында тотола. Әлеге ваҡытта ауылымдың тарихы буйынса баҫма әҙерләйем. Әсәйемдең Дыуан районының Үргә Хәлил ауылы буйынса 13-сө быуаттан алып йыйылған мәғлүмәттәре, яҙмалары, шәжәрәләре бар. Шуларҙы йыйнап, туплап, тәртипкә һалыу өҫтөндәмен.

▸ **Китабығыҙҙың тышында һеҙ милли кейемдә. Был рекламаның бер алымымы, әллә башҡа мәғәнә лә бармы?**

- Баҫманың атамаһына ярашлы рәүештә үҙемдең милли кейемдәге һүрәтте ҡуйырға ҡарар иттем. Реклама итеп түгел, ә рух күрһәткесе итеп. Бында баҫымды минең һүрәткә түгел, ә милли кейемгә - ҡашмауға яһарға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта китап авторының башҡорт ҡатын-ҡыҙы икәнлеге лә күҙгә ташлана. Бының бер гәйебе лә юҡ, минеңсә.

▸ **Шиғырҙарығыҙ үтә хисле лә, шул уҡ ваҡытта ул хистәр эсендә ҡыйыулыҡ, саялыҡ та тойола. Был тойғоларҙың ҡайһыныһы көслөрәк һеҙҙә?**

- Икеһе лә бар. Ваҡыты-ваҡыты менән уларҙың йә береһе, йә икенсеһе ҡалҡып сыға. Ҡоро хистән генә торған шиғырҙарҙың "төмән" тойғомайым, шул уҡ ваҡытта саялыҡтың хисеҙ булыуы ла бары тупаҫлыҡ ҡына булыр ине. Был ике тойғо береһен тулыландырып килә. Шиғырҙарымды ла, үҙемдең булмышты ла.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

ЗАУЫҠ

*Зөлфиә ХАННАНОВА*

### МИН - БАШҠОРТ, ТИП ТАНЫШТЫҒЫҘ!

Яндырылған ауылдарҙың көлдәре беҙ,
Шул көлдәрҙең ҡалҡып сыҡҡан
гөлдәре беҙ.
Ни үкенес: ҡыҫҡа булды көндәребеҙ -
Яндырылған ауылдарҙың көлдәре беҙ...
Яндырылған ауылдарҙың күмере беҙ,
Һеҙҙең хәйер-доғаларға тилмерәбеҙ.
Ил-ер өсөн фиҙа булды ғүмеребеҙ -
Яндырылған ауылдарҙың күмере беҙ...
Яндырылған ауылдарҙың төтөнө беҙ.
Онотмағыҙ беҙҙе, зинһар, үтенәбеҙ!
Илгә хаҡһыҙ ҡаныҡҡандың хөкөмө беҙ -
Яндырылған ауылдарҙың төтөнө беҙ...
Яндырылған ауылдарҙың ялҡыны беҙ.
Онотоrға беҙҙе шулай хаҡлымы һеҙ?
Танымайбыҙ, ысын башҡорт
халҡымы һеҙ?
Яндырылған ауылдарҙың ялҡыны беҙ...
Яндырылған ауылдарҙың йәндәре беҙ.
Сабыйҙар ҙа шәһит китте, йәлләмәгеҙ!
Хәйер, йәлләй беләме ни йәндәрегеҙ
Һеҙ бит хәҙер ғәфләт баҫҡан хәлдәһегеҙ...
Яндырылған ауылдарҙың һағышы беҙ -
Йәнебеҙҙе көлдән эҙләп табышығыҙ!
Беҙҙең алда таҙа булһын намыҫығыҙ:
"Беҙ бөтмәнек!
Мин - башҡорт!" - тип таныштығыҙ!

### СИРЛӘГӘНДӘ

Аҡрын ғына Ер өҫтөнән үтеп барам,
Ҡыҫҡартам, ти, үтер юлды
Яҙмыш - һаран,
Берсә һыҙлай кемдер һалған тел яраһы,
Берсә һыҙлай, әрнеп һыҙлай йөрәк ярам,
Аҡрын ғына теге яҡҡа китеп барам...

Китеп барам, йәнгә яҙам ҡырҙар төҫөн...
Шул ҡырҙарҙың матурлығын йырлар өсөн
Мин килгәйнем. Инде бына үтеп барам...
Ҡоткар, Хоҙай, йырланаһы йырҙар өсөн!

Ашыҡтырма теге яҡҡа, тар ҡәбергә!
Өлгөрәйем хаталарҙы төҙәтергә,
Изгелекте, игелекте күбәйтергә,
Тәүбә һүҙен йөҙ әйтергә, мең әйтергә
Ашыҡтырма теге яҡҡа, тар ҡәбергә...

Унда яуап бирәһем бар ҡырҙар өсөн,
Еңел-елпе егеттәр һәм ҡыҙҙар өсөн,
Әсәйемә мин өҫтәгән һырҙар өсөн,
Яҙылған һәм яҙылмаған йырҙар өсөн.
Йырҙар өсөн...
Йырҙар өсөн...
Йырҙар өсөн...

### АҪЫЛ ИР

Аҫыл ирҙең күңелендә
Әйәрле-йүгәнле ат булыр,
Уға тәрлә ҡаршылыҡтар,
Ығы-зығы ят булыр.

Аҫыл ирҙең йөрәгендә
Ут яныр ялҡын булып,
Тәү ҡарашҡа ғына үҙе
Күренер һалҡын булып.

Аҫыл ирҙең эргәһендә
Ҡатын-ҡыҙ тыйнаҡ булыр,
Холоҡ-фиғеле - тотанаҡлы,
Хистәре йыйнаҡ булыр.

Аҫыл ирҙең аҡылына
Аҡһаҡалдар таң ҡалыр.
Аҫыл ирҙәр йөрөгән ерҙә
Батыр тигән дан ҡалыр!

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КҮҢЕЛЕҢ БУШ БУЛМАҺЫН...

## Алла инмәй ҡуйыр

༄ Ямғырҙа ат һайлама, байрамда ҡыҙ һайлама.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

༄ Буш башҡа барыһы ла инә, буш баштан тағы ла күберәк сыға.

**(Владислав Гжегорчик).**

༄ Юғарыға менеп барғанда осраған кешеләргә иғтибарлыраҡ бул, һин улар менән түбәнгә төшөп барғанда осрашаслаҡһың әле.

**(Уилсон Мизнер).**

༄ Айырым кешеләрҙең яманлығын гонаһ тип атайҙар. Тотош халыҡтың яманлығын милли характер тиҙәр.

**(Вернер Мич).**

༄ Күңелең буш булғанда унда Алла инмәйәсәк.

**(Анри де Монтерлан).**

༄ Ни генә тиһәң дә, донъяла ышанырлыҡ нәмәләр бар әле. Мәҫәлән, бер генә реклама клибы ла насар тамамланмай бит.

**(Роберт Орбин).**

༄ Йоҙроҡтар төйнәлгәндә, асыҡ фекерләү мөмкин түгел.

**(Джордж Нейтан).**

༄ Насар яҡшы шағир булғансы, бөйөк насар шағир булыу һәйбәтерәк.

**(Огден Нэш).**

༄ Эскеселәр артынан да, сәйәсмәндәр артынан да беҙгә йыйыштырырға тура килә...

**(Остин О,Малли).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Хоҙай ике осраҡта йылмая икән. Бына врач ауырыу баланың әсәһенә:"Ҡайғырмағыҙ, мин һеҙҙең улығыҙҙы мотлаҡ дауалаясаҡмын", - ти. Ошоно ишетеп, Алла:"Мин был әсәнең улын үҙемә алырға йыйынам, ә врач уның тәнен дауаламаҡсы", - тип уйлай һәм йылмайып ҡуя. Врач сирле менән булған хәлдең хужаһы итеп тоя үҙен, ә ысын хужа - ул Хоҙай икәнен иҫенә лә алмай.**

**Икенсе тапҡыр Алла ике егеттән үҙ-ара ер бүлешкәнен ҡарап тора. "Был ер - минеке, ә теге өлөшө - һинеке", - ти егеттәрҙең береһе. Алла йылмая һәм былай тип уйлай:"Бар Ер йөҙө минеке генә булғанда, был әҙәм балалары үҙҙәрен ошо ергә хужа тип уйлай".**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 18 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.



«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 866/05